ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

27-3 сентябрь - октябрь (нарысай - ҡарасай) 2024

№38 (1131)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

***Арзанға яҙылып ҡалығыҙ! Мөхтәрәм уҡыусыларыбыҙ, 4 октябрҙән 14-нә тиклемге ун көнлөктә республиканың һәр ҡалаһында-ауылында ПР905 индекслы "Киске Өфө"гә 2025 йылдың беренсе яртыһы өсөн ташламалы хаҡ менән 835 һум 44 тингә яҙыла алаһығыҙ. Гәзитебеҙгә яҙылып, квитанцияларын редакцияға ебәргәндәр араһынан кемдәрҙер матур ғына китаптарға лайыҡ буласағын да онотмағыҙ.***

***МӨХӘРРИРИӘТ.***


БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Ҡартлыҡ ҡасан килә?**



2-3

**Аҡмулла васыятын үтә!**



5

**Мин заманды һынландырам...**



8-9

**Берҙәмлектә - көс**



13


*ҺАЙ-ҺАЙ-ҺАЙ!*

# БАШҠОРТ МИЛЛИ КЕЙЕМЕН...

## төп нөсхәлә күрһәтә "Тамға"



**Ошо көндәрҙә Өфөнөң "Торатау" конгресс-холында IV "Тамға" халыҡ-ара башҡорт милли кейеме оҫталары конкурсының финалы уҙҙы. Быйыл унда республикабыҙҙан, Силәбе, Ҡурған, Ырымбур өлкәләренән, Мәскәү ҡалаһынан, шулай уҡ Италиянан һәм Төркиәнән 60-тан ашыу оҫта ҡатнашты.**



*Гран-при яулаусы Гөлсөм Хөсәйенова (һулдан өсөнсө) үҙенең моделдәре менән.*

Гран-при Өфө районы оҫтаһы Гөлсөм Хөсәйеноваға бирелде һәм еңеүсе 150 мең һумлыҡ сертификат менән бүләкләнде. "Балалар кейеме - реконструкция" номинацияһында беренсе дәрәжә лауреат исеменә Ишембайҙан Гөлгөнә Мәмбәтова, "Башҡорт традицион костюмы аксессуарҙары - реконструкция" номинацияһына Өфө районы Нуғай ауылынан Әлиә Аллағолова лайыҡ булды. Ә бына "Башҡорт халыҡ кейеме - реконструкция" номинацияһында иң яҡшы ир-егеттәр кейемен Өфө районынан Роберт Хәмиҙуллин, ҡатын-ҡыҙҙар кейемен Балаҡатай районынан Сәйҙә Әхтәмова тәҡдим итте.

Быйыл ойоштороусылар тәүге тапҡыр ижади ғаиләләр араһында конкурс үткәрҙе. Әлеге номинацияла беренсе дәрәжә лауреат дипломына Өфөнән Рауза Ғәлиуллина лайыҡ булды.

**(Теманың дауамын 2-се, 6-сы биттәрҙә уҡығыҙ).**

*ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?*

# АҠСАЛАТА АЛ!



**Күп функциялы үҙәккә, почта бүлексәләренә йәки дәүләт хеҙмәттәре порталына мөрәжәғәт итеп, Әсәлек (ғаилә) капиталының тотонолмаған өлөшөн (10 мең һумға тиклем) алырға мөмкин, тип белдерҙеләр Рәсәй Хөкүмәтендә.**

Рәсәй Хөкүмәте Әсәлек капиталының ҡалған өлөшөн бер тапҡыр бирелә торған аҡсаны алыуға йүнәлтеү ҡағыҙәләрен раҫланы. Дәүләт башлығы Владимир Путин тәҡдиме менән балалы ғаиләләр Әсәлек капиталының ҡалған өлөшөн (10 мең һумға тиклем) бер тапҡыр бирелә торған түләү формаһында алырға мөмкин. Ошондай түләүҙе алыу ҡағиҙәләре Министрҙар кабинеты башлығы Михаил Мишустин ҡул ҡуйған ҡарар менән раҫланған. "Һүҙ Әсәлек капиталының күпселек өлөшө торлаҡ шарттарын яҡшыртыу, мәҫәлән, ипотекаға торлаҡ һатып алыу, балаларҙы уҡытыу, инвалид балалар өсөн тауарҙар һәм хеҙмәттәр, шулай уҡ башҡа маҡсаттар өсөн тотонолғандан һуң иҫәптә тороп ҡалған аҡса тураһында бара", - тип асыҡлыҡ индерҙеләр Рәсәй Хөкүмәтенең матбуғат хеҙмәтендә.

Бер тапҡыр бирелә торған аҡса алырға хоҡуҡлы ғаиләләргә дәүләт хеҙмәттәре порталы аша тейешле белдереү ҡағыҙы ебәрелә. Уға өлөшләтә тултырылған ғариза ла беркетелә. Ғаризаны дәүләт хеҙмәттәре порталы, күп функциялы үҙәк йәки почта аша тапшырырға мөмкин. Аҡса түләүҙе тәғәйенләү тураһында ҡарар ҡабул ителгәндән һуң биш эш көнө эсендә ата-әсәләрҙең береһенең банк иҫәбенә күсә.

# КҮПТӘН КӘРӘК ИНЕ!



**Башҡортостан Дәүләт Йыйылышы депутаттары республиканың Административ хоҡуҡ боҙоуҙар тураһында кодексына үҙгәрештәр индерҙе, хәҙер йәмәғәт урындарында кальян һәм никотинлы продукция тартҡан өсөн штраф янай.**

Башҡортостан Дәүләт Йыйылышы рәйесе Константин Толкачев һүҙҙәренсә, йәмәғәт урындарында тәмәке тартҡан өсөн иҫкәртеү яһала йәки 500 һум, ә ҡабаттан закон боҙған өсөн 1000 һум күләмендә штраф һалына. "Әммә был сараларҙы тәмәке тартыуға ҡарата ғына ҡулланырға мөмкин ине. Бөгөн иһә, айырыуса йәштәр араһында, тәмәкенең башҡа төрҙәре: электрон тәмәкеләр, вейптар һәм башҡалар популярлыҡ яулай бара. Уларҙы ҡулланыусылар, тыйыуға ҡарамаҫтан, тирә-йүндәгеләр янында борҡота. Ҡабул ителгән закон никотинлы продукцияны һәм кальян ҡулланыуҙы тәмәке изделиеларына тиңләй һәм быны өсөн иҫкәртеү йәки штраф янай", - тине ул. Закон рәсми баҫылып сыҡҡандан һуң 10 көн үткәс көсөнә инә.

12+

@KISKEUFA

Беҙҙең Телеграм каналға рәхим итегеҙ!

смартфон камераһын төбә

***✓ "Тамға"ларҙың тағы бер уртаҡлашырға теләгән ҡыуаныслы яңылығы бар - еңеүселәрҙе бүләкләгән махсус значогыбыҙ "Тамға"ға быйыл патент алдыҡ! Башҡорт кейеменең барлыҡ төрҙәре лә ошо тамға аҫтында буласаҡ.***



*БЫЛ АЙҘА...*

# ҠАРТЛЫҠ ҠАСАН КИЛӘ?

**Көҙҙөң тәүге айында беҙ йәй миҙгеле һаран булған йылылыҡҡа һәм сыуаҡ көндәргә кинәндек. Ни тиһәң дә, тәбиғәт һуңлап булһа ла үҙенә тейешлене ҡайтарып ала барыбер. Һарысай, икенсенән, әбейҙәр сыуағы мәле лә бит, шуға күрә лә ҡояшлы, йылы көндәр күберәк булды сентябрҙә.**

Әбына ҡарасай ниҙәр менән аптыратыр, ғәжәпләндерер беҙҙе? Әлегә синоптиктар был айҙа көндәрҙең сағыштырмаса йылы буласағын фаразлай: тәүге ун көнлөктә көндөҙгө температура 12 градус, ә төндә 7 градус тәшкил итһә, икенсе ун көнлөктә көндөҙ 9 градус йылы булып, төндәрен 0 градусҡа тиклем һалҡындар төшә башлаясаҡ - был Гисметео фаразы булды. Башҡортостан гидрометүҙәк күҙаллауҙары буйынса, Урал буйы төбәктәрендә көҙҙөң икенсе айы ғәҙәттәгенән йылыраҡ, ә уртаса һауа температураһы 3,9, таулы өлкәләрҙә 1,8, ә Урал аръяғы райондарында 2,9 градус йылылыҡ тәшкил итәсәк.

Көҙ - йылдың алтын миҙгеле, сәскән-үҫтергәненде урып-йыйыу, уңыш мәле. Тәбиғәт миҙгелдәре менән кеше ғүмерен сағыштырыуҙарҙа, ысынлап та, ҙур оҡшашлыҡ бар: кешегә лә өлкәнәйгән йәшендә ҡылған ғәмәлдәренең һөҙөмтәһен күреп, сәскән изгелектәренең емешенә кинәнеп йәки, киреһенсә, йәшлек хаталаныуҙарынан выждан ғазабы кисереп йәшәргә тура килә. **Көҙ уртаһы ҡарасай календарының тәүге бите (1) Өлкән йәштәгеләр көнө тип билдәләнгән. Әҙәм балаһы үҙ ғүмеренең көҙөндә уйсанлана, олпатлана, холоҡ-фиғелен ҡулға ала, төрлө тормош хәлдәрендә лә сабырлыҡ күрһәтеп, килеп тыуған мәсьәләне ғәҙеллек һәм аҡыл йәһәтенән баһаларға тырыша. Хас та яҙыусы Александр Твардовский әйткәнсә, "Ҡартлыҡ - шатлыҡ түгел, шулай ҙа уны ла кешелек дәрәжәнде һаҡлап, меҫкенлеккә, асыу-яуызлыҡтарға бирелмәйенсә һәм хатта ошо йәштең дә ҡайһы бер өҫтөнлөктәрен файҙаланыуҙан ләззәт алып кисерә белергә кәрәк".**

Иҫтә ҡалған бер кинәйә лә тап ошо фекерҙе раҫлай булыр. Бер кеше шул тиклем ҡартлыҡ килеүенән ҡурҡҡан һәм ул турала ҡото осоп, шулай уйлаған: "Ҡартайғанда минең дә мейем иҫәрләнеп, тәнем бәлтерәп бөтәсәкме инде? Мин бит ул саҡ тормоштан бер ниндәй ләззәт ала алмаясаҡмын!.." Ул йәшлекте оҙайтыусы төрлө саралар файҙаланып ҡарай, ләкин бер нәмә лә ярҙам итмәй. Шулай бер саҡ ул кешеләре бер ҙә ҡартаймай торған ҡала барлығы хаҡында ишетә һәм уны нисек табырға икәнен һораша башлай. "Әәә, ул бит аҡыл эйәләре ҡалаһы, уны табыуы бер ҙә ҡыйын түгел, тик уның ҡапҡаһы тышында һаҡсылар тора, һәм улар ҡалаға ҡарттарҙы индермәй",- тип киҫәтеп, юл өйрәтәләр быға. "Юҡ, мин әле ҡарт түгелмен", - ти ҙә юлға сыға был әҙәм. Оҙаҡ та бармай, һаҡ торған ҡапҡалы ҡалаға аҡ һаҡаллы бер ҡарт инеп киткәнен күреп, йүгереп килә лә, ҡартлас артынан инмәксе була, ләкин һаҡсылар уны шып туҡтата. "Бында ни өсөн килергә булдың?"- тип һорай улар әҙәмдән. "Миңә йәшәрергә ярҙам итәсәк сараны эҙләп тапҡым һәм тормош менән ләззәтләнеп йәшәгем килә",- ти был. "Юлыңда бул, беҙгә бында ҡарттарҙы индереү тыйыла",- ти һаҡсылар. Әҙәм аптырап ҡала: "Һуң әле генә ошо ҡапҡанан аҡ һаҡаллы ҡарт инеп китте бит!" "Беҙҙең ҡалала кешенең йәше аҡыл һәм рух йәшлеге менән үлсәнә. Был ҡарт бик шәп китап яҙа, уның аҡылы йәш, зиһене үткер, рухы бай",- була әҙәмгә яуап. Әҙәм һис бирешергә теләмәй: "Ул минән ике тапҡырға ҡартыраҡ, нисек инде уның аҡылы минекенән йәшерәк?"- тигән һорау бирә. "Рухи донъя менән йәшәүсе кеше ни тиклем олораҡ булған һайын, уның аҡыл кимәле лә шул тиклем тәрәнерәк, аң дәрәжәһе - байыраҡ",- тип ҡапҡаны шарт ябып ҡуя һаҡсылар...

**Эйе, аҡыл эйәләре ҡалаһы, йәғни йәш күңелле, зирәк аҡыллы, бай рухлы өлкән йәштәгеләр йәшәгән был "ҡала" әкиәттә генә түгел, беҙҙең мөхиттә лә бар ул! Ундай "йәш өлкәндәрҙе" нурлы йөҙҙәренән, йылмайыуҙарынан, етәкләп йөрөгән ейән-ейәнсәрҙәренән, ҡулдарындағы гәзит-журналдарҙан, байрам тантаналарына кейеп сыҡҡан милли кейемдәренән, яу ҡырындағы уландарға бағышлаған изге ғәмәлдәренән танырға була. Был йәһәттән - ағинәйҙәрҙе өлгө итеп килтерергә була.**

Ысынлап та, "өлкән" һәм "ҡарт" төшөнсәләре биологик йәшкә ҡарап ҡына билдәләнмәй, ә кешенең мәҙәни-рухи статусына һәм социаль ролена лә (мәҫәлән, өләсәй, ҡартатай) бәйле, тигән фекерҙә геронтологтар. Әйткәндәй, кешеләрҙең, шулай уҡ йәмғиәттең йәш оҙайлығына ҡарата фекерҙәре заманына күрә үҙгәреп тора икән. Мәҫәлән, 1866 йыл баҫылып сыҡҡан "Аңлатмалы һүҙлек"тә (авторы Даль) оло йәштәге йәки ҡартайған тип, 50 йәш тирәһе булған кешеләр аталған. Рәсәйҙең "Өлкән йәштәге граждандарҙы һәм инвалидтарҙы социаль хеҙмәтләндереү тураһында"ғы федераль законында (1995) 55 йәшлек ҡатындар менән 60 йәшлек ирҙәр өлкән йәштәгеләр иҫәпләнгән, ләкин бөгөн был закон ғәмәлдән сыҡҡан. Уның ҡарауы, Росстат до-

*ТЕМАНЫ ДАУАМ ИТЕП...*

# БАШҠОРТ МИЛЛИ КЕЙЕМЕН...

## төп нөсхәлә күрһәтә "Тамға"

**(Башы 1-се биттә).**



***Гөлгөнә Баймырҙина, Республика халыҡ ижады үҙәгенең фольклор буйынса баш белгесе, "Тамға" конкурсының баһалама ағзаһы:*** "Тамға" быйыл дүртенсе тапҡыр ойошторолдо. Ошо йылдар эсендә конкурс үҫеште, уның сиктәрендә билдәләнгән номинацияларҙа оҫталар тәҡдим иткән ҡул эштәре лә бермә-бер артты. Мәҫәлән, 2020 йылда беренсе конкурста балалар кейеме буйынса бөтөнләй тиерлек эштәр булмағайны. Ғөмүмән, кейемдәрҙе реконструкциялау тигән төшөнсә лә бик нығынып етмәгәйне ул саҡта. Шулай ҙа фольклор коллективтарына, "Ағинәй" йәмәғәт ойошмаһы ағзаларына үҙ төбәктәренә хас милли кейем өлгөләрен тергеҙергә, "Мәргән уҡсы" ойошмаһы ағзаларына боронғоса итеп кейенергә тигән талаптар ҡуйыла ине. Башҡорт милли кейеме, тигәнде сәхнә кейеменә генә ҡайтарып ҡалдырһаҡ, боронғолоғобоҙҙо юғалтыу ҡурҡынысы бар, тип борсола инек. Ә бына 2020 йылда Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров йылына ике тапҡыр Милли кейем көнөн билдәләү тураһында указға ҡул ҡуйғас, мәҙәниәт министры Әминә Шафиҡова булышлығы менән ошо "Тамға" конкурсын башлап ойошторҙоҡ та инде. Унда ҡатнашыусыларҙың яртыһынан күбеһе сәхнә кейеменә хас өлгөләрен ебәрҙе. Беҙ башҡорттарҙың боронғо, һәр төбәккә хас кейем өлгөләрен табып, шуларҙы тергеҙгән оҫталарҙы күрһәтеү һәм уларҙы үҫтереү маҡсатын алғайныҡ. Һәм оҙаҡ йылдар был эш менән шөғөлләнгәндәрҙең, мәҫәлән, Әбйәлил районынан шәл һуғыусы Ғәшүрә Әүбәкирова, кейемгә биҙәүестәр эшләгән Рафаэль Амантаев, ирҙәр кейемен тергеҙгән Юлай Ғәлиуллин кеүек оҫталарҙы астыҡ.

Быйыл конкурсҡа 60-тан ашыу ғариза ебәрелде, шуларҙың 40-ы финалға үтте һәм барыһы ла бүләкләнде. Айырыуса Ҡурған өлкәһенән милләттәштәребеҙҙең күмәкләп ҡатнашыуы ҡыуандырҙы. Улар үҙҙәренең боронғо кейемдәрен һаҡлап килгәндәр һәм әле лә беҙҙәге кеүек стилләштереү менән бик мауыҡмайҙар.

Быйыл Ҡариҙел, Аҫҡын яҡтарынан килгән оҫталарҙы айырыуса телгә алғым килә. Ҡариҙел районынан тәүге тапҡыр ҡатнаштылар һәм үҙҙәренең һун ырыуы кейемен алып килделәр һәм махсус призға лайыҡ булдылар.

Былтыр "Башҡорт һуғылған шәле" тигән проект сиктәрендә 100-ҙән ашыу оҫтаны шәл һуғырға өйрәткәйнек. Быйыл бының һөҙөмтәһен күрҙек: Әбйәлилдән Ғәшүрә Әүбәкирова ирҙәр шәле һуғып алып килгән. Билдәле булыуынса, 19-сы быуатта Әбйәлилдә булып киткән итальян профессоры был турала мәғлүмәт ҡалдырған.

Был йылдарҙа "Тамға" майҙансығы" тигән төшөнсә барлыҡҡа килде. Кейем менән ҡыҙыҡһынған ололар, йәштәр ҙә бер-береһенән өйрәнә, тәжрибә уртаҡлашалар. Шуның менән бик кәрәкле проект был. Ниһайәт, балалар кейеменә лә иғтибар артты һәм быйыл Ишембай оҫтабикәләренә етеүсе булманы: Сәриә Ғәбитова, Гөлгөнә Мәмбәтова, Люция Кононова лауреат исемдәре алды. Улар төрлө сығанаҡтарға таянып, бетеүле түбәтәйҙәрҙе тергеҙгәндәр. Бәләкәй балаларҙың атаәсәһе, өләсәйҙәре теккән кейемде кейеп йүгерешеп йөрөүен күреп: "Ояһында ни күрһә, осҡанында шул булыр", тигән халыҡ аҡылының хаҡлығына тағы бер ҡат инандыҡ. Тимәк, "Тамға" - тәрбиәүи алымдарҙың береһе лә.

"Тамға"ларҙың тағы бер уртаҡлашырға теләгән ҡыуаныслы яңылығы бар - еңеүселәрҙе бүләкләгән махсус значогыбыҙ "Тамға"ға быйыл сентябрь айында патент алдыҡ! Башҡорт кейеменең барлыҡ төрҙәре лә ошо тамға аҫтында буласаҡ. "Ағас күрке -япраҡ, әҙәм күрке - сепрәк", тиҙәр һәм был ысынлап та шулай. Башҡорт халҡыныҡы кеүек зауыҡлы, сағыу, күп төрлө кейем башҡа бер кемдә лә юҡ һәм беҙ ошо үҙенсәлектәребеҙҙе һаҡлап ҡалырға, киләсәк быуындарға еткерергә тейешбеҙ. Был йәһәттән "Тамға" конкурсы һәм унда ҡатнашыусы һәр оҫта ҡул барыһын да эшләй.

**(Дауамы 6-сы биттә).**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Өфөлә Фехтование үҙәге "Рәсәй - спорт державаһы" халыҡ-ара форумына асылырға тейеш, тип белдерҙе Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров Хөкүмәттең оператив кәңәшмәһендә. "19 сентябрҙә махсус рәүештә төндә Фехтование үҙәгенең төҙөлөш майҙансығын барып ҡараным. Ул бик матур. Был донъя кимәлендәге объект, тип ҡыйыу әйтә алам. Рәсәйҙә иң ҙурҙарының береһе. Әҙерлек юғары һәм форумға беҙ уны асырбыҙ", - тине Радий Хәбиров.

✓Ҡырмыҫҡалы районында Рәсәй Геройы, генерал-майор Миңлеғәле Шайморатов исемендәге Кубок өсөн "Йәйге шайморатовсылар уйындары"ның йомғаҡлау этабы уҙа. "Уҡыусыларҙы сафҡа әҙерлеге, сафта йөрөү йырын башҡарыу, спорт дисциплиналары, Башҡортостан тарихы һәм мәҙәниәте буйынса ярыштар көтә", - тине Башҡортостандың мәғариф һәм фән министры Илдар Мәүлитбирҙин. Йәйге шайморатовсылар уйындары 28 сентябрҙә уҙғарыла. Турнирҙың абсолют еңеүсеһенә Шайморатов исемендәге күсмә Кубок тапшырыла.

✓Стәрлетамаҡ мэры Рөстәм Ғәзизов контракт ваҡыты тамамланыуға бәйле вәкәләттәрен һалды. Был хаҡта "Башинформ" агентлығына ҡала хакимиәтенең матбуғат хеҙмәтенән хәбәр иттеләр. Әлегә ҡала башлығы вазифаһын беренсе урынбаҫар Эмиль Шәймәрҙәнов башҡара. Мэр вазифаһына яңы конкурсты ҡала советы депутаттары иғлан итергә тейеш.

✓Башҡортостан Республикаһы Башлығының 23 сентябрҙәге указы менән Светлана Бурдюк үҙ теләге менән республиканың Тарифтар буйынса дәүләт комитеты рәйесе вазифаһынан бушатылды. Әлеге ваҡытта Тарифтар буйынса дәүләт комитеты рәйесе вазифаһын башҡарыу бурысы ведомство етәксеһе урынбаҫары Наил Шәрәфетдиновҡа йөкмәтелде.

✓Шишмә районы хакимиәте башлығы Ришат Мансуров отставкаға китте. Муниципалитетта белдереүҙәренсә, район башлығының контракт ваҡыты тамамланыуға бәйле вәкәләттәре туҡтатылды. Шишмә районы башлығы вазифаһын беренсе урынбаҫар, ауыл хужалығы идаралығы етәксеһе Эрнес Кәримов башҡара. Район башлығы вазифаһына конкурс иғлан ителгән.

✓Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров үҙенең указы менән Бөтә Рәсәй уҡыусылар олимпиадаһы һәм ил, төбәк-ара олимпиадалар һәм конкурстар еңеүселәренә һәм призерҙарына, шулай уҡ уларҙы әҙерләгән уҡытыусыларға премиялар күләмен арттырҙы. Указ 2024 йылдың 18 сентябренән көсөнә инде. Указға ярашлы, "Бөтә Рәсәй мәктәп уҡыусылары олимпиадаһында еңеүселәргә, шулай уҡ уларҙы әҙерләгән уҡытыусыларға - 300-шәр мең; Бөтә Рәсәй уҡыусылар олимпиадаһы призерҙарына, уларҙы әҙерләгән уҡытыусыларға 150-шәр мең һум ҡаралған".

✓ *Беҙҙең илдә пенсияға сыҡҡас та кеше үҙен өлкән итеп тоя башлай. Был күп йәһәттән кешенең үҙ мөмкинлектәрен артабан бойомға ашырыу саралары булмауҙан килеп тыуа, ти геронтологтар.*





...кументтарында ҡарттар иҫәбенә 55 йәшлектәр индерелгән. БМО буйынса 60-ты үткәндәр өлкән йәштәгеләр иҫәпләнә.

Шуныһы ҡыҙыҡ: ҡартлыҡ йәше шкалаһы "йәшәрә" барған һайын, ғүмер оҙайлығы арта бара, тигән ҡарашта социологтар. Мәсәлән, Бөтөн донъя һаулыҡ һаҡлау ойошмаһы мәғлүмәттәре буйынса, 2000 йылда донъяла ғүмер оҙайлығы - 67, ә 2019 йылда 73 йәш тәшкил иткән. Рәсәйҙәр фекеренсә иһә, кешегә ҡартлыҡ 70,7 йәштә килә. Донъя статистикаһына ҡарағанда, кешелек йәмғиәте йылдан-йыл өлкәнәйә бара. Беҙҙең илдә пенсияға сыҡҡас та кеше үҙен өлкән итеп тоя башлай. Был күп йәһәттән кешенең үҙ мөмкинлектәрен артабан бойомға ашырыу саралары булмауҙан килеп тыуа, ти геронтологтар. Рәсәйҙәрҙең үҙ йәшенә ҡарата бындай тойғо нығыныуына йылдар буйына кешеләрҙең тормош хәле түбән кимәлдә ҡалыуы ла сер түгел. Беҙҙең өлкән йәштәгеләр алған пенсия күләмен сит ил пенсионерҙарыныҡы менән сағыштырыуы ла ҡыйын: ул коммуналь түләүҙәргә һәм аҙыҡ-түлеккә китеп тора, ә рухи яҡтан үҫешеүҙе дауам итеүгә, сәйәхәттәргә сығыу, диңгеҙ буйҙарында ял итеү хыялда ғына. Был йәһәттән, әлбиттә, Рәсәйҙә, шул иҫәптән, Башҡортостанда эшләүсе "Оҙон ғүмерлелек" социаль-һауыҡтырыу проектының һәйбәт башланғыс булыуын билдәләп китергә була, ләкин, үкенескә, был программа менән файҙаланыу күптәр өлөшөнә тәтемәй шул...

Шулай итеп, был айҙа Өлкәндәр көнө, РФ Ҡоро ер ғәскәре, Вегетариандар, Халыҡ-ара музыка һәм Йылмайыу **(1)** көндәре, Урта һөнәри белем биреү, Халыҡ-ара көс ҡулланмау, Электрон почта, Халыҡ-ара социаль педагог **(2)**, ОМОН, РФ Космос ғәскәрҙәре, Граждандар оборонаһы **(3)**, Уҡытыусылар **(5)**, Бөтөн донъя йәшәгән урындарҙы һаҡлау **(6)**, Халыҡ-ара табип, Халыҡ-ара торлаҡ **(7)**, Стихиялы бәлә-ҡазаларҙы кәметеү хаҡына халыҡ-ара көн **(9)**, Бөтөн донъя күреү һәләте, Психик сәләмәтлек **(10)**, Халыҡ-ара ҡыҙ балалар, Башҡортостан Республикаһы **(11, 1990)** көндәре, Ауыл хужалығы һәм эшкәртеү сәнәғәте **(13)**, Халыҡ-ара ауыл ҡатын-ҡыҙҙары **(15)**, Бөтөн донъя аҙыҡ-түлек, Бөтөн донъя икмәк **(16)** көндәре, Участка терапевы, Фәҡирлекте бөтөрөү өсөн халыҡ-ара **(17)** көндәр, Юл хужалығы эшсәндәре, Рәсәй аҙыҡ-түлек сәнәғәте эшсәндәре, Остеопороз менән бөтөн донъя көрәш, Ашнаҡсы **(20)** көндәре, Махсус тәғәйенләнеш подразделениелары көнө, Ҡоралһыҙланыу аҙналығы, Халыҡ-ара ҡағыҙҙыҙ көн, Медиа һәм мәғлүмәт грамоталылығы аҙналығы **(24)**, Ҡатынҡыҙҙарҙың тыныслыҡ өсөн халыҡ-ара көрәш көнө, Тыныслыҡ тураһында декрет ҡабул ителгән көн **(8 ноябрь, 1917)**, Өләсәйҙәр һәм ҡартатайҙар көнө **(28)**, Комсомолдың тыуған көнө **(29)**, Сәйәси репрессия ҡорбандарын иҫкә алыу, Рәсәй Хәрби-диңгеҙ флотына нигеҙ һалынған **(30)** көндәр, Халыҡ-ара экономиялау, Бөтөн донъя ҡалалар, Халыҡ-ара Ҡара диңгеҙ **(31)** көндәре билдәләнә.

**Ҡарасайҙа тыуғандар:**

**1** - күренекле шағир, публицист, драматург, прозаик, йәмәғәт эшмәкәре, Салауат Юлаев исемендәге Дәүләт премияһы лауреаты, Башҡортостандың атҡаҙанған сәнғәт эшмәкәре, Салауат Юлаев ордены кавалеры **Ғәзим Шафиҡовтың тыуыуына - 85 йыл** (1939-2009).

**4** - Башҡортостандың - халыҡ, Рәсәйҙең атҡаҙанған артисы, А.Мөбәрәков исемендәге Сибай дәүләт башҡорт театры артисы **Риф Сәйфуллинға - 75 йәш** (1949).

**10** - педагог, журналист, шағир, республика матбуғат баҫмаларының элекке баш мөхәррире, эшҡыуар, тиренән изделиелар етештереү оҫтаханаһы етәксеһе, Ш.Хоҙайбирҙин исемендәге Хөкүмәт премияһы лауреаты **Азамат Юлдашбаевҡа - 60 йәш** (1964).

**12** - юрист, 1996-2005 йылдарҙа БР Эске эштәр министры урынбаҫары - кадрҙар идаралығы начальнигы, 2005-2009 йылдарҙа - БР Кеше хоҡуҡтары буйынса уполномоченный, Башҡортостандың атҡаҙанған юрисы, Почет ордены кавалеры **Фәтхлислам Тоҡомбәтовҡа - 75 йәш** (1949).

**14** - талантлы шағир, Ш.Бабич премияһы лауреаты **Рәйес Түләковтың тыуыуына - 65 йыл** (1959-2007).

**20** - БАССР-ҙың халыҡ шағиры, күренекле прозаик һәм драматург, Социалистик Хеҙмәт Геройы, Ленин һәм Дәүләт премиялары, Салауат Юлаев исемендәге БР Дәүләт премияһы лауреаты, Бөйөк Ватан һуғышында ҡатнашҡан **Мостай Кәримдең тыуыуына - 105 йыл** (1919-2005).

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА.**

*ДОНЪЯ ШАҢДАУЫ*

# "АҒАЛАРЫ" НИ ӘЙТЕР...

**Үткән аҙнаның һуңғы көнөндә - ишетмәгәйнегеҙме әле - Африкала ...ҡар яуған! Был төбәк өсөн ғәҙәти булмаған тәбиғәт күренеше шул тиклем көслө булған, илдәге юлдарҙы күмеп киткән һәм транспорт хәрәкәтен туҡтатҡан. France24 баҫмаһы хәбәр итеүенсә, илдең Көньяҡ һәм Көньяҡ-Көбайыш төбәктәрендә ҡар ҡатламы урыны менән 2 метрға еткән. Был тәбиғәт аномалияһына 8-се кимәл ҡатмарлыҡ бирелгән. Юлдарҙағы үтеп сыҡҡыһыҙ ҡар эсендә бикләнеп ҡалған автомашина водителдәре һәм пассажирҙарына йылы кейем һәм ашарға ташыйҙар, ҡотҡарыу эштәре бара. Стихиялы бәләне бөтөрөүҙә армия ярҙамға килгән. Һуңғы тапҡыр Көньяҡ Африка Республикаһында ҡар былтыр июль айында, ә унан алдараҡ 2012 һәм 2006 йылдарҙа яуған.**

Бына шулай, ҡайҙалыр ҡар менән көрәшһәләр, финдарға иһә депрессия менән мейегә... ток разряды ебәреп көрәшергә тәҡдим итәләр икән. Иң бәхетле ил тип иҫәпләнгән Финляндия халҡының күпселек өлөшө, ысынлап та, оҙаҡҡа һуҙылған ауыр депрессиянан яфа сигә, тип яҙа "Известия" гәзите сираттағы һанында. Был Финляндияла хеҙмәткә яраҡһыҙлыҡ торошоноң иң таралған сәбәбе булып тора. Былтыр, мәсәлән, 100 мең фин психик сәләмәтлеге буйынса оҙайлы больничныйҙа булған. Өҫтәүенә, Финляндия властары халҡын Рәсәйгә ҡаршы һуғыш ихтималлығы менән ҡурҡыта, ти. Урындағы халыҡҡа уларҙың күңел төшөнкөлөгөн ауыр климат шарттары, йылдың күп өлөшө ҡар һәм ҡараңғылыҡ солғанышында үтеүенән сығып аңлатырға тырышһалар ҙа, ысынында иһә, илдә аҙыҡ-түлеккә һәм энергия сығанаҡтарына хаҡ артыуы халыҡты нығыраҡ борсой. Хеҙмәткә яраҡһыҙлыҡ осраҡтарының артыуы илдең иҡтисад торошона ла кире йоғонто яһай. Илдең сәйәси торошона килгәндә, әле власть башында идара итеүсе уң коалицияға ҡаршы һул көстәр союзы оппозицияла тора һәм ул НАТО-ға өмөт бағламай, "Беҙ - Украина менән!" тип ҡысҡырмай, ә илдәге социаль мәсьәләләрҙе яйға һалыу, атап әйткәндә, пособиеларҙы һәм льготаларҙы кәметеүгә ҡаршы әүҙем сығыш яһай.

Социаль мәсьәләләр, тигәндән, Францияның Мартинике ҡалаһында аҙыҡ-түлеккә хаҡ артыуҙарға ризаһыҙлыҡ белдереп, халыҡ урамға сыҡҡан һәм ҡаланың аҫтын-өҫкә әйләндергән: протест сығыштары бер нисә көн буйына бара, 44 машина яндырылған, 35 шәхси коммерция объектына һөжүм ителгән, 11 полицейский атыу ҡоралынан яраланған. Урындағы полицияның көсө етмәгәс, халыҡ сығышын баҫтырыу өсөн ҡалаға Францияның тиҙ хәрәкәт итеүсе махсус полицияһы ебәрелгән, протест белдереүселәрҙән 30 кеше ҡулға алынған, комендант сәғәте иғлан ителгән.

Украинамы? Ә Украина президенты Владимир Зеленский һаман булһа үҙенең "еңеү планы" итеп алынған Рәсәй төпкөлөнә һөжүм хыялы менән һаташа һәм ошо планды бойомға ашырыуға ҙур "ағаларынан" зарығып команда көтә. Үткән шәмбе ул сентябрь визиты менән АҠШ-ҡа осто, тип яҙҙылар. Әлбиттә, ҡорал теләнселәргә. Ә был ваҡыт Курск йүнәлешендә Украина армияһы тәүлек эсендә 380 һалдатын юғалтһа, дөйөм алғанда Курск һуғыштарында йәмғеһе дошмандың 16 мең һуғышсыһы юҡ ителгән. Шуға ҡарамаҫтан, Украина Ҡоралы көстәре (ВСУ) Тверь өлкәһенә үнтылып маташа һәм Телеграм-каналдар хәбәр итеүенсә, 21 сентябрҙә ошо өлкәләге боеприпастар һаҡланған объектҡа дрон осорған. Һөҙөмтәлә Тверь өлкәһе Торопец ҡалаһы халҡы таң менән көслө шартлауҙан уянған. Йорттар емерелгән, 20 кеше, шулар араһында балалар зыян күргән. Рәсәй армияһы был шартлауҙар өсөн Украина авиация инфраструктураһын ҡыйратып, үс алды, тип хәбәр итә сығанаҡтар, ләкин эш үткәс үс алыуға ҡарағанда, мөһим объекттарҙы ышаныслы, көслө һаҡ аҫтына алыу яҡшыраҡ түгелме ни һуң?..

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА.**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Башҡорт балы "Өфөнән һәм төбәктең башҡа ҡалаларынан нимә алып ҡайтырға" темаһы буйынса рейтингтарҙа һәм туристик исемлектәрҙә һәр ваҡыт беренсе урынды биләй. Шуға күрә Туту.ру сервисы Башҡортостанға Рәсәйҙең баллы баш ҡалаһы тигән лайыҡлы исем бирҙе. Улар "Рәсәйҙең 100 баш ҡалаһы" - үҙенең аҙыҡ-түлеге, тауарҙары менән дан тотҡан ҡалалар һәм төбәктәр исемлеген төҙөгән.

✓2024 йылдың 1 октябренән бюджет ойошмалары хеҙмәткәрҙәренең эш хаҡы 5,1 процентҡа арттырыла, тип яҙа федераль киң мәғлүмәт саралары. Премьер-министр Михаил Мишустин Рәсәй Хөкүмәте бойороғона ҡул ҡуйған. Был федераль ҡаҙна, бюджет һәм автономиялы учреждение, федераль дәүләт органдары, шулай уҡ хәрби частарҙың граждан хеҙмәткәрҙәренә ҡағыла. Шулай итеп, мәктәп һәм дәүләт юғары уҡыу йорттары уҡытыусылары, һаулыҡ һаҡлау, мәҙәниәт, фән хеҙмәткәрҙәренең эш хаҡы артырға тейеш.

✓Башҡортостанда "Башнефть" яғыулыҡ ҡойоу станцияларында бензин йәнә ҡиммәтләнде. "Яңыртылған" хаҡтар водителдәргә 24 сентябрҙә иртән билдәле булды. Мәсәлән, хәҙер АИ-92 бензинының бер литры - 51,65 һум (+0,05 тин), АИ-92 ATUM - 52,75 һум (+0,05), АИ-95 ATUM - 56,25 һум (+0,1) тора. АИ-100 маркалы бензин автоһәүәҫкәрҙәргә 78,75 һумға (+3 һум) төшә. Дизель яғыулығының хаҡы элеккесә - бер литры 63,85 һум тәшкил итә.

✓"Башинформ" мәғлүмәт агентлығының "Бәхет - ул бергә" махсус проекты Сочиҙа "Бөтә Рәсәй-2024" медиафорумының һөнәри конкурсында еңеү яуланы. Башҡортостандың төп мәғлүмәт агентлығының медиапродукты "Йылдың махсус проекты/ акцияһы" номинацияһында иң яҡшыһы тип танылды. Илдең Журналистар союзы рәйесе Владимир Соловьев төп бүләкте - Рәсәй Журналистар союзы статуэткаһын һәм еңеүсе дипломын "Башинформ" мәғлүмәт агентлығының баш мөхәррире Руслан Шәрәфетдиновҡа тапшырҙы.

✓Башҡортостанда алдағы көндәрҙә йылылыҡ биреү планлаштырылмай. Был турала 23 сентябрҙә Хөкүмәттең оператив кәңәшмәһендә Башҡортостандың торлаҡ-коммуналь хужалыҡ министры вазифаһын башҡарыусы Ирина Голованова хәбәр итте. Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров ҡышҡы йылытыу миҙгеленә әҙерлек эшен дауам итергә ҡушты һәм теләһә ҡайһы ваҡытта йылылыҡ биреүгә әҙер булырға саҡырҙы.

✓Республиканың еңел сәнәғәт предприятиелары дәүләт ярҙамы саралары менән файҙалана ала. Сеймал һәм материалдар һатып алыуға сығымдың бер өлөшө субсидиялана. Бының өсөн республика бюджетынан йыл һайын 150 миллион һумға яҡын аҡса бүленә. Бынан тыш, предприятиелар республиканың Сәнәғәтте үҫтереү фонды линияһы буйынса финанс займын алыу мөмкинлегенә эйә.

ҠЫҪҠАСА

# РӨХСӘТҺЕҘ ҠЫРҠМА!

✓ **Башҡортостанда 23 сентябрҙән өс аҙналыҡ "Урман" акцияһы башланды.** Профилле инспекторҙар йәмәғәтселәр, полицейскийҙар һәм автоинспекторҙар менән бергә ағасты рөхсәтһеҙ ҡырҡыу урындарын һәм урмандан сығыу юлдарында тәүлек әйләнәһенә күҙәтеү ойоштора, тип хәбәр иттеләр Башҡортостандың Урман хужалығы министрлығында. Билдәле булыуынса, быйыл урманды законһыҙ ҡырҡыу күләме 2023 йылдың тәүге яртыһы менән сағыштырғанда 2,4 тапҡырға, ә килтерелгән зыян буйынса 2 тапҡырға тиерлек кәмегән. Республикала законһыҙ ҡырҡыу күләмен кәметеү өсөн саралар күрелде. Ведомство мәғлүмәттәре буйынса, иң һөҙөмтәлеләре - йыһан мониторингы (асыҡланған осраҡтарҙың 22 проценты) һәм иҫкәртеү рейдтары (23 процент).

✓ **Һуңғы аҙнала Башҡортостанда киҫкен респиратор инфекцияһын һәм грипп йоҡтороуҙың 22 меңдән ашыу осрағы теркәлгән, шуның 41,3 проценты - балалар араһында, тип хәбәр итә республика буйынса Роспотребнадзор идаралығының телеграм-каналы.** Үткән аҙна менән сағыштырғанда ауырыуҙарҙың 31,7 процентҡа артыуы билдәләнә, тип белдерҙеләр ведомствола. "Ата-әсәләргә мөрәжәғәт итәбеҙ: балала сир йәки хәлһеҙлек билдәләре беленеү менән уны өйҙә ҡалдырығыҙ һәм табип саҡырығыҙ", - тиелә хәбәрҙә. Класта йәки мәктәптә балаларҙың 20 проценттан ашыуы сирләй икән, белем биреү ойошмаһы етәкселеге дистанциялы уҡытыуға күсереү йәки уҡыу процесын туҡтатыу тураһында ҡарар ҡабул итә. Һүҙ уҡыусыларҙы ваҡытынан алда каникулға сығарыу йәки уларҙы оҙайтыу хаҡында бара, тип өҫтәнеләр Роспотребнадзор идаралығында.

✓ **Башҡортостан Республикаһының ДОСААФ идаралығына "Рекрут" проекты сиктәрендә контракт хеҙмәтенә йәлеп итеү менән шөғөлләнгән активистарҙан 700-гә яҡын ғариза килгән.** Был хаҡта ойошманың төбәк бүлексәһе рәйесе Игорь Нурмөхәмәтов хәбәр итте. "Әгәр 1 августан башлап 480-дән ашыу мөрәжәғәт ҡабул итһәк, сентябрҙең 10 көнөндә иһә 200. Ғаризаларҙың өстән икеһенән ашыуы эшкәртелгән, аҡса контракт төҙөгәндән һуң 7 көн эсендә күсерелә", - тине тура бәйләнеш ҡунағы. Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, "Рекрут" проектында ҡатнашыусылар өсөн 50 мең һум түләнә. Аҡсаны 18 йәше тулған Рәсәй граждандары алырға мөмкин. Әммә был ҡағиҙә дәүләт һәм муниципаль учреждениелар хеҙмәткәрҙәренә, хәрби хеҙмәткәрҙәргә һәм хоҡуҡ һаҡлау органдары вәкилдәренә ҡағылмай. Тәүге өс аҙнала проект инициаторҙары 100-ҙән ашыу әүҙемсегә аҡса түләне. "Рекрут" 2024 йылдың 31 октябренә тиклем ғәмәлдә ҡала. Тулыраҡ мәғлүмәт алыу өсөн 122 йәки 7 (347) 218-19-19 телефондары буйынса Башҡортостандың ситуация үҙәгенә мөрәжәғәт итергә мөмкин.

ТӨРЛӨҺӨНӘН

# СПОРТ ФОРУМЫ КӨТӨЛӘ

**Республика менән идара итеү үҙәгендә Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров октябрҙең 17-һенән 19-ына тиклем Өфөлә уҙасаҡ "Рәсәй - спорт державаһы" XII Халыҡ-ара спорт форумына әҙерлек буйынса төбәк ойоштороу комитеты ултырышын үткәрҙе.**

Илдең төп спорт форумы Башҡортостанда Рәсәй Президенты Владимир Путиндың ҡарарына ярашлы ойошторола. Республика Башлығы Радий Хәбиров билдәләүенсә, төп саралар 2024 йылдың 31 августында Өфөнөң 450 йыллығын байрам итеү сиктәрендә асылған Көрәш һарайы базаһында үтә. Форумда барлығы йөҙҙән ашыу сит ил дәүләте вәкилдәренең ҡатнашыуы көтөлә. "Төп бурыстар иҫәбендә - Фехтование үҙәгенең һәм ишкәкле слалом өсөн ҡоролмалар комплексының тулы төҙөлөш әҙерлеген тәьмин итеү. Уларҙы форум сиктәрендә тантаналы асырға һәм бында тәүге халыҡ-ара ярыштар үткәрергә ниәтләйбеҙ", - тип һыҙыҡ өҫтөнә алды Радий Хәбиров.

Башҡортостандың спорт министры Руслан Хәбибов форумдың төп йүнәлештәре хаҡында һөйләне. Мәҫәлән, 1500 кеше ҡатнашасаҡ пленар ултырыш Көрәш һарайының универсаль концерт залында үтә. Спорт объектының беренсе ҡатында шулай уҡ эшлекле программа саралары өсөн 200 кешегә иҫәпләнгән өс аудитория ҡаралған. Форумдың спорт программаһына "Өфө-Арена" комплексы майҙансыҡтарында уҙасаҡ "IBA чемпиондар төнө" серияһынан бокс турниры һәм юниорҙар араһында кёрлинг буйынса Бөтә Рәсәй ярыштары ингән. Бынан тыш, 17-18 октябрҙә Рәсәй йыйылма командаһы ҡатнашлығында ишкәкле слалом буйынса "Ҡурай ере" халыҡ-ара ярыштары ойошторола. Ә Фехтование үҙәге 16-20 октябрҙә юниорҙар араһында "Салауат ҡылысы" Халыҡ-ара ярыштарында ҡатнашыусыларҙы ҡабул итә. 17 октябрҙә "Динамо" спорт комплексында баскетбол буйынса "Юғары лига" Рәсәй чемпионаты уйыны уҙа, унда Өфөнөң "Динамо" клубы һәм Мәскәү өлкәһенең "ЦСП-Химки" командаһы осраша. "19 октябрҙә Өфөлә Рәсәй Олимпия комитеты менән берлектә "Йәйәү йөрөү көнө"н үткәреү планлаштырыла, - тип өҫтәне Руслан Хәбибов. - Сарала 25 мең самаһы кеше - форумда ҡатнашыусылар, 200 Олимпия уйындары чемпиондары һәм призёрҙары, Өфө халҡы һәм ҡунаҡтары - ҡатнаша. Улар Октябрь проспекты буйлап "Спорт" туҡталышынан Ҡала советына тиклем араны йәйәү үтәсәк".

Башҡортостан Башлығы ойоштороу комитетына Форум сиктәрендә Рәсәй Президенты ҡарамағындағы Физик культура һәм спорт буйынса совет ултырышын үткәреү өсөн шарттар булдырыуға айырыуса иғтибар бүлергә ҡушты.

# АЛТЫН ЙӘШТӘР МЕНӘН...

**Өфөлә донъя кимәлендәге Евразия ғилми-белем биреү үҙәгенең вуз-ара студенттар кампусында Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров республика юғары уҡыу йорттарының студенттар активы - профсоюз вәкилдәре, студент советтары һәм ятаҡтары лидерҙары, спорт, мәҙәни һәм ирекмәндәр клубтары етәкселәре менән осрашты.**

Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, 2024 йылдың майында республика етәксеһе ҡушыуы буйынса Башҡортостанда Республика студенттар советы ойошторолдо, уның составына студенттар үҙидараһы лидерҙары инде. Уның бурысы - уҡыу төркөмдәре, курстар һәм факультеттар кимәлендә дәүләт йәштәр сәйәсәтен тормошҡа ашырыу.

Радий Хәбиров һуңғы йылдарҙа республика вуздарының сифатлы үҫеш өсөн өҫтәмә импульс алыуын билдәләне: "Һеҙҙе махсус рәүештә Вуз-ара студенттар кампусына саҡырҙыҡ. Республикала фәндең һәм юғары мәктәптең ҡайҙа табан хәрәкәт иткәнен күреүегеҙҙе теләнек. Декабрҙә кампустың тағы бер блогында эштәрҙе тамамлайбыҙ, - тине Радий Хәбиров. - 2025 йылға кампустың икенсе сиратын төҙөүҙе тамамлау планлаштырыла, унда студенттар һәм аспиранттар өсөн 4,5 мең урынлыҡ ятаҡ та булла".

Башҡортостан ятаҡтарҙы капиталь ремонтлау буйынса яңы федераль программала ҡатнаша, тип билдәләне республика етәксеһе: "Беҙҙең Мәғариф һәм фән министрлығы тейешле ғариза бирҙе, - тип һөйләне Радий Хәбиров. - Киләһе йылдан юғары уҡыу йорттарыбыҙҙың күп кенә ятаҡтарында капиталь ремонт башлайбыҙ. Биш йыл дауамында уларҙа тулыһынса тәртип булдырырға тырышырбыҙ".

Башҡортостан Башлығы республика вуздарының "Фән һәм университеттар" милли проектында ҡатнашыу һөҙөмтәләрен юғары баһаланы: "Республика федераль фәнни-технологик проекттарҙа әүҙем ҡатнаша. Әйтәйек, "Өҫтөнлөк 2030", "Алдынғы инженер мәктәптәре", - тине Радий Хәбиров. - Ректорҙар менән берлектәге эш һөҙөмтәһендә йәштәрҙе республикабыҙ вуздарына йәлеп итеүгә өлгәштек. Беҙгә башҡа төбәктәрҙән былтырғыға ҡарағанда 2 мең кешегә күберәк студент уҡырға килде. Яҡшы күрһәткес".

# ИҪКЕҺЕНӘН КҮСЕРЕЛӘ

**2024 - 2030 йылдарға авария хәлендәге торлаҡ фондынан күсереү буйынса яңы республика адреслы программаһына 38 муниципалитетта дөйөм майҙаны 227 мең квадрат метрлыҡ 565 күп фатирлы йорт индерелгән. Был хаҡта төбәк Башлығы Радий Хәбиров уҙғарған оператив кәңәшмәлә төбәктең төҙөлөш һәм архитектура министры вазифаһын башҡарыусы Артем Ковшов хәбәр итте.**

Билдәләнеүенсә, Башҡортостанда дөйөм майҙаны 392 мең квадрат метрлыҡ 842 йорт авария хәлендә тип танылған. Шуға күрә А. Ковшов халыҡты был йорттарҙан күсереүҙе тиҙләтеү өсөн мәсьәләне хәл итеүҙең ике альтернатив вариантын тәҡдим итте. Был тәү сиратта авария хәлендәге йорттарҙың сиктәрен биләмәләрҙе комплекслы үҫтереү тураһында урындағы үҙидара органдары менән төҙөүсе араһындағы килешеүҙәргә индереүҙе күҙ уңында тота. Икенсе вариант - муниципалитеттарҙа күсереү өсөн финанслау ҡаралмаған авария хәлендәге торлаҡтар булған биләмәләрҙә күләмле инвестиция проекты механизмын тормошҡа ашырыу географияһын киңәйтеү. Бынан тыш, был маҡсатта тамамланған адреслы программалар буйынса талап ителмәгән биналарҙы файҙаланыу мөмкинлеге өйрәнелә. Радий Хәбиров яҡын арала уҙғарыласаҡ "Ҡала советы" ултырыштарының береһендә авария хәлендәге торлаҡтан күсереүҙең альтернатив механизмдарын тикшерергә тәҡдим итте.

Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ: 2023 йыл йомғаҡтары буйынса Башҡортостан 2017 йылдың 1 ғинуарына тиклем авария хәлендә тип танылған торлаҡтан күсереү буйынса төбәк программаһын ваҡытынан алда тамамлаған төбәктәр иҫәбенә инде. 2019 йылдан алып "Торлаҡ һәм ҡала мөхите" милли проекты сиктәрендә 112 мең квадрат метр авария хәлендәге торлаҡ фондынан 9 мең самаһы кеше күсерелгән.

## БАШ ҠАЛА ХӘБӘРҘӘРЕ

✓ Рәсәй Президенты Владимир Путин указы менән Өфө хакимиәте башлығы Ратмир Мәүлиев II дәрәжә "Ватан алдындағы хеҙмәттәре өсөн" ордены миҙалы менән бүләкләнде.

✓ Өфөнөң Ленин районы хакимиәте тарихи һыу башняһы эргәһендәге һуҡмаҡты төҙөкләндереү өсөн килешеү төҙөй. Өфө мэры Ратмир Мәүлиев һүҙҙәренсә, баҫҡыс иҫке һуҡмаҡ урынында төҙөлә. Әле һуҡмаҡты таҙартыу эштәре башланған. Баҫҡыс әҙер булғас, яр буйынан башняға тиҙ генә йәйәү менергә мөмкин. "Был маршруттан Салауат Юлаев һәйкәленә яңы күренеш асыла. Ғөмүмән, Өфө бынан ғәжәйеп матур күренә", - тип билдәләне Ратмир Мәүлиев.

✓ Юстицияның өлкән советнигы Андрей Анатольевич Надежкин биш йылға Өфө прокуроры вазифаһына тәғәйенләнде. Рәсәйҙең генераль прокуроры Игорь Краснов тейешле бойороҡҡа ҡул ҡуйған. Башҡортостан прокуратураһының матбуғат хеҙмәтенән хәбәр итеүҙәренсә, Андрей Анатольевич төрлө йылдарҙа республика райондарында тәфтиш бүлеге етәксеһе, прокурор булып эшләй. Һуңғы биләгән вазифаһы - республика Прокуратураһының федераль хәүефһеҙлек, милләтара мөнәсәбәттәр, экстремизмға һәм терроризмға ҡаршы көрәш тураһында закондарҙың үтәлешен күҙәтеү бүлеге етәксеһе.

✓ Башҡортостан биатлонсыһы Анастасия Айгилдина Рәсәй беренселегендә еңеү яуланы, тип хәбәр итә республиканың Спорт министрлығы. Спортсы Ярославль өлкәһендә юниорҙар араһында йәйге биатлон буйынса спринтта алтын миҙал алды. Анастасия 7,5 саҡрым аралыҡты хатаһыҙ үтте (21:14.5). Хәбәр иткәнебеҙсә, Башҡортостандың йыйылма командаһы йәйге биатлон буйынса Рәсәй чемпионатында көмөш призер булды.

✓ Өфө шорт-трексыһы Семён Елистратов Өфөлә Рәсәй кубогында алтын һәм ике көмөш миҙал яуланы. Спортсының еңеүе тураһында Башҡортостандың спорт министры Руслан Хәбибов хәбәр итте. "Андрей Максимовтың тәрбиәләнеүсеһе 1000 метр, 1500 метр һәм 500 метр арауыҡта призлы урындар алды", - тине Руслан Хәбибов.

✓ 2024 йылдың 12-15 сентябрендә Өфөлә үткәрелергә тейешле "Әйҙә уйнарға" Бөтә Рәсәй уйынсыҡтар һәм уйындар фестивале 2025 йылға күсерелә. Былтыр Өфөлә Башҡортостан Башлығы тәҡдиме менән тәүге тапҡыр "Әйҙә уйнарға" фестивале уҙҙы. Сараны Рәсәй Федерацияһы Советы булышлығында Башҡортостан Хөкүмәте, Балалар тауарҙары индустрияһы предприятиелары ассоциацияһы, Рәсәйҙең Сәнәғәт һәм сауҙа, Мәғариф министрлыҡтары, Рәсәй мәғариф академияһы ойошторҙо. Фестивалдә йәмғеһе 250 мендән ашыу кеше, илебеҙҙең 150 уйын һәм уйынсыҡтар етештереүсеһе ҡатнашты.

**"БАШИНФОРМ" материалдары файҙаланылды.**

✔ *"Ленин урамында туристар күп йөрөй. Республика халҡы өсөн дә уңайлы урын, барыһын да беҙҙең нәшриәт магазинына саҡырам, ул бик матур һәм заманса килеп сыҡты", - тине Радий Хәбиров.*



# АҠМУЛЛА ВАСЫЯТЫН ҮТӘ!

**Өфө буйлап эш сәфәре барышында Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров "Китап" нәшриәтенең яңы фирма магазинында булды.**




Магазин 2024 йылдың 14 сентябрендә Өфөнөң тарихи үҙәгендә асылды (Ленин урамы, 26-сы йорт). Зәйнәб Биишева исемендәге "Китап" нәшриәте директоры вазифаһын башҡарыусы Эльмира Хәйретдинова һүҙҙәренсә, яңы фирма магазинының сауҙа залында "Китап" һәм "Башҡорт энциклопедияһы" нәшриәттәренең продукцияһы, рус, башҡорт, татар, удмурт, инглиз, немец һәм башҡа сит төбәктәрҙең милли әҙәбиәте бар. Шулай уҡ бында Рус география йәмғиәтенең, Рәсәй хәрби-тарихи йәмғиәтенең эксклюзив баҫмаларын һатып алырға мөмкин. Балалар өсөн китаптар, ижад өсөн тауарҙар, өҫтәл уйындары, баш ҡаланың 450 йыллығына арналған сувенир продукцияһы ассортименты киң. Магазин заманса этностилдә биҙәлгән. Бында яҙыусылар менән осрашыу, журналистар, шағирҙар менән оҫталыҡ дәрестәре, фотокүргәҙмәләр, балалар һәм үҫмерҙәр өсөн саралар үткәреү өсөн махсус урын, китап уҡыусылар өсөн лаунж-зона булдырылған.

Радий Хәбиров нәшриәттең яңы китаптары менән танышты һәм абруйлы ҡунаҡтар китабында үҙенең теләктәрен яҙып ҡалдырҙы. Республика етәксеһе шулай уҡ баш ҡаланың юбилейы айҡанлы баҫылып сыҡҡан Өфө тарихы һәм уның бөгөнгөһө хаҡында ике китап, шулай уҡ "Аҡмулла васыяттары" китабын һатып алды. "Ленин урамында туристар күп йөрөй. Республика халҡы өсөн дә уңайлы урын, барыһын да беҙҙең нәшриәт магазинына саҡырам, ул бик матур һәм заманса килеп сыҡты", - тине Радий Хәбиров.

Әйткәндәй, 2024 йылда "Китап" нәшриәте 105 йыллығын билдәләй. 1919 йылдың 16 октябре уның тыуған көнө тип иҫәпләнә.

# СИЛ ИЛДӘН КИЛГӘНДӘРГӘ

**Башҡортостан Дәүләт Йыйылышы депутаттары Дәүләт Думаһына "Рәсәй Федерацияһынан сығыу һәм Рәсәй Федерацияһына инеү тәртибе тураһында" һәм "Рәсәй Федерацияһында сит ил граждандарының хоҡуҡи хәле тураһында" Федераль закондарға үҙгәрештәр индереүҙе күҙ уңында тотҡан федераль закон проектын ҡарауға индерҙе. Яңы закон проекты хәүефһеҙлекте һәм хоҡуҡ тәртибен тәьмин итеү йәһәтенән миграция өлкәһендә хәлторошто яҡшыртыуға йүнәлтелгән, тип хәбәр итә республика парламентының матбуғат хеҙмәте.**

Дәүләт Йыйылышы рәйесе Константин Толкачев һүҙҙәренсә, Башҡортостан депутаттары хәүефле енәйәт өсөн хөкөм ителгән сит ил граждандарына һәм гражданлығы булмаған кешеләргә илгә инеүгә, ваҡытлыса йәшәүгә рөхсәт, шул иҫәптән белем, йәшәүгә рөхсәт алыуға сикләү ҡуйырға тәҡдим итә. Енәйәттәр иҫәбенә талау, кешенең ғүмеренә һәм һаулығына аңлы рәүештә ауыр йәки айырыуса ауыр зыян килтергән, енси тейелгеһеҙлеккә һәм азатлыҡҡа, йәмәғәт именлегенә, халыҡ һаулығына, конституцион ҡоролош нигеҙҙәренә һәм дәүләт именлегенә, Рәсәй территорияһында, унан ситтә лә кешелектең тыныслығына һәм именлегенә ҡаршы ауыр йәки айырыуса ауыр енәйәт ҡылыу инә.

Был тәҡдим илдә мигранттар ҡылған енәйәт һаны артыуға бәйле (мәҫәлән, 2023 йылда ул 75 процент тәшкил иткән). Был сара миграция ағымын илебеҙҙең йолаларына, тарихына, мәҙәниәтенә һәм закондарына хөрмәт менән тоғро һәм законға буйһонған кешеләр файҙаһына ҡайтанан бүлеү мөмкинлеген бирәсәк.

# ӨЛКӘН БЫУЫНҒА...

**Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров Хөкүмәттә уҙғарған оператив кәңәшмәлә спорт һәм физик культура өлкәһендә дәүләт социаль заказын үтәү мәсьәләһе тикшерелде.**

2022 йылдан был программа сиктәрендә төрлө спорт төрҙәре, шул иҫәптән йөҙөү, художестволы һәм спорт гимнастикаһы, хоккей, самбо, теннис һәм башҡа дисциплиналар, буйынса әҙерлек хеҙмәттәре күрһәтелә. Социаль заказдың тәүге йылында Башҡортостанда спорт менән шөғөлләнеүселәр һаны 15,4 процентҡа артҡан. Дәүләт социаль заказының мөһим йүнәлештәренең береһе - 60 йәштән өлкәндәрҙе физкультура менән шөғөлләнеүгә йәлеп итеү. Был йүнәлеш "Хеҙмәткә һәм оборонаға әҙер" комплексы нормативтарын үтәгән өсөн 10 000 һумлыҡ сертификаттар тапшырыуҙы күҙ уңында тота. Спорт секцияларына бушлай йөрөү мөмкинлеген биргән быңдай сертификаттарға 2023 йылда өлкән йәштәгеләрҙән 1 411 кеше эйә булған. "Сертификаттар оло йәштәгеләргә бассейндарға, тренажер залдарына һәм башҡа секцияларға бушлай йөрөү мөмкинлеген бирә, был уларға, үҙ сиратында, физик әүҙемлектәрен һаҡларға ярҙам итә. 2024 йылда планда - сертификаттар менән 60 йәштән өлкән 2 меңдән ашыу кешене тәьмин итеү", - тине республиканың спорт министры вазифаһын башҡарыусы Руслан Хәбибов.

Республикала шулай уҡ, нормативтарҙы үтәү йомғаҡтарына ярашлы, һаулыҡ мөмкинлектәре сикләнгән кешеләргә спорт менән шөғөлләнеү хаҡын компенсациялау буйынса программаны алты йәштән 18 йәшкә тиклемгеләргә лә таратырға ҡарар ителде. 2024 йылда был категорияға ҡараған 1 мең самаһы кешегә сертификат тапшырыла.

"КИСКЕ ӨФӨ" ПРОЕКТЫ

# УЛАР БАШҠОРТ МӘКТӘБЕНДӘ УҠЫНЫ!

**Балалар, йәштәр фәндәрҙе башҡортса өйрәнеп тә бик юғары маҡсаттарға, вазифаларға өлгәшеп була икәнен белһен өсөн ауылдарыбыҙҙың һәм ҡалаларыбыҙҙың башҡорт мәктәптәрендә белем алып, үҙ тормошонда, эшмәкәрлегендә, ижадында бейектәрҙән-бейек үрҙәр яулаған, республикабыҙҙа һәм Рәсәй кимәлендә киң танылыу тапҡан арҙаҡлы шәхестәребеҙ хаҡында һөйләйбеҙ.**

## МӨБӘРӘКОВ АРЫҪЛАН ҠОТЛӘХМӘТ УЛЫ

А.Ҡ. Мөбәрәков - СССР-ҙың театр һәм кино актёры, режиссёр һәм драматург, йәмәғәт эшмәкәре. Ул 1908 йылдың 15 декабрендә Ырымбур губернаһы Верхнеурал өйәҙе (хәҙер Белорет районы) Асы ауылында тыуған. Ысын исемшәрифе - Арыҫлан Мөбәрәк улы Ҡотләхмәтов. Ата-бабалары ҡатай ырыуынан. Бала сағында уҡ ата-әсәһе вафат булғас, 1920-1927 йылдарҙа Сәрмән балалар йортонда тәрбиәләнә.

1927-1931 йылдарҙа Башҡорт дәүләт сәнғәт техникумының театр бүлегендә М.Ә. Мәһәҙиев һәм В.Ғ. Мортазин-Иманский кластарында уҡый. 1932 һәм 1939 йылдарҙа Мәскәүҙә режиссерҙар курстарында һөнәри белем ала.

Арыҫлан Мөбәрәков тәү тапҡыр оло сәхнәгә 1928 йылда сыға, ул Әбделҡадир Инандың "Аҡшан батыр" трагедияһында төп ролде башҡара. 1931-1933 йылдарҙа ул Стәрлетамаҡтағы II Башҡорт район-ара күсмә театрҙа актер, режиссер һәм художество етәксеһе вазифаларында эшләй. 1933-1934 йылдарҙа Ҡыҙыл Армия сафтарында хеҙмәт итә.

1934 йылдан ғүмеренең аҙағына тиклем ул Башҡорт дәүләт академия драма театрында актёр, режиссёр, художество етәксеһе һәм директор булып эшләй.

Ул башҡарған ролдәр: Юлдыбай (М.Буранғолов,"Башҡорт туйы"), Айсыуаҡ (Ҡ. Даян, "Таңсулпан"), Салауат Юлаев (Б.Бикбай, "Салауат") һ.б.

Н. Ф. Погодиндың "Өсөнсө патетик" һәм "Мылтыҡлы кеше" драмаларында Ленин, Вс. В. Вишневскийҙың "Онотолмаҫ 1919" спектаклендә Сталин, А. С. Пушкиндың "Борис Годунов" трагедияһында, У. Шекспирҙың "Отелло"-һында төп ролдәрҙе башҡара. Режиссер булараҡ, 20-нән артыҡ спектакль ҡуя.

Арыҫлан Мөбәрәковтың иң билдәле актёрлыҡ эштәренең береһе - Степан Злобин сценарийы буйынса режиссёр Яков Протазановтың "Салауат Юлаев" фильмындағы Салауат Юлаев роле.

1948 йылдан СССР Театр эшмәкәрҙәре союзы ағзаһы.

Маҡтаулы исемдәре һәм наградалары: СССР-ҙың һәм РСФСР-ҙың халыҡ, БАССР-ҙың атҡаҙанған артисы. БАССР-ҙың 1-5 саҡырылыш Юғары Советы депутаты. БАССР ҙың Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты (үлгәндән һуң). Ленин, Хеҙмәт Ҡыҙыл Байраҡ һәм "Почёт Билдәһе" ордендары кавалеры.

Ҡатыны Рәғиҙә Янбулатова БАССР-ҙың, ҡыҙы Гөлли Мөбәрәкова - СССР-ҙың халыҡ артистары.

1977 йылдың 5 майында Өфө ҡалаһында вафат була, мосолман зыяратында ерләнгән. Уға Өфө ҡалаһында һәм Асы ауылында һәйкәл ҡуйылған, уның исеме Сибай башҡорт дәүләт театрына бирелгән. Өфө ҡалаһында, Инйәрҙә һәм Асыла Арыҫлан Мөбәрәков урамдары бар.

## ХАЛЫҠ ДАУАҺЫ



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклеге онотмағыҙ.**

### Андыҙ

❖ Тымау тейгәндә бер тигеҙ өлөштә андыҙ, татлы тамыр (солодка), алтей тамырҙарын ҡушырға. Әҙерләмәнең 10 грамына 0,5 литр һыуыҡ һыу ҡойорға һәм 8 сәғәт төнәтергә. Көнөнә 3 тапҡыр яртышар стакан эсергә.

❖ Һимереүҙән 1 ҡалаҡ ваҡланған андыҙ тамырһабағына 1 стакан һыуыҡ һыу ҡойоп, төнгөлөккә һыуытҡыста ҡалдырырға һәм иртәнсәк һөҙөп эсергә. Ҡалған тамырға 1 стакан һыуыҡ һыу һәм 2 балғалаҡ араҡы өҫтәп, тағы 8 сәғәт һыуытҡыста төнәтергә. Был төнәтмәне икенсе көндә эсергә. Төнәтмә аппетитты баҫа.

❖ Ҡартлыҡ склерозынан 30 грамм ваҡланған андыҙ тамырына 0,5 литр араҡы ҡойоп, 40 көн төнәтергә. Шунан һөҙөргә һәм төнәтмәне көнөнә 3 тапҡыр ашарҙан 30 минут алда 20-25 тамсы эсергә. Оҙайлы дауаланыу кәңәш ителә.

❖ Ашҡаҙан һәм эсәктәрҙең сей яраһы булғанда 1 балғалаҡ ваҡланған андыҙ тамырына 1 стакан һыу ҡойоп, 10 сәғәт төнәтергә. Тәүлек эсендә эсеп бөтөргә.

❖ Быуындар һыҙлағанда 100 грамм яңы ҡаҙылған андыҙ тамырына 1 литр һыу ҡойоп, 15 минут ҡайнатырға, төнәтергә, һөҙөргә һәм йылы һыу ҡушырға. Һыҙлаған ҡул һәм аяҡ бармаҡтарын тығып ултырырға. Һыу 38 градустан да эҫерәк булмаһын.

❖ Тәнгә сабыртҡы сыҡҡанда андыҙҙың 100 грамм тамыры һәм тамырһабағына 4 стакан ҡайнар һыу ҡойорға, 4 сәғәт төнәтергә. Тәнгә ҡысытып сабыртҡы сыҡҡанда ҡулланырға.

❖ Коклюштан 1 ҡалаҡ андыҙ тамыры һәм тамырһабағына 2 стакан һыу ҡойорға һәм 15 минут талғын утта ҡайнатырға. Көн дауамында сәғәт һайын 2-шәр ҡалаҡ эсергә. Иғтибар: бөйөр ауырыуҙары булғанда был дауаны ҡулланыу ярамай.

### Әнис

❖ Ауыҙҙан еҫ килгәндә 2 балғалаҡ әнис орлоғона 1 стакан ҡайнар һыу ҡойоп, 15 минут төнәтергә һәм һөҙөргә. Ашағандан һуң ауыҙҙы һәм тамаҡты сайҡарға.

**Ғәлиә ШӘМСИЕВА әҙерләне.**

✔ **Башҡорттоң милли кейеме икәнен көндәлектә лә аңлап кейергә өйрәтергә кәрәк йәштәрҙе, тигән уй менән ҡайттым. Берәй костюмға, заманса эш кейеменең жилетына биҙәк төшөрөп кейеүҙе ғәҙәткә индереү кәрәк.**



ЗИҺЕН КИҢӘЙТЕП...



# КӨНЬЯҠ УРАЛ ҠОШТАРЫ

**Ҡупый, һыу тауығы**

**(Погоныш)**



Ҙурлығы яғынан тартай менән тәтелдәгестән ҡайтышыраҡ, сама менән сыйырсыҡ кеүегерәк. Йыраҡтан ҡап-ҡара булып күренә, ысынында иһә ҡупыйҙың "тун"ы төрлө таптар, буй һыҙыҡтар һәм тамсы кеүек биҙәктәр менән "биҙәлгән". Суҡышы ҡыҫҡа, аяҡтары йәшел. Бик насар оса, кешенән ныҡ йәшеренә.

Яҙын ата ҡупый "уить-уить" тигән бер төрлөрәк тауыш сығара. Уны иртә таң менән һәм киске эңерҙә ишетергә була. Башҡортостанда дала һәм урманлы дала зонаһында осрай. Һаҙлыҡ, еүеш яландар, һыуы таҙа булмаған күлдәр ҡупыйҙың яратып төйәк иткән ерҙәре. Дим, Сәрмәсән, Ағиҙел үҙәндәрендә күренә. Һыу булған ерҙә ҡупый ҙа бар тип әйтергә мөмкин. Көньяҡ Уралда һаҙлыҡлы йылғаларҙа оя ҡора. Таналыҡ, Урал, Уя йылғалары араһында оя ҡоралар, Учалы күлдәрендә йыш осрай.

Яҙын ҡар иреп, йылға-күлдәрҙә боҙ иреү менән үк ҡайта, был яҡынса 20 апрелгә тура килә. Йәшерен йәшәү рәүешен үҙ итеүҙәре арҡаһында уларҙың барлығы хаҡында ата ҡоштоң туй йыры аша ғына белеп була.

Оялары һаҙлыҡта, дымлы урында. Инә ҡош йышыраҡ - 8, һирәгерәк 10-12 йомортҡа һала. 18-24 көн эсендә бәпкәләр сыға башлай. Бәпкәләр ҡап-ҡара йөнлө, суҡыштары ҡыҙғылт һары-ҡара төҫтә, суҡыш осо аҡ. Тәүге тәүлектәрҙә уларҙы оло ҡоштар ашата, 3-4-се көндән иһә бәпкәләр үҙ аллы бөжәктәр тота башлай. Шулай ҙа ата-инәләре уларҙы 3 аҙнаға тиклем ҡарай. 6 аҙналыҡ йәш ҡоштар ояны ташлап китә.

Эңерҙә һәм төнөн бик әүҙемдәр. Бөжәктәр, шулай уҡ үҫемлектәрҙең йәшел өлөшө һәм орлоҡтары менән туҡлана. Һыуҙа еңел йөҙә, сума ла ала.

Йылы яҡҡа яңғыҙ, төнгө мәлдә генә оса. Был июль аҙағына тура килә. Африканың көньяҡ-көнсығышында һәм Азияның көньяғында ҡышлай.

**М. Баянов, Ә. Мәмәтов,**
**"Көньяҡ Урал ҡоштары" китабынан.**
**(Дауамы бар).**

ТЕМАНЫ ДАУАМ ИТЕП...

# БАШҠОРТ МИЛЛИ КЕЙЕМЕН...

## төп нөсхәлә күрһәтә "Тамға"





**(Башы 1-2-се биттәрҙә).**

***Гөлсөм Хөсәйенова, "Тамға - 2024" конкурсында Гран-при яулаусы:*** "Тамға"ның икенсе конкурсында ҡатнашып, 3-сө урын алдым, өсөнсө конкурста - 1-сегә сыҡтым һәм бына быйыл Гран-при бирҙеләр. Быйыл мин барыһы 9 кейем комплекты әҙерләгәйнем, моделдәр етешмәү сәбәпле, 7-һен генә яҡлауға сығарҙым. Шулай ҙа финалда барыһын да күрһәтә алдым: көньяҡ-көнсығыш, көньяҡ, төньяҡ-көнсығыш, төньяҡ-көнбайыш, Урал аръяғы, Дим буйы башҡорттарының кейем өлгөләрен тәҡдим иттем. Был кейемдәрҙе мин ике йыл әҙерләнем. 2022 йылғы конкурс тамамланғас та сигеү эштәренә тотондом, сәкмәндәргә материалдар туплай башланым. Милли кейем тегеү - минең өсөн яратҡан шөғөл. Үҙем заводта сығарылған продукцияның сифатын тикшереүсе булып эшләйем. Дүрт көн эшләп, дүрт көн ял итәм һәм барлыҡ буш ваҡытымды, дәртемде, көсөмдө һәм финансымды ошо шөғөлөмә бирәм.

Бәләкәйҙән ҡул эштәренә битараф булманым, оҫталығым өләсәйемдән киләлер, тим, ул 86 йәштә баҡыйлыҡҡа күскәнсе балаҫтар һуҡты. Өләсәйем сигә, тегә, дирүгәләр һуға, түшәктәр тегә торғайны. Мин дә сәкмәнгә туҡыманы үҙем һуғырмын тип һуғыу станогы һатып алғайным да, өлгөрә алмай, батша заманынан ҡалғанын һатып алдым. Бындай боронғо туҡыма менән эшләүе еңелдән булманы, әлбиттә. Бына шулай, 2017 йылдан алып милли кейемебеҙгә ҡарата ҡыҙыҡһыныуым артып, һәр төрлө тарихи сығанаҡтарҙы, китаптарҙы уҡып, өйрәнеп алып киттем. Башта Бөрйән районында селтәр, елән, сәкмән кейгән булғандарҙыр, тип кенә уйлап башлағайным, башҡорт милли кейеменең күп төрлөлөгөнә, матурлығына хайран ҡалдым. Һәр төбәктең үҙенә хас кейеме, биҙәктәре булған һәм кемдең ҡайҙан булыуын кейеменә ҡарап айырып була икән. Мин берәй нәмә эшләһәм, шунда уҡ коллекция йыя башлайым. Ошо холҡом тәүҙә башҡорт ҡатын-ҡыҙҙарының түш биҙәүестәренең 7 төрөн йыйҙырҙы, уларға тап килгән күлдәктәр кәрәк булды, шунан өҫ кейемдәре...

"Тамға" конкурсы минең кеүек оҫталарҙы сәмләндерә, йылдан-йыл төрлө номинациялары ла артып тора, һәр беребеҙгә үҙ эшен күрһәтергә, тәжрибә уртаҡлашырға мөмкинлек бирә. Хәҙер сәхнә кейеменең модаһы үтте, боронғо кейемдәребеҙҙең тулы күсермәһен эшләп кейеү көнүҙәк. Иғтибар иткәнһегеҙҙер, йәш кәләштәр хәҙер үҙебеҙҙең ҡашмауҙарҙы аҡ мәрйендән дә, ҡыҙылынан да матур итеп яһап кейә. Хатта европаса туй күлдәктәрен аҡ төҫтәге башҡорт милли кейеме алмаштыра. Бында ошо "Тамға" кеүек конкурстарҙың, республикала Милли кейем көнөн билдәләү һәм башҡа матур байрам саралары ла булышлыҡ итә.

***Гөлдәр Шәбиева, Салауат районы, Комсомол ауылынан, "Тамға"ла ҡатнашыусы:*** "Тамға" конкурсы беренсе тапҡыр үткәрелгән йылда ҡатнашып, башҡорт ҡатын-ҡыҙҙарының баш кейеме кәләбәште тергеҙеп, беренсе урынға лайыҡ булғайным. Был йылдар эсендә оҫталар һаны ла, улар тәҡдим иткән кейемдәр һаны ла күбәйгән, төрлөләнгән. Мин тәү сиратта милли кейемебеҙҙе йәштәребеҙгә кейҙереү яҡлымын, шуға финалда күрһәтелгән "Ханымдар" һәм "Ҡайыу бәхете" кейем коллекцияларын айырыуса хуплап ҡараным. Һәр ғаиләлә бер генә булһа ла милли ҡомартҡыбыҙ һаҡлана икән, шуны заманса кейем менән зауыҡлы ғына итеп килештереп кейеп йөрөргә өйрәтергә, шул өлгөнө күрһәтергә кәрәк йәштәргә. Был бит мөмкин. Замансалаштырып үҙгәртеп яһалған биҙәүестәр һаны кәмене-кәмеүгә, был да ҡыуаныслы күренеш. Юғиһә, күп кенә оҫталар менән аралашҡанда: "Әсәйем, йәки өләсәйем ошолай эшләгән, үҙгәртмәйем", - тигәндәрен ишеткәнем бар һәм беҙ гел шундай заманса түш биҙәүестәре генә яһаһаҡ, киләсәк быуындарға нимә ҡалдырабыҙ? Боронғо башҡорт милли кейеменең матурлығын, байлығын юғалтыуыбыҙ ихтимал. Тарихи сығанаҡтарға таянып, дөрөҫ итеп тергеҙеп, шуны йәштәргә өлгө итеп күрһәтеп кейеп йөрөүҙең әһәмиәте бына ниндәй ҙур.

Ә йәштәрҙе ылыҡтырһаң, улар ҡыҙыҡһынып китә һәм тиҙ генә өйрәнеп алалар. Минең ауылда "Һомай" тигән музейым бар: йыһазландырылған башҡорт йорто. Геопарктың бер өлөшөнә ҡарағас, беҙгә шифахананан экскурсияға ла киләләр һәм барыһы ла башҡорт милли кейеменә, йорт йыһаздарына һоҡланыуҙарын белдерә. Балалар килгәнендә милли кейемле ҡурсаҡтарға күҙҙәре төшә, үҙҙәре кейенешеп, фотоға төшөп ҡайтып китәләр.

Беҙ милли кейемдәрҙе йәштәр өсөн эшләйбеҙ, кәләбәште лә мин тик йәш ҡыҙҙарға ғына кейҙерәм. Үҙем киймәйем, кәләбәштең бәҫен төшөргөм килмәй. Һылыу йәш ҡыҙҙар ғорурланып кейеп, фотоға төшһөндәр, тим. Әйткәндәй, милли кейемдә зауыҡлы фотоһүрәттәр төшөрөү ҙә бик мөһим.




***Резедә Нуриманова, Нуриман районы Яңы күл ауылынан, "Тамға"ла ҡатнашыусы:*** "Тамға" конкурсында икенсе тапҡыр ҡатнашам. Тәүге тапҡыр 2022 йылда ҡатнашҡайным. Сағыштырып ҡарағанда, яңылыҡтар күп, оҫталар йылдан-йыл арта бара. Быйыл көньяҡ башҡорттарының сағыу-сағыу кейемдәрен күп эшләгәндәр. Өҫ кейемдәренең ниндәйе генә булманы: елән, сәкмәндәрҙе уҡалап, биҙәкләп эшләгәндәр. Беҙҙең яҡта уҡаны бик ҡулланмағандар, сәкмән, камзул, еләнде бер төҫтән генә теккәндәр. Улар ҡара, ҡара һоро, ҡара зәңгәр, ҡара йәшел төҫтә булған, ғәҙәттә. Ҡатын-ҡыҙҙарҙың күлдәктәре лә шундай ҡараһыу туҡымаларҙан булған һәм шуға уларҙы матурлар өсөн сағыу ептәр менән сәскәләр ҡайығандар. Хәҙерге Балаҡатай, Мәсетле, Нуриман районында йәшәгән башҡорттарҙың кейеме нәҡ шулай биҙәлгән.

Мин өләсәйемдең борон үҙе ҡул энәһе менән сиккән күлдәк өлгөһөн тергеҙеп, шуны конкурсҡа тәҡдим иттем. Быйыл ир-егеттәрҙең кейеменә һоҡланып ҡараным, ғаиләләре менән ҡатнашҡан оҫталарҙы бик оҡшаттым. Минең күлдәгемде лә бик ҙур ҡыҙыҡһыныу менән ҡаранылар, аралаштыҡ, таныштыҡ башҡа оҫталар менән. "Ағиҙел" берекмәһенең бер төҫлө заманса күлдәктәрҙең итәк осона, ең осона ғына башҡорт биҙәген сигеп тәҡдим иткән кейеменә һоҡландым. Башҡорттоң милли кейеме икәнен көндәлектә лә аңлап кейергә өйрәтергә кәрәк йәштәрҙе, тигән уй менән ҡайттым. Берәй костюмға, заманса эш кейеменең жилетына биҙәк төшөрөп кейеүҙе ғәҙәткә индереү кәрәк.

Беҙҙең яҡта сәйлән ҡулланмағандар, ә таҡыяларҙы быяла мунсаҡ менән биҙәгәндәр. Артабан ошоно ла эшләп, төньяҡ-көнсығыш башҡорттарының бүләкәй-көҙәй ырыуы ҡатын-ҡыҙҙары кейемен тулыһынса тергеҙергә теләгем бар. Үҙем ағинәйҙәрҙең "Гөлнәзирә" башҡорт фольклор коллективы ағзаһымын, барыбыҙ ҙа матур милли кейемдәр тегеп кейгәнбеҙ. Мәктәп уҡыусыларын да ҡайырға өйрәтеп, улар әсәйҙәренә ҡулъяулыҡтар сигеп бүләк итеп, ҡыуанышып йөрөнөләр. Уйлап ҡараһаң, ошо балаларға энә тоторға булһа ла өйрәтергә кәрәк. Хәҙер бит энә күҙләй белмәгән, һүтелгән йәки йыртылған кейемен тегеп алыу тураһында уйлап та бирмәгән йәштәр күп.

**Сәриә ҒАРИПОВА яҙып алды.**

✓ *Ҡаланы төҙөкләндереүгә килгәндә, генерал Эссен һәр бер өй алдында бәләкәй баҡса (палисадник) булдырыуҙы һәм унда ағастар ултыртыуҙы талап итә. Өй хужалары, полиция ҡушҡас, ағас ултырта һәм уларҙы рәшәткәләп ҡуя.*



*ТАРИХИ ХӘҠИҠӘТ*

# ЫРЫМБУР ГУБЕРНАТОРҘАРЫ ҺӘМ БАШҠОРТТАР

## (Генерал-майор И.В. Чернов яҙмаларынан)



**П.К. Эссен**

**(1817 - 1830 йылдарҙа губернатор булған).**

Эссен идара иткән ваҡыттағы икенсе бер ҙур енәйәт эше - бер ҡатындың үҙенең законлы ирен - Боғорослан өйәҙенең бай помещигын күмеп ҡуйыуы. Ҡатыны, ирен йоҡлатып, табутҡа һала һәм зыяратҡа алып барып ерләй. Был бәхетһеҙҙең ер аҫтынан сыҡҡан ыңғырашыуҙарын үтеп барыусы кешеләр ишетә һәм тейешле урынға хәбәр итә. Тол ҡатын үҙе менән бәйләнештә булған идараһына кейәүгә сыҡҡан йә иһә сығырға уйлаған, ҡарт ир быға вайымһыҙ ҡараған, әммә бер-береһенә ғашиҡ булыусыларға законлы рәүештә йәрәшеү мөмкинлеге булмаған. Был эш оҙаҡ бара, һәм ҙур аҡсалар уны туҡтатырға ярҙам итә. Губернатор канцелярияһының элекке етәксеһе Шамонин шуға булышлыҡ иткәне өсөн бирелгән аҡсаға үҙенә 300 кешеһе менән имение һатып алған тип һөйләйҙәр ине.

Эссен эргәһендә уның элекке адъютанты, полковник Циолковский махсус йомоштар буйынса чиновник вазифаһын башҡара. Уның айырым часы булмай, башҡорт эштәре менән шөғөлләнә, һәм 1834 йылда башҡорт ғәскәре командующийы итеп тәғәйенләнә. Ул помещик Крашенинниковтың ҡыҙына өйләнә һәм вафатына тиклем ошонда йәшәй. Һуңғы ваҡытта Циолковскийҙар ярлылана, ә ҡасандыр бай йәшәҙәр, ҡунаҡсыл булалар, бигерәк тә ҡарт үҙе, ул, поляк булараҡ, бында һөргөнгә ебәрелгән поляктарҙы ҡурсалай.

Тағы ла бер Герман исемле хәрби офицер Эссен ваҡытында Хива ханы һәм Бохара әмире менән дипломатик бәйләнеш эштәре менән шөғөлләнә. Быныһы аҡылдан яҙғандай ҡылана, ҡатын-ҡыҙҙарҙы һөйөүсе булараҡ, бик әшәке кеше; урамда ябай ҡатын-ҡыҙҙы туҡтатып, уларҙы бар кеше алдында ҡосаҡлай һәм үбә. Иләмһеҙ циник, писарҙан ниндәй ҙә булһа мөһим ҡағыҙҙы яҙҙырғанда төрөпкә тартҡан һәм тәртипһеҙ ҡыланған. Әммә йәмәғәт мөхитендә һөйкөмлө булған тип һөйләйҙәр, һәм уға сенатор Мансуровтың йәше уҙып барған ҡыҙы ғашиҡ була; һөйөклөһө Ырымбурҙан киткән саҡта уның артынан ҡыуа сыға, әммә бынан бер ни ҙә килеп сыҡмағас, 1846 йыл башында ҡарт ҡыҙ көйөнсә вафат була.

Ошо Герман тураһында тағы бына ниҙәр һөйләгәндәр: почта станцияһында ат килтереүҙәрен көтөп ятҡанда Герман, бынан үтеп барыусы барыня һәм дин әһеле бер бүлмәлә йоҡлаған. Төнөн Герман оятһыҙ ниәт менән барыня эргәһенә килеп ятырға маташҡан; тегеһе уның битенә сапҡан. Үҙен ғәйепләмәһендәр тип, Герман ныҡ ҡына итеп попҡа һуғып ебәргән; тегеһе уянып киткән дә әйтә икән: "Кем бында һуғыша?" Дама яуаплай: "Аҙ булды әле, нығыраҡ кәрәк ине". Ә Герман үҙенең диванында борғолана һәм һуҡрана: "Ниндәй таууыш ул, йоҡлап та булмай!"

Генерал Эссендың Ырымбур ҡалаһына килгәненә тиклем ҡала 70 йыл бар ине инде, һәм уның 10 йыл буйына дауам иткән идаралығы ваҡытында интеллигенция йыйылыштары өсөн йәмәғәт йорто булманы. Чиновниктар класы ҙур байрамдарҙа үҙҙәренең начальниктарына килә, ә ғаиләләре менән ваҡытты күркәмерәк итеп шәхси кешеләрҙең йорттарында уҙғара, әммә һуңғылары ла аҙ була. Йәй көндәрендә халыҡ ҡала ҡаршыһындағы, Урал йылғаһы менән Старица араһындағы сауҡалыҡта байрам итә.

Эссен начальниктарҙан беренсе булып ошо урынды төҙөкләндереүгә иғтибарын йүнәлтә: ял итеүселәр өсөн беседкалар төҙөтә, Урал һәм Старица ярҙарында буй һәм арҡыры юлдар һалдырта, улар беседкаларҙың береһенә илтә; һуҡмаҡтар төйгөсләп таҡырайтыла һәм ҡом һибелә, сауҡалыҡ һәр саҡта ла таҙа һәм бөхтә итеп тотола. Эштәрҙе йәйге ваҡытҡа хеҙмәткә саҡырылған башҡорттар башҡара; урядник һәм бер нисә казак тәртип һаҡлай.

Йәйҙәрен байрам ваҡытында сауҡалыҡта музыка яңғырай, бында казактар һәм һалдаттарҙан йырсылар килтерелә. Тантаналы батша көндәрендә фейерверктар ҡулланыла. Ҡаланан сауҡалыҡҡа һәм кирегә йылға аша сығыу өсөн түләүһеҙ паром була, әммә ябай халыҡ паром менән сығарылмай; теләгәндәргә сауҡалыҡта йөрөү тыйылмай, әммә улар күпер аша сығырға тейеш була, ул әле лә бар. Ял итеүселәр сауҡалыҡтың уртаһынан арыраҡ, хәҙерге баҡсасылыҡ йәмғиәте аллеяһына ҡаршы урынлаша.

Эссен киткәнгә тиклем Старица бөгөлө артындағы майҙансыҡта таш беседка төҙөлә, ул байтаҡ ваҡыт ошонда ҡала, тик 1890 йылдарҙа ҡала думаһы ҡаршыһындағы скверға күсерелеп ҡуйыла. Хушлашыу мәжлесенән һуң Эссен ошо беседканан китә лә инде.

Кенәз Волконский һәм Эссен заманында Тимашевтарҙан башҡа бай помещиктарҙан кемдең дә булһа Ырымбурҙа йәшәүе икеле. Һуңғыларынан Егор Николаевич Ырымбур казак ғәскәренең командующийы була һәм ошо вазифала үҙе өсөн ауыр ваҡытта идара итә: уның бай имениелары тарҡатыла һәм опека ҡарамағында ҡала.

Мансуровтар икәү була - береһе ҡыҙ кеше, ә икенсеһе Габбеның тол ҡатыны, уның хаҡында алдараҡ бәйән иткәйнек, уларҙың ағаһы Николай Александрович Мансуров Петербургта хеҙмәт итә.

Бай сауҙагәрҙәр булмай әле. Беренселәрҙән булып Осоргин һанала, ул тиҙҙән бөлә; башҡа яҡтарҙан - Пичугин, Веснин һәм Дюков бында килеп-китеп кенә йөрөй, улар үҙҙәренең тыуған яғында - Ярославль губернаһының Ростов ҡалаһында йәшәүҙе хуп күрә; шуға күрә Ырымбурҙа йәмәғәт тормошо булмай, йыйылыштар уҙғарылмай, ғаиләләре менән туғанлыҡ һәм танышлыҡ буйынса көн итәләр, һәм уларҙың вәкилдәре йыйылышҡан хәлдә лә, был ҙур байрамдар ваҡытында губернаторҙа ғына була. Ул үҙенең дәрәжәһе һәм тормош көтөү саралары буйынса беренсе кеше булһа, уның артынса шарап алып һатыусылар - Еникуцев, Звенигородский, һуңынан Горячев айырылып тора.

Ҡаланы төҙөкләндереүгә килгәндә, генерал Эссен һәр бер өй алдында бәләкәй баҡса (палисадник) булдырыуҙы һәм унда ағастар ултыртыуҙы талап итә. Өй хужалары, полиция ҡушҡас, ағас ултырта һәм уларҙы рәшәткәләп ҡуя, ә төпкөл урамдарҙа ситәнләп ҡуйыуҙа рөхсәт ителә. Ҡаҙна өйҙәре тирәһенә иң яҡшы ағастар ултыртыла. Хәҙерге Николаев урамының ике яғына ла ағас ултыртылғас, был урам аллеяға оҡшап ҡала; даими һәм бөхтә итеп һыу һибеп торолғас, ағастар тиҙ үҫеп китә; бейеклеге менән айырылып торған ағастар ҡунаҡ ихатаһы (гостиный двор) яғында, девизион һәм бригада командирҙары өйҙәре, хәҙерге 2-се корпус бинаһы һәм Тимашев, хәҙер Ладыгин өйө янында үҫә. Бында ағастар һуңғы ваҡытҡа тиклем торҙо, тик уларҙы өйҙәрҙе үҙгәртеп ҡорған саҡта, эшкә ҡамасаулай тип, киҫеп ташлайҙар. Ҡырғыҙ (ҡаҙаҡ. - **Тәрж. иҫк.**) мәктәбе бинаһы янында шул ваҡытта ултыртылған икеме, өсмө ағас тороп ҡалған шикелле.

Башҡа урындарҙа ағас ултыртылған бәләкәй баҡсалар тәүҙә ипләп ҡарала, әммә һауаның ҡоро һәм ныҡ эҫе, ҡыштарын һалҡын булыуы, һибер һыуҙы Урал йылғаһынан ташыу ауыр булғанлыҡтан, ағастар ҡорой һәм киҫеп ташлана.

Мин үҙемдең өйөм эргәһендә, Петропавлов урамында, бер нисә ҡайын ултыртҡайным, улар ерегеп китте һәм 1840 йылға тиклем үҫтеләр, әммә шул йылдың иртә яҙында, тамырҙары һалҡында зарарланғанлыҡтан, ҡороп бөттөләр.

Николаев урамының башынан аҙағына тиклем тротуар һалына, уның эҙҙәре әүәл Ырымбур сик комиссияһы биләгән, хәҙер ҡырғыҙ мәктәбе урынлашҡан бина ҡаршыһында һәм элек генерал-губернаторҙыҡы булған, хәҙер сауҙагәр Оглодков өйө ҡаршыһында күренә.

**Арыҫлан ТАЙМАСОВ тәржемәһе.**
**(Дауамы бар).**

*БӨЙӨК ЕҢЕҮГӘ - 79*



# ҠАҺАРМАНЛЫҠ ТАРИХЫ

### Көнсығыш Померания һөжүм итеү операцияһында

Браллентин янындағы яуҙа 62-се гвардия атлы полкының 76-миллиметрлы орудиелар батареяһы командиры, гвардия капитаны В. Н. Клочков алыш барышында килеп тыуған көсөргәнешле бер мәлдә артиллеристарын контратакаға күтәрә, һөҙөмтәлә орудиелар дошман ҡулына эләкмәй. Яраланған Клочков батареяһы менән командалыҡ итеүен дауам итә.

Дошман16-сы гв. атлы дивизияһының уң флангыһында ҡаты һөжүм башлай. Бында 62-се гв. атлы полкының 76-миллиметрлы орудиелар батареяһы немецтарҙың 3 танкыһын емертә, уларҙың ике ротаға тиклем пехота һалдаттары атакаһын кире ҡаға. 60-сы гвардия атлы полкының ҡылыссылар эскадроны (командиры - Советтар Союзы Геройы, гвардия өлкән лейтенанты А. М. Симанов) танкыларға ҡаршы ата торған мылтыҡтарҙан һәм гранаталар менән 4 танкыны сафтан сығара, дошман автоматсылары атакаһын кире ҡаға.16-сы гвардия атлы дивизияһы немецтарҙың барса атакаларын кире ҡаға, биләгән позицияларын дошманға ҡалдырмай. Әммә юғалтыуҙар ҙа арта бара. 58-се гвардия атлы полкының Браллентиндың көньяғынан төньяҡ ҡырыйына килеүе лә дивизияның ауыр хәлен әллә ни үҙгәртә алмай.

26 февралдә 61-се армия командованиеһы 7-се гвардия атлы корпусына оборона рубежын 80-се уҡсы корпусы частарына ҡалдырырға бойора.

Был көндәрҙә немецтарҙың "Висла" армиялар төркөмө 1-се Белорус фронтының уң флангыһына контрһөжүм яһарға әҙерләнә. Әммә совет ғәскәрҙәре дошмандан алдараҡ үҙҙәре һөжүм башлай.

7-се гвардия атлы корпусы Цахан, Линде исемле тораҡ пункттарын ала, 2 мартта Зукков, Кремцов, Коллин ҡалалары янына килеп етә. 16-сы гвардия атлы дивизияһы корпустың беренсе эшелонында Линде, Кремцовҡа табан хәрәкәт итә. Дошман серәшеп, ергә йәбешеп ҡаршы тора. 62-се гвардия атлы полкы Линде ауылын алғанда немецтарҙың 3 үҙйөрөшлө "фердинанд" орудиеһын һәм 200-гә яҡын һалдатын юҡ итә. Кремцов ҡалаһы өсөн алыш бигерәк тә көсөргәнешле бара, ул ике тапҡыр ҡулдан ҡулға күсә. Был алыштарҙа 60-сы гвардия атлы полкының 4-се эскадроны яугирҙары айырыуса сая һәм тәүәккәл эш итә, тап улар ҡалаға иң алдан бәреп керә һәм бөтөн дивизияның һөҙөмтәле һөжүме өсөн уңайлы шарттар булдыра (эскадрона командиры гвардия капитаны И. П. Разволяев).

3 мартта корпус Шенеберг, Массов, Наугард, Грайфенберг йүнәлешендә хәрәкәтен дауам итә һәм 3-сө удар армияһы менән булған арауыҡты ҡаплай. 5 мартта ул Плате, Грайфенберг районына сыға һәм командование ҡуйған маҡсатҡа өлгәшә. Грайфенберг районында корпус соединениелары түңәрәк оборона тота, шул уҡ ваҡытта Балтик диңгеҙе ярына тиклем разведка яһай. Разведка ошондай мәғлүмәт алып ҡайта: дошман ҡамауҙан көнбайышҡа табан ике төркөмгә бүленеп сығырға итә. Немец частарының ҙур бер төркөмө (25 меңгә яҡын кеше) Балтик диңгеҙе яры буйлап Хорст йүнәлешендә хәрәкәт итә һәм артабан көнбайышҡа йүнәлә, икенсе төркөм (5 меңгә яҡын кеше) Грайфенбергҡа табан бара. Төркөмдәрҙә танкылар һәм штурм орудиелары байтаҡ була.

**Вәли ИҘРИСОВ әҙерләне.**
**(Дауамы бар).**

***✓ Һынлы сәнғәт мәктәбенә килгән һайын үҙемде бәхетле итеп тоя инем, шул саҡта уҡ "Үҙем ҙурайғас, балалар өсөн ошондай мәктәп асасаҡмын", тип һүҙ бирҙем.***

# МИН ЗАМАНДЫ

**Халыҡ-ара Рәссамдар федерацияһы һәм Башҡортостандың Рәссамдар союзы ағзаһы Эльза ҠОТЛОБАЕВАның Башҡортостан Республикаһы Милли музейында шәхси күргәҙмәһе асылды. Эльза Зәүр ҡыҙы ижадында башҡорттар йәшәгән бик боронғо осорҙо һүрәтләй. Урал батырға тиклемге башҡорттоң донъяға ҡарашы, мөнәсәбәте, фәлсәфәһе бик үҙенсәлекле сағылыш ала. Күргәҙмә 30 сентябргә тиклем эшләйәсәк. Рәхим итегеҙ!**

**Эльза, һеҙ Өфө ҡыҙы, һынлы сәнғәттә үҙ юлығыҙҙы тапҡан, күп күргәҙмәләр ойошторған, башҡорт сәнғәтен пропагандалаған рәссамдарыбыҙҙың береһе. Һынлы сәнғәткә тоғролоҡ, эҙләнеү-асыштарығыҙ менән күптәргә үрнәк булып тораһығыҙ. Рәссам булыу бала саҡ хыялы инеме, әллә был юл көтөлмәгәнсә башландымы?**

- Мин бәләкәйҙән һүрәт төшөрөргә яраттым, балалар баҡсаһына йөрөгән сағымда әсәйемә минең эштәремде күрһәтәләр. Һүрәтте матур төшөргәнемде ул шунда белеп ҡала. Ә атайым үҙе йәш саҡтан рәссам булырға хыялланған. Беҙҙең ғаиләлә биш бала, уларҙы ҡарарға, уҡытырға кәрәк, тимәк, хыялын тормошҡа ашыра алмай - ваҡыты ла, мөмкинлеге лә юҡ. Шулай ҙа атайым хаҡлы ялға сыҡҡас булһа ла үҙенең хыялына өлгәште. Черниковкалағы һынлы сәнғәт мәктәбенә кистәрен йөрөп уҡып, әлбиттә, һүрәттәр төшөрә башланы.

Рәссамлыҡҡа һәләтем барлығын белгәс, атай менән әсәй мине шул йүнәлештә үҫтерергә ниәт итәләр. Икенсе класта уҡыған сағымда әсәйем радионан Ибраһимов урамында 2-се һынлы сәнғәт мәктәбе тураһында ишетә. Алып барҙы шунда, рәсемдән һынау биреп, уҡырға индем. Бына шулай башланды профессиональ эшмәкәрлегемә йүнәлеш. Был мәктәп миңә бик күп нәмә бирҙе. Рәссамлыҡ юлымдың иң мөһим мәле уның менән бәйле, тием, сөнки унда уҡыуым һуңынан үҙемдең һынлы сәнғәт студиямды асырға ярҙам итте. Был мәктәп миңә үҙемдең бала кешегә хас булған бөтөн хәсрәт-көйөнөүҙәремдән азат булырға өйрәтте. Минең психолог белемем дә бар, шуға быны белгес булараҡ та аңлата алам: өлкәндәр ҙә, балалар ҙа психологик тетрәнеү-хәүефләнеүҙәргә дусар, йәғни өлкәндәр һымаҡ, балалар ҙа бөтөн кисерештәрҙе үҙҙәре аша үткәрә. Шуны ла әйтергә кәрәк, бала проблемаларына ололар хатта иғтибар ҙа итмәй. Һүрәт төшөрөү минең өсөн арт-терапия, арт-сәнғәт булды, ауыр кисерештәремдән бушанырға ярҙам итте. Өйөбөҙгә үҙемдең проблемаларымды онотоп, тынысланып ҡайта торғайным.

**Ниндәй проблемалар тураһында һүҙ бара? Быны аңлау ата-әсә өсөн дә файҙалы булыр ине.**

- Кемдеңдер рәнйетеүе, ҡыйырһытыуы, ағай-апайҙың үҙ-ара талашып китеүҙәре, атай-әсәйҙең низағлашып алыуҙары... Мәктәптә класташ ҡыҙың мыҫҡыллы һүҙ әйтә, дуҫыңмы, уҡытыусыңмы, һине аңламай, йәки уҡытыусы ғәҙелһеҙлек күрһәтеп, икеле ҡуя, дәресте аңлай алмайһың, өйгә эште эшләй алмайһың. Өйгә ҡайтҡас, атай-әсәй ҡаты итеп өндәшә. Балалар быларҙы бит бик ауыр кисерә, барыһын да үҙенә һеңдерә, тик унан нисек сығырға белмәй. Рәсем, йыр, спорт түңәрәктәре балаға шуларҙы еңеп сығырға, арынырға һәм яңынан үҙенең тәбиғи хәленә ҡайтырға ярҙам итә. Һынлы сәнғәт мәктәбенә килгән һайын үҙемде бәхетле итеп тоя инем, шул саҡта уҡ "Үҙем ҙурайғас, балалар өсөн ошондай мәктәп асасаҡмын", тип һүҙ бирҙем.

Мине алтынсы кластан һуң Ҡасим Дәүләткилдиев исемендәге Республика һынлы сәнғәт гимназия-интернатына уҡырға бирҙеләр. Уны иң матур йылдарым тип иҫкә алам. Сөнки һин хәҙер үҫмер ҡоронда - тормошто нығыраҡ аңлайһың, тимәк, бәләкәй саҡтағы һымаҡ самаһыҙ көйөүхафаланыу юҡ, тиерлек. Ҡ. Дәүләткилдев исемендәге гимназияла мин яҙыу техникамды нығыттым. Башланғыс синыфта йөрөгән һынлы сәнғәт мәктәбе психологик йәһәттән ярҙам итһә, бында һөнәри йәһәттән үҫеш алдым. Унда уҡығанда үҙемдән өлкәнерәк бер малай миңә оҡшай торғайны. Уның сәнғәт училищеһына уҡырға барырға йыйынғанын белгәс, мин дә шунда уҡырға барам, тип ҡарар иттем. Бары тик рәссамлыҡ менән генә шөғөлләнеүемде теләгән атай-әсәйем шундуҡ риза булдылар. Һәм туғыҙынсы класты тамамлағас, мин Өфө сәнғәт училищеһына уҡырға индем. Ләкин теге малай инде мине ҡыҙыҡһындырмай ине. Үҫмерлек һөйөүем шулай тамам булды.

**Училищеға уҡырға инеүе ауыр булманымы, унда ла бит төрлө яҡтан килгән һәләтле йәштәр һынау тота?**

- Унда барыр алдынан да өҫтәмә дәрестәр алдым. Атай-әсәйем миңә бик яҡшы уҡытыусы таптылар. Илшат Ишбулды улының оҫтаханаһына йөрөнөм. Был 1992-1993 йылдар ине. Дәрес хаҡы илле һум. Кискеһен барам, бер ярты сәғәт эсендә ул миңә шул тиклем ҙур белем бирә ине. Һүрәт төшөрөү нескәлектәренең бөтә базаһын бирҙе, быны бер ҡасан да онотаһым юҡ. Ана шул белем буйынса аҙаҡ әкренләп кенә рәссамлыҡта сыныҡтым. Индивидуаль дәрестәрҙе бер ҡасан да төркөм менән уҡыу алмаштыра алмай. Бер уҡытыусыны ла Илшат Ишбулды улы менән тиңләп, сағыштырып булмай. Әгәр ҙә нимәгәләр өйрәнергә, саҡ ҡына көслөрәк булырға теләһәң, башҡаларҙан алдараҡ булырға ынтылһаң, оҫтанан профессиональ һабаҡ алырға кәрәк. Быйна шуны аңланым. Уҡырға ингәс, һүрәт төшөрәбеҙ бит инде, ә мин бөтәһен дә беләм һәм һүрәтте ҡойоп ҡуям. Илшат Ишбулды улы биргән белем әле лә күңелдә. Үҙем студия асҡас, Илшат Ишбулды улынан алған белемде уҡыусыларыма бирергә тырыштым. Минең "Латифа" студияһы ун йыл эшләне, уҡыусыларыма ныҡлы, ҡеүәтле нигеҙ бирә алдым, тип әйтә алам.

**Мифтахетдин Аҡмулла исемендәге Башҡорт дәүләт педуниверситетының художество-графика факультетына уҡырға инәһегеҙ. Педагогик йүнәлеш тә осраҡлы түгелдер?**

- Беләһегеҙме, мине барыбер уҡырға алалар, тип, имтиханға әҙерлекһеҙ барҙым. Һәм имтихандан үтмәнем. Белем генә әле бөтә нәмәне хәл итмәй икән, шуны килеп аңланым. Бер йыл ер менән күк араһында йәшәнем, тиергә мөмкин. Икенсе йылға мотлаҡ уҡырға инергә кәрәк икәнен аңлап, әҙерләндем, хатта түләүле дәрестәр ҙә алдым. Педагогик белем алырға кәрәк ине, сөнки, башта әйткәнемсә, киләсәктә үҙемдең мәктәбемде асырға тейешмен, ә бының өсөн педагогик белем мотлаҡ, тип уйланым. Университетты бөткәс, балалар баҡсаһына эшкә барҙым. Рәсми бер баҡсала эшләһәм, тағы ла ике-өс баҡсала түләүле дәрестәр алып барҙым. Бына шулай балаларҙы оҫталыҡ сере менән таныштыра башланым. Әсәйем миңә бер мәл, телевидениеға эшкә бар, тине. Мине унда саҡырҙылар ҙа. БСТ-ла биш йыл рәссам, компьютер графикаһы инженеры булып эшләнем. Оҡшай ине, ләкин йәш быуынға белем бирергә тейешмен, тигән уй баштан сыҡманы. Минән шәп диктор эшләмәксе лә булғайнылар, һауа торошон уҡый башланым. Әхәт Мортазин ярҙамында оҫта итеп башҡортса һөйләргә өйрәндем. Гөлли Мөбәрәкова, Суфия Ҡорбанғәлиевалар уҡытты. Бына шундай бөйөк уҡытыусыларым булды, минән диктор әүәләнеләр-әүәләнеләр, "Йырым булһын бүләгем" тапшырыуын да алып барырға хәл иткәйнеләр, тик шул тиклем камеранан ҡурҡа, ҡаушай инем. Диктор, алып барыусы булыу минең юл түгеллеген тоям.

Үҙаллы эш алып барырға тигән уй баштан сыҡмай, шул эштә ҡайнарға, ижад итергә, мәктәп асырға тигән хыялым күңелдә йәшәй. Ул саҡта саҡ субсидиялар бирә башлағайнылар. 2009 йылда телевидениенан эштән киттем. Бизнес-планымды төҙөп алып барғас, мәшғүллек бюроһында ныҡ оҡшаттылар. Шулай итеп, илле мең субсидия алып, Коммунистик урамында "Латифа" тигән студиямды асып ебәрҙем. Мәғлүмәт яғынан ҡытлыҡ булманы, телевидениела "Субсидияға нисек үҙ









**✓ Беҙ визуалдар донъяһында йәшәйбеҙ, бөтә нәмәне күҙ аша ҡабул итәбеҙ. Боронғо башҡорттарҙың донъяға ҡарашын тулы бөтөнлөк менән генә биреп була. Минең картиналар серияһы шуны бәйән итә.**



# ҺЫНЛАНДЫРАМ...

эшеңде асырға мөмкин?" тигән тапшырыу сыҡты. Бер ни тиклем ваҡыттан ҙурыраҡ суммаға субсидия алдым һәм Чернышевский урамында айырым бинала студиямды астым. Ул ун йыл эшләне.

Балалар менән шөғөлләнгәндә һәр саҡ: "Үҙемдең икенсе кластағы хыялымды тормошҡа ашырҙым бит", - тип ҡыуанып уйлай торғайным. Шул уҡ ваҡытта һүрәт төшөрөү - осталыҡ алыу дәресе генә түгел, был мәл бала өсөн ниндәйҙер көсөргәнештәрҙән арыныу мөмкинлеге икәнен иҫтә тота инем. Бында улар үҙ асылында, үҙҙәренең генә мохитендә ҡайнайҙар, тынысланалар, көс йыялар, ҡәнәғәт булып ҡайтып китәләр. Бер ниндәй ҙа насар билдә алыу юҡ, шелтә юҡ. Бында уларға бары тик һөйөү генә кәрәк. Һәм бары һүрәт төшөрәләр. Бала саҡта үҙем тойған мөхитте тыуҙырырға тырыштым. Тиҫтә йыл үтеп китте, миндә шөғөлләнгән балалар төрлө ерҙәргә уҡырға инделәр. Кемдер рәссам, кемдер архитектор, кемдер дизайнер булып китте. Һуңынан уларҙы урамда тап итә башланым, инде ҙур, олпат кешеләр үҙҙәренең ҡайҙа уҡығанын, кем булып эшләүҙәрен һөйләйҙәр, тыңлап, шул тиклем ҡыуаныс һәм ғорурлыҡ кисерәһең. Мин ғүмеремдең айырым бер өлөшөндә ниндәйҙер бер бурысым үтәлгәнен аңланым. Артабан инде үҙемдең профессиональ эшем менән генә шөғөлләнеүгә күстем.

**▸ Еңелме бөгөн рәссам ижады менән шөғөлләнеү?**

- Рәссам булыу - бик шәхсән һөнәр. Һүрәт төшөрә белеү - бер эш, ә инде уны күрһәтә, таныттыра, ижад емешенә бүтәндәрҙе йәлеп итә һәм үҙ хеҙмәтеңде һата белеү - бөтөнләй икенсе нәмә. Бөгөнгө заманда ижадсы ғына булып ҡала алмайһың, рәссамлыҡтан аҙаҡ маркетологҡа әйләнергә, унан инде үҙеңдең картиналарыңды тамашасыға күрһәтә, баһаһын, ҡиммәтен аңлата алған эшҡыуарға әйләнергә тейешһең. Бәйләнештәрҙе үстереү, галеристар, белгестәр, рәссамдар, эксперттар, һатып алыусылар менән аралашыу... Был ҙур эш, һәм, ахыр килеп, ижад емешеңдең һөҙөмтәһе булырға тейеш. Кеше өсөн иң мөһиме нимә? Мәңгелекте тойоу. Хеҙмәтең бына шул мәңгелекте яуап итеп бирергә тейеш. Сөнки стеналағы картиналар бик оҙаҡ эленеп тора, улар иҫкермәй. Бына минең бала саҡта эшләгән бер картинам әле лә элеүле тора, бер нәмә лә булмаған, шул көйө. Картиналарым минән һуң да тороп ҡаласаҡ. Рәссамлыҡ - ул мәңгелек менән бәйләнеш. Леонардо да Винчи "Джоконда"ны ун бишенсе быуатта яҙа. Ә хәҙер егерме беренсе быуат. Мәңгелек - ул амбициоз маҡсат. Бындай маҡсат йөрөтөр өсөн үҙеңә ныҡ ышанырға кәрәк. Балаға иһә үҙенә булған ышанысты ата-әсә генә бирә ала. Улар һинең рәссам булырыңа ни өсөндер ышана. Минә, мәҫәлән, шундай йүнәлеш бирҙеләр. Ҡай саҡ көләп, шулай тип әйтәм: "Мин һүрәт төшөрөүҙән башҡа бүтән бер нәмә лә эшләй белмәйем".

**▸ "Латифа" студияһы тураһында беҙ ҙә аҙмы-күпме хәбәрҙарбыҙ. Унда шөғөлләнеүселәр төрлө сараларҙа ла ихлас ҡатнаштылар...**

- Эйе, мин үҙем дә конкурстар үткәрә торғайным. Иң күләмлеләренең береһе - "Баҙыян" республика конкурсы булғандыр. Сәнғәт училищеһы беҙгә зал бирҙе. "Тамыр" балалар студияһы килеп төшөрҙө. Балалар баҡсаһына йәше етмәгән һәм балалар баҡсаһына йөрөгән бәләкәстәр өсөн башҡорт телендә дәрестәр алып барҙым. Был программа "Иртә үсеш" тип аталды. Башҡорт телен яҡшы белгәс, башҡортса дәрестәрҙе бирә алдым. Һәм ул дәрестәрҙе бушлай уҡыттым. Ике-өс йәшлек бәләкәстәрҙе атаәсәләр Өфөнән генә түгел, яҡын-тирәләге ауылдарҙан да алып килә торғайнылар.

БСТ-нан күптән китһәм дә, улар минә мәғлүмәт биреү йәһәтенән ярҙам итеп тора. Ул саҡтағы директор Ғәлим Яҡуповтың ярҙамы ҙур булды. Ниндәйҙер сара үтәме, күргәҙмә асыламы, барыһына телевидение журналистарын ебәреп торҙо. Радионың яңылыҡтар хеҙмәте ошондай студия барлығын тыңлаусыларға еткерә торғайны. Был йәһәттән Тәнзилә Абдулла ҡыҙына рәхмәт. Йылына ике-өс тапҡыр күргәҙмә ойоштора торғайным. Балаларға был ныҡ оҡшай ине. "Һеҙ беҙгә рәссамдың ниндәй булырға тейешлеген күрһәттегеҙ. Күргәҙмәләр эшләнегеҙ, рәсемдәребеҙҙең каталогтарын яһанығыҙ, бөтөн картиналарыбыҙ журналдарҙа һаҡлана", тип, килеп әйтеп китәләр. Рәсемдәрем юғалмаһын өсөн бәләкәй саҡта әсәйем ярҙамы менән каталог сығара торғайным, шул ҡағиҙәне үҙем уҡытҡан саҡта ҡулландым. Студияны 2018 йылда яптым, ә һаман да: "Был айҙа һеҙ уҡытаһығыҙмы?" - тип шылтыраталар. Бына әле лә шылтыраттылар. Мин "Эйе", тип яуап бирҙем. Сөнки һуңғы йылдарҙа мин өйҙән генә эшләйем бит инде, шуға, ял көндәрендә ике-өс бала булһа ла килһен, тием. Студиянан китһәм дә, балалар менән һаман шөғөлләнәм. "Хәҙер юҡ, уҡытмайым," - тип әйтә алмайым.

Психологҡа ла уҡып алғанымды әйткәйнем инде. Һынлы сәнғәткә йөрөгән балалар менән психолог булараҡ шөғөлләнһәң, бының бик көслө ҡорал икәнен аңлайһың. Һүрәт төшөрөү - бала өсөн әҫке проблемаларын хәл итеү ул.

Баланың үсеше ныҡ булһын өсөн 3-7 йәштә уны йә музыка, йә һынлы сәнғәт, йә спорт түңәрәгенә бирергә кәрәк. Улар баланы мәктәпкә әҙерләргә ярҙам итә, мәктәптә баланың психологик проблемалары булмаясаҡ. Ауыл балалары ете йәшкә тиклем ҡала балаларынан физик һәм аҡыл йәһәтенән нығыраҡ үҫешкән була. Сөнки ул ырғый-һикерә, үрмәләй - физик сынығa, үләндәрҙе таный, ҡоштарҙы белә... Бөтөн тәбиғәт уларҙыҡы. Тик ете йәштән һуң ҡала балаһының мейеһе нығыраҡ



үсешә башлай, сөнки уларҙы төрлө түңәрәктәргә йөрөтә башлайҙар. Нейрон бәйләнештәре беренсе класҡа тиклем яҡшы үҫешһен өсөн баланы ике түңәрәккә йөрөтөргә кәрәк, тип һанайым. Шул саҡта бала фәндәрҙе лә яҡшы үҙләштерә, тәбиғәт уға үҙе ярҙам итә. Һынлы сәнғәт, музыка, спорт - мәктәпкә барған баланы была быларҙан айырмағыҙ. Ошо түңәрәктәрҙең балаға һәр йәһәттән үҫергә булышлыҡ итеүен бик яҡшы аңлап эш иткән ата-әсәләр бар.

**▸ Осталыҡты арттырыу йәһәтенән үҙегеҙгә талаптар ҡуяһығыҙ?**

- Мин ҡырҡ йәшемдә БДУның философия факультетына культурология белгеслегенә уҡырға индем. Был минә бөтә донъя мәҙәниәтен тәрәнерәк өйрәнергә мөмкинлек бирҙе. Мине боронғо башҡорттарҙың мифологияһы ҡыҙыҡһындыра ине, диплом эшем дә "Боронғо башҡорттарҙың донъяға ҡарашы" тип атала. Үҙебеҙҙең ҙур ғалимдарыбыҙ Зәкирйән Әминев һәм Әхәт Сәлиховтың хеҙмәттәрен файҙаландым. Уларҙың Урал батыр культына тиклем башҡорттарҙың нисек йәшәүе тураһында хеҙмәттәре бар. Артабан Урал батыр культы башлана. Күпселек тикшеренеүселәр Урал батыр дәүерен тикшерә, өйрәнә. Ә бит уға тиклемге тормош та бар. Әле аталған ғалимдарҙың мәҡәләләрен үҙем аша үткәрҙем һәм ябайыраҡ итеп үҙем дә мәҡәлә яҙҙым. Шул хеҙмәттәрҙе нигеҙ итеп алып, "Боронғо башҡорттарҙың донъяға ҡарашы" тигән картиналар серияһы ижад иттем. Республика Милли музейында әлеге мәлдә шул серияның күргәҙмәһе бара. Картиналарымды Милли музейға бүләк иттем. Уларҙы ла һатырға була ине. Ләкин улар бүлгесләнеп, төрлө яҡҡа таралып китәсәк, һәм серияның бөтөнлөгө юғала, мәғәнәһе үҙгәрәсәк. Беҙ визуалдар донъяһында йәшәйбеҙ, бөтә нәмәне күҙ аша ҡабул итәбеҙ. Боронғо башҡорттарҙың донъяға ҡарашын тулы бөтөнлөк менән генә биреп була. Минең картиналар серияһы шуны бәйән итә.

**▸ Тимәк, ирекле рәссам булып китеү шәхси ижадҡа киңерәк юл асты...**

- Үҙебеҙҙең мәҙәниәтте донъяға сығарғым, күрһәткем килә, шуға ла хәҙер артабан эшләр өсөн Францияға китергә йыйынам. Европала картиналарым актуаль икәнен аңланым. Европалылар эштәремде бик күпләп һатып алдылар. Башҡорт мәҙәниәтен күрһәткән картиналарым улар өсөн бик ҡыҙыҡ.

**▸ Европала һынлы сәнғәт, айырым бер мәҙәни күренеш булараҡ, оҙайлы тарихҡа эйә. Беҙҙә иһә дин йәһәтенән дә рәсемгә һағыраҡ мөнәсәбәт йәшәй...**

- Мәскәүҙә булған саҡта мин Шамил Әләүетдинов хәҙрәттән: "Минә һүрәт төшөрөргә яраймы-юҡмы, әллә ул гонаһмы?" - тип һораным. Хәҙрәт: "Төшөрөгөҙ, хеҙмәтегеҙҙән кинәнес алығыҙ", - тине. Ярамауҙың сәбәбен шулай тип аңлатты. Һүрәткә икона һымаҡ итеп ҡарауҙан, табыныуҙан һаҡланырға, мәжүсиҙәр һымаҡ культ яһамаҫҡа кәрәк. Бына шул инә тыйыуға. Республика музейындағы күргәҙмәмдә натюрморттарым да ҡуйылған. Ошо эштәремә ҡарап, мине йыш ҡына рәссам Адия Ситдиҡова менән сағыштыралар, уның эшен дауам итеүсе һымаҡ күрәләр. Мин был рәссамдың кем икәнен дә белмәй инем. Сөнки уҡыу йорттарында донъя кимәлендәге рәссамдарҙы өйрәнәбеҙ, Леонардо да Винчи, Боттичелли, Ван Гог ижадын яҡшы беләбеҙ, ә үҙебеҙҙекеләрҙе һөйләп бармайҙар. Гөлназ Фәрит ҡыҙы Ҡолһарина улын минә рәсем дәресенә йөрөтә торғайны. Бер мәл Адия Ситдиҡоваға арналған китап бүләк итте. Натюрморттарын ҡарап, ысынлап та, рухландым, хатта оҡшашлыҡ күрҙем. Ситдиҡова менән сағыштырыуҙары оҡшай, ниндәйҙер уртаҡ һыҙаттар булыуы насар түгел, әлбиттә. Кисә бер сәнғәт белгесе: "Концепция бер иш, ә биреү формаһы төрлөсә", - тине. Шуны ла әйтергә кәрәк, күргәҙмәлә торған ике натюрмортым Америкаға китәсәк. Уларҙы һатып алдылар.

Эйе, мин бөгөнгө заманды һынландырырға тырышам, яңы тын алыш, яңы кисереш индергем килә. Мин Европа илдәрендәге данлы музейҙарҙы әллә нисә тапҡыр ҡарап сыҡҡан кеше, ундағы рәссамдарҙың нимә, нисек яҙғандарын күҙәтәм. Әлбиттә, тәьсирләнеп ҡайтам. Беҙ бындағылар, башлыса, үҙебеҙҙең ҡаҙанда ғына ҡайнайбыҙ. Минең иһә заманым менән ҡуша атлағым килә. Теге мәктәп тә, беҙҙәге мәктәп тә ҡыҙыҡ, сөнки беҙҙең үҙебеҙҙә бөйөк башҡорт мәктәбе барлыҡҡа килгән, бөйөк рәссамдарыбыҙ бар. Минең ижадта иһә башҡорт сәнғәтенең дә, Европа сәнғәтенең дә йоғонтоһо бар. Был яңыса, заманса ҡараш. Һынлы сәнғәттә "шәреҡ менән көнбайыш сәнғәте бәйләнеше" тигән төшөнсә йәшәй. Был йүнәлештә эшләүселәрҙе "ориенталист рәссамдар" тип атайҙар, йәғни Европа рәссамы шәреҡ мәҙәниәтен сағылдырған картиналар яҙа. Жан-Этьен Лиотар, Шарль-Андре ван Лоо, Жан-Батист ван Мур, Жан-Жюль-Антуан Леконт дю Ноуи, Жан Огюст Доминик Энгр, Антуан-Жан Гро, Эжен Делакруа, Теодор Шассерио һәм башҡа рәссамдарҙы атарға була. Ориентализм стиле йәшәй, был йүнәлеште дауам итеүселәр байтаҡ. Мин дә шулар рәтенә ҡүсәм шикелле...

**Фәрзәнә АҠБУЛАТОВА әңгәмәләште.**

***✓ Шул саҡ икенсе яҡ баҫҡыстан менеп килеүсе ҡап-ҡара сәсле, ҡуңырт йөҙлө бер һылыу ҡыҙ күҙенә салынды. Ниндәйҙер сихри, тылсымлы көс тартҡандай, Айнур ҡара сәстең ҡаршыһына ҡарай осто.***






Ҡыуанысы эсенә һыймай кине Айнурҙың, йөҙө ҡояштай йылмая, күҙҙәре тулған айҙай нур һибә. Медицина институтының абитуриенттарҙы ҡабул итеү исемлегендә уның да исем-шәрифе бар. Бер уйлаһаң, мотлаҡ шулай булырға тейеш тә инде. Медицина училищеһын тамамланы, район үҙәге дауаханаһында өс йыл эшләне. Коллегалары ла, дауаланыусылар ҙа ярата, хөрмәт итә. Ниңә ҡыуанмаҫҡа! Алла бирһә, ул киләсәктә юғары белемле табип буласаҡ. Өфө урамынан аэропортҡа барыусы автобус туҡталышына ҡарай йәнләнеп атлаған Айнурҙы яғымлы ҡатын-ҡыҙ тауышы туҡтатты:

- Улым, тим, улым! Ҡыуаныһың хаттин ашҡан. Әллә берәй сибәркәй менән осрашырға ашығаһың инде?

- Сумаҙан тотопмы? - Айнур көлөп ебәрҙе. - Юҡ, апай, юҡ институтҡа уҡырға индем, уҡырға! Ҡайтып барыуым.

- Һай, афарин! Бик тә хуш! Хоҙай Тәғәлә насип итһә, күңеләңә оҡшағаны ла осрар. Ҡыҙҙарҙы иләҫ-миләҫ итер егет күренәһең. Ал бына ошо гөлләмәне, йәнең тартҡанына бүләк итерһең.

Ысынлап та йәнкәй-йәнәш менән осрашырға ашҡынған ғашиҡ егеттәй, Айнур дәртле, хисле, илаһи нур сәсмәле. Кешеләр уға һоҡланып, ғәжәпләнеп, үтеп барыусылар хатта боролоп, әйләнеп ҡарай. Әйтерһең, ул ирекһеҙҙән үҙенә ҡаратҡан йым-йым иткән аҫыл ынйы, сағыл. Һоҡланһын бар донъя, һоҡланһын! Айнур үҙе лә донъяның матурлығын әле генә күргәндәй, йәшәүҙең шатлығын яңы ғына тойғандай. Бөгөнгө көнө айырыуса хозур. Әллә көндәрҙең хужаһы йома булғанға... Ошондай хис-кисерештәрҙән тирә-яҡ тағы ла яҡтырып киткәндәй, күңеле шоңҡар ҡоштай ҡанат ҡаҡҡандай...

Айнур кассанан билет алды ла аэропорт бинаһының икенсе ҡатына күтәрелде. Самолет осҡансы сәй эсеп алырға ла була. Шул саҡ икенсе яҡ баҫҡыстан менеп килеүсе ҡап-ҡара сәсле, ҡуңырт йөҙлө бер һылыу ҡыҙ күҙенә салынды. Ниндәйҙер сихри, тылсымлы көс тартҡандай, хәс тә ҡош тибергә ынтылған күк ыласындай, Айнур ҡара сәстең ҡаршыһына ҡарай осто һәм уны бөтә булмышында яҡындан күрҙе. Урта буйлы, һомғол һынлы, тығыҙ кәүҙәле, һушты алмалы күпереп торған түшле... Әллә лә!.. Айнур сибек ҡыҙҙарҙы хуш күреп етмәй. Ә был ҡара ҡаш ифрат та күрекле, ҡөҙрәтле. Олатаһы әйтмешләй, кәүҙәгә баҙыҡ, ирәбе, биле-һәле лә килешле. "Ирәбе ҡатын иллелә лә бала таба, ҡыҙ йәрәшһәң, шундайын йәрәш, улым", тигәне лә иҫенә төшөп, йылмайып ҡуйҙы. Башына ҡыҙыҡ уй килде: "Был ирәбе ҡыҙҙы кәләш итеп алһам, шундуҡ игеҙ бала табыр микән?.." Шул саҡ Айнурҙың ҡыҙҙы ҡосағына йомаһы, сөм-ҡара сәстәренән һыйпағыһы килде. Әллә бер күреүҙән арбаны, хыялый итте инде. Егеттең ныҡ текәләп һынсыл ҡарауынан ҡара сәс аптырап туҡтап ҡалды. Был ҡыҙ, моғайын, Тамъян ҡыҙылыр, тигән уй Айнурҙың мейеһен һыҙып үтте һәм ул үҙе лә һиҙмәҫтән:

- Һаумыһығыҙ! - тип иҫәнләште.

- Һеҙ кем булаһығыҙ һуң?

- Атай ҡушҡан исемем Айнур ине.

- Тәү күреүем һиндәй һантыйҙы.

- Беҙҙе һантый иткән һеҙҙәй һылыу ҡыҙ инде. Ҡай тарафҡа осаһығыҙ?

- Көньяҡ-көнсығышҡа, - тине ҡара сәс ҡырыҫ ҡына. Шунан ҡырыҫ ҡылығынан уңайһыҙланыпмы, өҫтәп ҡуйҙы, - Магнитҡа.

- Мин дә Магнитҡа. - Егеттең ҡыуанысы йөҙөнә бәреп сыҡты. - Унан Асалыға...

- Асалыға? - Ҡара ҡаш ғәжәпләнгәндәй итте. - Асалыла мин иҫ белгәндән йәшәйем.

- Унда йәшәгәс, нишләп мин һеҙҙе белмәйем.

- Һеҙ барыһын да белергә тейешме ни? - Ҡара сәс тағы ҡырыҫланды.

- Дауаханала эшләгәс, мин күптәргә таныш, күптәр миңә таныш-белеш.

- Ә-ә...

Ҡара сәстең ниңәлер кәйефе юҡ. Әкиәттәге һылыуҙыҡы һымаҡ, бер бите айҙай балҡымай, бер бите ҡояштай яҡтырмай. Айнур яҙғы сыуаҡтан күңел күгенән нур ҡойһа ла һылыуҙың йөҙө, сырайы асылмай. Бәй, ҡулында ҡатын-ҡыҙҙың йәнен иретер гөлләмә лә баһа! Сәскә һатыусы апай: "Йәнең тартҡанына бирерһең", - тигәйне. Ай, иҫәүән...

- Асалыла осрашмағас, бына Өфөлә тап булыштыҡ, хатта күккә ашыр мәлдә. Шул ҡыуаныстан сәскәләр бүләк итәм һеҙгә. Саф күңелдән...

Ҡара сәс алығармы-юҡмы тигәндәй, бер аҙға ҡаушап ҡалды һәм эскерһеҙлеген белергә теләгәндәй, иғтибар менән үҙенә күҙ атҡан егеткә баҡты: бик тә мөләйем, алсаҡ йөҙ, бөтә булмышы илаһилыҡ бөркә. Ихлас күңелдән биреүенә шик юҡ. Егеттең нурлы, һөйкөмлө ҡарашы бығаса тоймаған сихри ҡөҙрәте менән ҡыҙҙың йөрәген елкетеп, аң-зиһенен иләҫләндереп ҡуйҙы.

- Рәхмәт. Ниндәй матур миләүшәләр!.. Төрлө төҫтәләр... - Ҡыҙҙың ҡаштары ҡыйғасланып, күҙҙәре нурланып китте.

Миләүшәләр уйсанланып наҙлы йылмайыу уға бик тә килешә, - тип уйланы Айнур сәскәләргә башын эйгән һылыуҡайға һоҡланып. - Миңә насип булһа, гөлкәйем, тип кенә өндәшермен.

Шул саҡ башҡа бер йомшаҡ, иркә тауыш хис-кисерештәренән айындырҙы:

- Айнур ағай, ағай... Ҡотлағыҙ мине, медучилищеға уҡырға индем. - Асалыла дауаханала хужалыҡ мөдире булып эшләгән Дамир ағайҙың ҡыҙы Дилбәр ҙә баһа. Илгәҙәк ҡыҙ ҡыуана, йылы һүҙ көтә.

- Илла аҡыллы ҡыҙһың да инде! Үәт маладис!

- Атам да шатланыр инде. Мине аҡ халатлы табип итеп, төштәрендә күрә бит ул... Бәйбәй... Был һинме, Гөлнур күрше? Битеңде сәскә менән ҡаплағасһың, танымай ҙа торам. - Ҡыҙҙар ҡосаҡлашып, хәбәргә күмелде.

Тимәк, ҡара сәстең исеме - Гөлнур. Ғәжәп, бына ғәжәп! Айнур, Гөлнур... Гөлнур, Айнур... Икеһе лә - нур! Ниндәй йәтеш! Күңеле һиҙеп, бына әле, әле генә, гөлкәйем, тип өндәшерен фаразлағайны. Әллә беҙҙең арала шундуҡ нескә бәйләнеш тыуҙымы? Ҡара сәскә, ысынлап та, тәү бағыуҙан мөхәббәт уты баҙланымы? Эйе, эйе, тигәндәй, теленә көтөлмәгән йыр килде:

*Гөлнурым, һин - күҙ нурым,*
*Һылыу һының - сер, тылсым.*
*Гөлкәйем, тип юраным,*
*Һалдың миңә моң, ырым.*

Ҡыҙҙар һаман йомолоп, бөтә күңелдәре менән бирелеп серләшә. Гөлнурҙың тауышы бошонҡораҡ. Бөрө педагогия институтының филология факультетына имтихандар тапшырып, кергәнен-кермәгәнен белмәйенсә ҡайтып килә икән. Күрәһең, шуға кәйефе төшөнкөлөр. Төпсөнмөш Дилбәр һәммәһен белергә тырышып төпсөнә:

- Документтарыңды ниңә Башҡорт дәүләт университетына бирмәнең? Өфөнән йөрөүе лә яҡыныраҡ.

- Бөрөлә туғаным уҡый ҙа һуң. Икәү бергә йәшәүе яҡшыраҡ, күңеллерәк булыр тигәйнек. Әле уйлап ҡайтып киләм, бәлки, миңә эшкә урынлашып, ситтән тороп уҡыу отошлораҡтыр. Эшләйһең дә, уҡыйһың да, кейенәһең дә тигәндәй... - Һүҙ ыңғайы иһә үҙе лә төпсөнөп һорап ҡуйҙы:

- Дилбәр, Айнур тигәнең ниндәйерәк егет ул?

- Атайым уны бик маҡтай, кешеләргә ныҡ алсаҡ, яғымлы, ундай егеттәр ғәйәт һирәк, ти. Унын яҡшы мөнәсәбәтенән, йылы һүҙҙәренән генә лә ауырыуҙар шәбәйә лә китә, ти. Балаsағалар ҙа һис ятһынмай уға ылыға ла тора, ти...

- Һәләк һоҡланып һөйләйһең. Әллә ул һиңә оҡшай инде?

- Оҡшай ҙа бит. Әммә Айнур ағай миңә һеңлекәштәргә ҡараған һымаҡ ҡына ҡарай. Саҡ ун бишем тулды шул. Ә һин бына уны ғишыҡ утына һалырҙай һылыуһың.

Шул саҡ Магнитҡа осоусыларҙың билеттарын теркәү башланыу тураһында иғлан яңғыраны. Айнур егеттәрсә иғтибар күрһәтеп, йәһәт кенә ҡыҙҙарҙың сумкаларының икәүһен тотоп алды. Осҡосҡа күтәрелер алдынан стюардесса билеттарҙы ҡарап, һәр кемгә тәғәйен урынды әйтте. Гөлнур менән Дилбәрҙең урындары йәнәш икән. Айнур Дилбәрҙең ҡолағына: "Минең урынға ултыр, йәме", - тип шыбырлап өлгөрҙө.

Гөлнур һыр бирмәгән була, иллюминатор аша түбәндә ҡалған донъяны күҙәтә. Йөҙө уйсан, һаман да етди. Ауыҙға һыу ҡапҡандай ултырыуҙы уңайһыҙ күреп, шаярынҡырап, Айнур:

- Мәктәптә уҡығанда мин Самрау тигән күк батшаһының ҡыҙы Һомайға хайран инем. Көндөҙ ергә нур һипкән, кисен айға нур биргән Һомайҙы бер күрһәң ине тип хыяллана торғайным, - тине. - Ниһайәт, уны күреү бәхетенә ирештем, ул йәнәшемдә ултыра. Мәгәр унын йөҙөнән ниңәлер сихри нур түгелмәй...

Гөлнур башын диуанаға һалған был ниндәй йүләр тигән һымағыраҡ ғәжәпләнеп, егеткә боролоп ҡараны, сәстәренең, ҡаштарының ҡараһы, еңелсә йылмайған күҙҙәре йылылыҡ һирпелдергәндәй итте. Был сағылыш Айнурҙың күңелендә өмөт йәйғорон балҡытты. Егет ҡыҙҙың күңелен нығыраҡ йомшартырға, иретергә, уны шулай әүрәтергә теләп, кинәйәле итеп өндәште:

- Ә беләһеңме, Тамъян ҡыҙы ниндәй була?

- Ниндәй икән? Әлләсе...

- Көмөш тәңкәләрҙән, ҡыҙыл мәрйендәрҙән типселгән ҡашмау кейгән һылыу һәм дә зирәк, зиһенле. Аҡыллы, зирәк булғанға ҡойған ул серле йомаҡ. Бер сәсән шулай тигән:

*Биҙәр-биҙәр, биҙәр йомаҡ,*
*Биҙәрләнеп торған йомаҡ.*
*Тамъян ҡыҙы ҡойған йомаҡ,*
*Табын ҡыҙы тапҡан йомаҡ.*

Гөлнур, һин үҙең дә бит хәс тә йомаҡ, мин тапҡан йомаҡ!

- Улай бик зиһенле булғасһың, әйт йомағыңды?

- Һиңә лә йәбешкән, миңә лә йәбешкән, муллаға ла йәбешкән, донъяға ла йәбешкән.

- Беләм инде, беләм. Исем!

- Ә быныһы ни! Ике пипылдыҡ, ике мимылдыҡ, арҡа терәште, бергә булышты.

- Шундай йомаҡ буламы? - Гөлнур тыйыла алмай пырх итеп көлөп ебәрҙе.

- Була. Ул һинең ирендәрен, Гөлнур. Йә, йәнә бер йомаҡты юрап ҡара: яраһы юҡ - ауырта, төтөнө юҡ - яна.

- Белмәйемсе...

- Йөрәк, ул - минең йөрәк, Гөлнур...

Шулай йәшерен мәғәнә һалып, уратып әйтеп, кинәнес табып килә торғас, бер сәғәт ваҡыт һиҙелмәй үтеп тә киткән. Самолет Магнитогорск аэропортына тып итеп килеп тә төштө. Ҡунаҡ ҡаршыларға килгән бер таныш ағай Гөлнур менән Дилбәрҙе машинаһына ултыртып алды. Айнурға урын етмәне. Егет башы етеп, сумаҙанын йәһәт кенә Гөлнурға тапшырҙы:

- Бөгөн үк килеп алырмын.

Ҡайтып еткәс, билдән сисенеп, һалҡын һыу, еҫле һабын менән йыуынды, тәне сафланып, кәйефе тағы ла күтәрелеп китте. Салбарын ентекләп үтекләп, байрамдарҙа ғына кейгән аҡ күлдәген кейеп алды. Көҙгөгә ҡарап сәстәрен тараны ла дәртләнеп йырлап ебәрҙе:

*Аҡ тулҡындар,*
*Аҡ тулҡындар,*
*Уйнай ҡояш нурында.*
*Эй ҡара күҙ, эй матур ҡыҙ,*
*Күҙем төштө һиңә,*
*Башҡорт ҡыҙына.*

Айнур күкрәгенән йөрәге атылып сығырҙай булып тышҡа атлыҡты. Дамир ағайҙың өйөнөң ҡайҙалығын яҡшы белә. Ҡасабаның үҙәгенән ситтәрәк, әммә әллә ни алыҫ түгел. Бына ул йәшеллеккә күмелгән йәшел сирәмле урам, йәшел ҡапҡалы йорт. Гөлнурҙарҙың өйө ҡайһы яҡтан икән? Һулда - ике ҡатлы кирбес йорт. Уңдағы ағас йорттор, моғайын. Егет ҡапҡаны йөрәкһенеп асып, ихатаға атланы һәм аллы-гөллө веранда тәҙрәһе ашаһында таныш һынды шәйләне. Эскә үткәс, ҡыҙҙы бөтөнләй яңы ҡиәфәттә, төҫтә күреп, хайран ҡалды: ҡыйғас ҡаштары тағы ла ҡыйылыбыраҡ киткәндәй, күлдәй күҙҙәре йымылдай, иренгенәләре тулышып бешкән сейәләй, бит алмалары таң шәфәғеләй, йөҙө яңы сыҡҡан ҡояштай көлгәндәй... Әүәлге моңһоу Гөлнурҙы ен алмаштырып ҡуйған тиерһең. Шишмәләй сылтыраған тауышы наҙ булып аҡты:

- Шундай мөхәббәтле итеп, йоторҙай итеп ҡарайһың, оҡшайыммы әллә?

- Оҡшайһың, иҫ киткес ныҡ оҡшайһың. Киске уйынға кил, Гөлнур. Көтәм...

Ҡыҙ сөм-ҡара күҙҙәрен йылмайтып, бит уймаһын уйнатып, тертәйеп, дертләп торған түштәрен тулҡынландырып, сыңлатып көлөп ебәрҙе:

- Мин Гөлнур түгел дә ул, иҫәүән. Мин - унын туғаны!

Шул хәтлем дә туған туғанына оҡшар икән! Егет ни тиергә лә белмәне, бөтөнләй телдән яҙҙы. Быныһы ла һушты алмалы һылыу! Ҡаушауынан ни өсөн килгәнен дә онотоп, Гөлнурҙы ла күрмәйенсә, мөйөштә торған сумаҙанын да алмайынса, Айнур урамға һыҙҙы. Уны ҡыҙҙын көмөштәй саф, яғымлы тауышы оҙатты:

- Саҡырғасың ни, ниңә бармаҫҡа. Үҙем булһа ла барырмын...

**(Дауамы бар).**

*✓ Беҙҙең аранан олораҡ бер ағай һикһән йәштәрҙән уҙған әлеге мулла бабайға ҡул бирергә уҡталды, тик бабай уға ҡулын һонорға ашыҡманы: "Ҡулыңды йыуҙыңмы?" тип һораны.*



ШАҢДАУ

# "УЙЛАМАЙ ЯҘҒАН - АУЫРЫМАЙ ҮЛГӘН!"

**Гәзитебеҙҙең 37-се һанында Әғләм Шәриповтың ошондай баш аҫтындағы мәҡәләһен көлә-көлә уҡыным. Күптән шулай рәхәтләнеп көлгәнем юҡ ине. Көлөрлөк тә шул! Сәүит ваҡытындағы йәшлек мәлендә үҙе тарыған бер мәҙәк хәлде бәйән иткән ул. Аят мәжлесенә саҡырылғас, унда, ниндәйҙер сәбәп менән, башҡаларҙан алдараҡ килгән. Өҫтәлдә ятҡан әруахтар исемлеген күреп ҡалған һәм, саҡырылған ҡунаҡтарҙың исемлеге икән тип уйлап, үҙенең исемен дә шунда өҫтәп яҙып ҡуйған авторыбыҙ. Шулай уның, аңғармаҫтан, үлгәндәр исемлегенә барып инеү тарихын уҡып, күптәрҙең "һындары ҡатҡандыр"...**



Мәҡәләнең башын әҙерәк кенә иҫкә төшөрөп алайыҡ әле, шулай ҙа. Ауылдарыбыҙҙа бөгөнгө көндәрҙә йыш ҡына үткәрелә торған гәҙиттәге "аят мәжлесе" һүрәтләнгән унда. Етди, талапсан мулла бабайҙың мәжлескә йыйылған ҡунаҡтарҙан тәһәрәтле булыуҙы талап итеүе, түбәтәй мәсьәләһенә лә нығ ҡына иғтибар биреләү һымаҡ күренештәр менән ҡайһы берәүҙәр, бәлки, таныштыр. Йәнә ҡунаҡтар ашай торған өҫтәлдең буш булыуы (шунда торған тоҙ һауыттарын иҫәпкә алмағанда) ла ул саҡтағы совет кешеһен - буласаҡ авторҙы аптыратҡан. "Тәһәрәт" һүҙе әллә "түбәтәй" тигәнде аңлатамы икән, тип икеләнгән йәш кеше уңайһыҙ хәлгә ҡала. Ул саҡта дингә ҡағылышлы һәр нәмәгә кире ҡараш тәрбиәләү, Ҡөрьән аяттары уҡыу, тәһәрәт, намаҙ һымаҡ нәмәләрҙе йәштәргә мөмкин тиклем өйрәтмәү, хатта тыйыу сәйәсәте лә алып барыла ине бит. Бөгөнгө көндә, әлбиттә, бындай һорауҙар әллә ни килеп тыумай. Әлхәмдүлиллаһ, йәштәргә ошо ғилемде алыуға бер ниндәй тотҡарлыҡ юҡ.

Мин үҙем дә йыш ҡына саҡырылам ана шундай мәжлестәргә. Ошо мәсьәләгә айырыуса иғтибар итеүемдең сәбәбе лә шулдыр. "Әлеге автор мәҡәләһендә йәш саҡтағы мажараһын яҙған, ә был етмеште ҡыуып барған ағайға ни ҡалған икән?" тиә күрмәгеҙ берүк: өс-дүрт йылдар элек мин дә нәҡ шундай "строгий" мулла бабай булған мәжлескә юлыҡтым ул. Алданыраҡ әйтеп ҡуйайым: тәһәрәттең нимә икәнен һәм уның ни өсөн кәрәклеген дә күптән белә инем, әлбиттә. Динебеҙҙең башҡа талаптары менән дә нығлап танышып, уларҙы хәлемсә үтәп йөрөгән мәл.

Әлеге мәҡәләләгенән айырмалы, мулла был мәжлескә иртәрәк килгән ине. Беҙ, бер нисә кеше, бер аҙ һуңғараҡ индек тә, йыйылғандарға "Әссәләмү ғәләйкүм үә рахмәтуллаһи үә бәрәкәтүһ!" тип сәләм бирҙек. Мосолмандарса, бер-беребеҙгә ҡул биреп күрешә башланыҡ. Беҙҙең аранан олораҡ бер ағай һикһән йәштәрҙән уҙған әлеге мулла бабайға ҡул бирергә уҡталды, тик бабай уға ҡулын һонорға ашыҡманы: "Ҡулыңды йыуҙыңмы?" тип һораны. Ике ҡулын һоноп, уҫал ҡарашлы мулланың һорауына ни тиергә белмәй ыҡ-мыҡ итеп ҡатып ҡалды ағай. "Бар, ҡулыңды йыу!" тип, бабай уны үҙенең янынан ҡыуып ебәрҙе. Икенсе бер ағай ҙа тап ана шундай "отказ" алды. Улар йыуыныу бүлмәһенә инеп киттеләр. Мин, инде байтаҡ йылдар үҙем дә бәғзе ваҡыт таныш-белештәр, туғандар араһында "мулла" вазифаһын ҡәҙимге атҡарып йөрөгән кеше буларак, сәләмләү һүҙҙәрен ҡабатлап, был ҡартҡа ҡыйыу ғына итеп ҡул һондом: "Әссәләмү ғәләйкүм!" Әммә минең дә сәләмемде алманы бабай, ҡул йыйыу-йыумауым хаҡында ҡырҡа ғына һорауын ҡабатланы. "Мин - тәһәрәтле!" тинем, асыҡ ҡына итеп, тағын ҡуш ҡулымды һондом. Әммә бабай, сәләм алыу урынына, бер ҡулы менән үҙенән себен ҡыуған һымаҡ ишараланы. "Тә-һәрәтле кешенең ҡулы мотлаҡ йыуылған була ла баһа!" - тинем уға, аптырағас. Әммә бабай барыбер ҡул бирмәне. "Мосолман кеше сәләм бирһә, уның сәләмен алып, яуап ҡайтарыу - фарыз бит", тип кенә әйттем дә, башҡаса һүҙ ҡуйыртып торманым. Ашар алдынан бөтә кеше ҡул йыуа инде, ул хаҡта һәммәһе белә. Әммә ҡунаҡтарҙың иғтибарын шундай нығ йәлеп иткән был ҡартты мин аңлап етмәнем...

Һәр саҡ тәһәрәтле булыу, әлбиттә, һасар түгел. Тик, динебеҙ ҡанунына ярашлы, тәһәрәт алыу, башлыса, намаҙ уҡыр алдынан тейешле. Шулай уҡ, изге китапты - Ҡөрьән-Кәримде ҡулға алыу өсөн дә тәһәрәтле булыу фарыҙ. Әммә кеше менән күрешеү, йә иһә берәй мәжлестә ултырыу өсөн тәһәрәт алыу талап ителмәй. Үҙендә күп белгән кеше итеп күрһәтеп, халыҡҡа шундай артыҡ ҡәтғи талаптар ҡуйыу дин мәсьәләләрен әлегә белеп етмәгән, әммә иманға ылыҡырға теләге булған йәштәрҙе "өркөтөүгә", уларҙы Ислам диненән дөндереүгә алып килмәгәйе, тип борсолам мин ана шундай осраҡтарҙа. Бәйғәмбәребеҙҙән, ғәләйһис-сәләм, кешеләрҙе ҡурҡытмай, дингә ягымлы, йомшаҡ ҡына итеп саҡырыу кәрәклеге хаҡында риүәйәт бар. Әлеге Әғләм уҙаман иҫкә алған мәҡәләләге ҡарт та ошо мәсьәләлә хаҡлы булмаған, тәһәрәт талап итеп, йәш кешене аптырандырған, тимәксемен.

Икенсенән, ашамлыҡ торған табында ла Ҡөрьән аяттары уҡыу диндә һис тыйылмаған. Үкенескә, "боронғо йола" тип, өҫтәлгә ашамлыҡтарҙы алдан ҡуйыуҙы ла ҡәтғи тыйыусылар бар. Ә инде әлеге түбәтәй мәсьәләһенә килгәндә, түбәтәйҙе өйҙә онотоп ҡалдырғандан да бер ни юҡ! Ир кешенең сәсе ғәүрәткә һаналмай, яланбаш ултырыу ҙа тыйылмай ир кешегә. Бәғзе берәү, әлеге мәҡәләләге һымаҡ, ҡулъяулыҡтың мөйөштәрен төйөп, йә булмаһа, кепкаһын артҡа ҡаратып кейеп, әлеге "строгий" бабайға ярарға тырыша тырышыуға, әммә унышы - артыҡ... (Ҡатын-ҡыҙға, әлбиттә, бындай табындарҙа саҡта ла яулыкта, итәкле, оҙон еңле күлдәктә булыу, муйынын ҡаплау мотлаҡ. Сөнки гүзәл зат тәненең шул һанап ителгән өлөштәре ғәүрәткә (йәшерен булырға тейешле) һанала. Ҡатын-ҡыҙ был хаҡта үҙе лә яҡшы белә тип уйлайым).

Ирҙәр менән ҡатын-ҡыҙҙарҙың бер табында ултырыуы хаҡында. Оҡшаймы ул беҙгә, әллә юҡмы, әммә быны динебеҙ хупламай. Бабайҙар уны уйлап сығармаған. Дин ҡанундарын яҡшы белгән боронғо беҙҙең ҡартатай-ҡәртәсәйҙәр башҡа-башҡа йорттарҙа (бүлмәләрҙә) ултырышҡандар. Хәҙер өҫтәлдәрҙе бер аҙ башҡалап, шартлы рәүештә бүленешеп ултырғандарын күргеләйем. Исмаһам, ана шулай итеп кенә булһа ла, дин талаптарын дөрөҫ үтәргә яҡынларға тырышыу кәрәк, әлбиттә. Тик, бая әйтмешләй, шәриғәттә булмаған, һәр төрлө кәрәкмәгән тыйыуҙар менән халыҡтың башын ҡатырыу ярамай тимәксемен. Мөхәммәт ғәләйһис-сәләм, дингә артыҡ нәмәләр өҫтәп, уны ҡатмарландырыуҙы ҡәтғи тыйған.

Күптәр, бәлки, иғтибар ҙа иткәне барҙыр: һуңғы йылдарҙа ауылдарыбыҙҙа мәҙрәсә тамамлаған йәш имамдар күп кенә. Улар бер ваҡытта ла халыҡҡа башта һөйләнелгән һымаҡ кәрәкмәгән талаптарҙы ҡуймай. Берәй нәмә әйтергә кәрәк булһа, тик Ҡөрьән аяттарына йә иһә Аллаһ илсеһенең сахих хәҙистәренә таяна улар. Һүҙҙәренең ана шул ышанысլы ике сығанаҡ менән раҫланыуы хаҡында ла әйтәләр. Бына шундай әҙәпле, ғилемле имамдарыбыҙға йыш ҡына һорауҙар биреп, дин мәсьәләләрен уларҙан өйрәнергә тырышыу кәрәк. Юғиһә, имамдың аяттар уҡып, доға ҡылғанын көтөп кенә ултырып, хәйер бирешкәндән һуң ашап туйғас, өйҙәргә таралышып китеүҙән бер ниндәй ҙә файҙа булмаҫ...

**Хәлил ҺӨЙӨНДӨКОВ.**

ФӘҺЕМ

# ШӨКӨР ИТЕҮ ТУРАҺЫНДА

### Булғанына риза булыр кәрәк!

Бер һәйбәт кенә урыҫ танышым бар. Исем-шәрифе лә матур ғына. Фамилияны уның Козлов. Минә ҡалһа, хатта матур ғына фамилия. Ә уның ҡыҙы нишләптер ошо фамилияны яратманы.

- Әҙәм көлкөһө. Ошо ла булдымы фамилия! Башҡаларҙыҡы шундай һәйбәт, ҡолаҡҡа ятышлы ғына. Ә минеке - Козлова. Уны әйтә-әйтә оялып бөттөм. Йүнле фамилия тапмағандар бит...

Әйләнгән һайын ошолай көйһөҙләнде ул. Шунан уфтанып ҡуйыр ине.

- Ҡасан ғына кейәүгә сығам инде!

Бына бер мәл кейәүгә сыҡты бит әй Козлова! Фамилияның да елләһен эләктерҙе ул. Хәҙер ул Баранова! Булғанына риза булыр кәрәк ине, тип уфтанып ҡуя ти хәҙер Козлова. Әй, Баранова бит әле ул хәҙер.

### Биргәненә рәхмәт әйтер кәрәк!

Можға-күрек тотоп ҡыуанып торам әле ҡорт баҡсаһында. Күс айыра! Арыу ғына күс былай. Кәм тигәндә лә ике кило бар. Бына бер мәл күс һарыуғыҫҡа йыйыла башланы. Хәҙер тотоп алам мин уны...

Туҡта, кемдер ҡысҡыра түгелме? Башты күтәрә биреп, ян-яҡҡа күҙ һалам. Саҡ күреп ҡалдым тегене. Кәртәләүгә баҫып алған күрше ҡысҡыра икән.

- Тиҙ генә йүгер беҙгә! Әллә кемдең күсе минең алмағасҡа килеп һырыны!

Ҡыуаныс эскә һыймай! Тик торғанда ике күсле булам түгелме! Йүгерҙем күршеләргә. Арыу ғына күс һырыған икән. Кәм тигәндә дүрт кило бар. Уны йыйып, ул-был итеүгә, аһ та уһ килеп, урам осонда йәшәгән күрше килеп тә етте.

- Һай, күршеләрем һәйбәт минең. Ана бит, мине көтөп тә тормағандар. Мин килеп етеүгә күсемде тотоп та ҡуйғандар!

Нишләйһең, бирҙек инде уға күсте. Минең можға менән саҡ күтәреп ҡайтып китте ул күсте. Уның буш можғаһын тотоп ҡайтып инеүемә... үҙемдең күс осоп та киткән!

Биргәненә рәхмәт әйтә белер кәрәк шул, тип уфтанып ҡуйҙым мин.

### Әйтә белергә кәрәк!

Бөрйән урыҫтары башҡортса һыу һымаҡ белә шул. Кемде һөйләһәң, шул ҡаршыңа килер, тип бушҡа әйтмәйҙәр икән. Ана, ҡаршыма шундайҙарҙың берәүһе килә лә ята. Һаулыҡ һорашып, әҙ-мәҙ тора биргәс, ул минән һорай ҡуйҙы.

- Хәлдәр нисек?

Мин эре генә, хатта бер аҙ һаһалма күтәренке тауыш менән яуап бирҙем.

- Бара!

Тора биргәс, һүҙ булмағанда һүҙ булһын тигәндәй, мин дә унан һорай ҡуйҙым.

- Ә һинең хәлдәр нисек?

Урыҫ баҫалҡы һәм тыныс тауыш менән яуап бирҙе.

- Шөкөр!

Ошо һүҙҙәрҙе ишеткәс, минә уңайһыҙ булып китте. Шөкөр итеп йәшәү генә түгел, ә "Шөкөр!" тип әйтә лә белер кәрәк шул!

**Әғләм ШӘРИПОВ.**

ИНТЕРНЕТТАН



# ФАЙҘАЛЫ СӘСКӘЛӘР

■ Ҡытай ғалимдары раҫлауынса, нәркәс, ала миләүшә, зәғферән, крокус һәм умырзаялар баш мейеһе эшмәкәрлегенә ыңғай тәьсир яһай. Мәҫәлән, умырзая Альцгеймер ауырыуы ваҡытында мейе эшмәкәрлеген яҡшырта, тип яҙа "МедВести". Умырзая составындағы галантамин арҡаһында нейрондарҙан килгән мәғлүмәт әүҙемерәк тапшырыла, ул үҙ сиратында ауырыуҙың аҡыл функцияһына ыңғай йоғонто яһай. Нәркәстә лә был матдә бар, хәҙерге ваҡытта ғалимдар был ике үҫемлекте онкология ауырыуҙарҙын дауалауҙа ҡулланыу мөмкинлеген тикшерә. Сидней университетының (Австралия) ғалимдары зәғферәндең күреү ағзаларының һығылмалы күҙәнәктәренә яңғай тәьсирен өйрәнгән. Крокустарҙа иһә колхицин тигән матдә бар. Ул яман шешкә һәм ялҡынһыныуға ҡаршы тороу сифатына эйә. Ала миләүшә тынысландыра, хәүеф тойғоһон юҡҡа сығара, йоҡоһоҙлоҡтан ҡотҡара.

■ Халыҡ-ара ғалимдар төркөмө лидерлыҡ сифаттары менән бәйле ДНК молекулаһын асыҡлаған. Йышыраҡ осраҡта, лидерлыҡҡа ынтылыу нәҫелдән күсә икән. Ғалимдар 4 мең кешенең эшенә, үҙен уратып алған кешеләргә мөнәсәбәтен генетик яҡтан тикшереп, лидерлыҡ һәләтен күрһәтеү тенденцияһы менән rs4950 генотибы бәйле булыуы билдәләнгән. Әммә ғалимдар үткәргән тәжрибәләр күрһәтеүенсә, генетика ыңғай тышҡы мөхит тәьсире менән берләшкәндә генә кеше уңышлы лидер булып китә ала. Тыумыштан кемгәлер лидер позицияһына сығыу һәм унда нығыныу мөмкинлеге бөтөнләй бирелмәһә лә, лидерлыҡ сифатының бер өлөшөн тәрбиәләп була, ти ғалимдар.

■ АҠШ-да киҙеүҙән ярҙам итеүсе түндырма уйлап тапҡандар. Ул бал, имбир, әфлисун һәм лимон һутынан эшләнә. Икенсе вариантында бурбона һәм кайен боросо ҡушыла. Етештереүселәр раҫлауынса, был түндырма инфекциялардан ярҙам итә, тамаҡ ауырыуын бөтөрә. Түндырмала шулай уҡ ауыртҡан тамаҡты тынысландырыусы пектин да бар.

■ Америка табиптары иҫкәртә: күп ҡулланһаң, хатта иң файҙалы ризыҡтар ҙа организмға зыян килтерә ала. Мәҫәлән, кишер һуты башҡа йәшелсә һуттарынан тәме буйынса айырылып тора, шуға ла Небраска университеты ғалимдары уны ашҡаҙан аҫты биҙе, эсәк сирҙәре мәлендә эсмәҫкә кәңәш итә. Бәҡтиһәң, кишерҙә шәкәрҙең төрлө төрҙәре бар икән, айырыуса шәкәр диабеты сирлеләренә кишер ашау тыйыла. Кишер һутын йыш эскән саҡта ашҡаҙан аҫты биҙенә өҫтәмә көсөргәнеш була. Ҡайһы саҡта был һут яҡшыраҡ үҙләштерелһен өсөн, уға һөт өҫтө өҫтәйҙәр, әммә бында ла сама белергә кәрәк. Быларҙан тыш, кишерҙәге бета-каротин йөҙҙөң төҫөн үҙгәртеүе ихтимал. Шуға ла был һутты аҙнаһына бер тапҡыр эсеү ҙә етә.

■ Ҡолаҡсындар ишетеү һәләтен түбәнәйтә, тип яҙа News.am һәм миҫал итеп Эребрулағы университет дауаханаһының аудиология клиникаһы профессоры Клас Меллер һүҙҙәрен килтерә: "Беҙ насар ишетеүсе тотош быуын үҫеп килеүен аңларға тейешбеҙ. Был проблема улар ҡартайғанға тиклем үк барлыҡҡа киләсәк". Быны раҫлап, Меллер мәктәп уҡыусылары менән үткәрелгән һынауҙарҙың һөҙөмтәһен күрһәтә. Даими рәүештә плеерҙан музыка тыңлау сәбәпле, 400 баланың 3 проценты ҡолағында шау барлыҡҡа килеүен билдәләгән. Уларҙың проценты ҙур булмаған кеүек тойолһа ла, Меллер фекеренсә, был балаларҙың йәше хәүефләнергә урын ҡалдыра. Эске ҡолаҡҡа йүнәлтелгән тауыш ни тиклем көслөрәк була, шул тиклем насарыраҡ, был тауыштың ҡолаҡ тишегенә ҡуйылған аппараттан килеүе тағы ла ҙурыраҡ ҡурҡыныс тыуҙыра.

ӘЙТЕР ҺҮҘЕМ...

**Бөтә донъяға билдәле тау саңғыһы курорттары, билдәле брендлы ҡунаҡханалар, төрлө төбәктәрҙән күпләп дауаланырға килеүселәргә матур ял бүләк итеүсе шифаханалар, ҡыҙыҡлы тарихи урындар, иҫ киткес тәбиғәт. Быларҙың барыһы ла - беҙҙең Башҡортостаныбыҙ. Ошо төбәктә йәшәүем менән бәхетлемен һәм ҡайһы берәүҙәр кеүек, ҡайҙалыр күсеп китеү тураһында уйлағаным да юҡ.**

# ҠЫУАНЫП КҮҘӘТӘМ...




Республикабыҙ йылдам аҙымдар менән алға барыуын дауам итә һәм был төрлө өлкәлә лә күренә икәнен әллә күпме миҫалдар менән раҫлап булыр ине. Мәҫәлән, йәш быуын беҙҙең киләсәк, һәм уларҙың үҫеше өсөн башҡарылған төрлө эштәр мотлаҡ үҙ һөҙөмтәһен бирәсәк. Был йәһәттән "Үҫеш нөктәһе" федераль белем биреү үҙәктәре селтәрҙәренең Башҡортостан мәктәптәрендә асылыуы һәм уңышлы эшләүен билдәләп үтергә кәрәк. Балаларҙың ҡайҙа йәшәүенә ҡарамаҫтан, сифатлы белем алыуға ҙур мөмкинлектәр асҡан был проекттың бер үҙәге беҙҙең Дәүләкән районының Суйынсы мәктәбендә асылды. Уның уңышлы эшмәкәрлек алып барыуын теләргә генә ҡала.

Республикабыҙҙың башҡа район-ҡалаларында булып яткан төрлө күренеш-хәлдәрҙә лә телевидениенан ҡарап, ваҡытлы матбуғаттан уҡып, күҙәтеп барам. Халыҡтың һаулығын һаҡлау буйынса күп нәмә эшләнә. Яңы фельдшер-акушер пункттары асыла, дауаханалар төҙөкләндерелә, алдынғы медицина ҡорамалдары менән йыһазландырыла. Быны күптән түгел Мәләүез үҙәк дауаханаһында яңы маммограф аппараты ҡуйылыуы хаҡында хәбәр итте бер әхирәтем. Был да ваҡ эш түгел. Был яңылыҡты ул төбәктәге ҡатын-ҡыҙҙар шул тиклем шатланып ҡабул итеүендә шик юҡ.

Беҙҙең халҡыбыҙ үҙенең яҙыусылары, йырсылары һәм башҡа билдәле шәхестәре менән дан ҡаҙанған милләт. Ошондай шәхестәребеҙҙең береһе - Башҡортостандың халыҡ шағиры, яҙыусы, ғалим, Өфөнөң почетлы гражданы Рәшит Шәкүр. Уның хаҡында матур иҫтәлек халҡыбыҙ күңелендә мәңге йәшәйәсәк. Быға республика Башлығының шәхестең исемен мәңгеләштереү тураһындағы ҡарары ла булышлыҡ итәсәк. Ҡарарға ярашлы, Рәшит Шәкүрҙең тыуған яғында - Стәрлетамаҡ районы мәктәптәренең береһенә уның исеме биреләсәк. Шулай уҡ баш ҡала урамдарының береһенә уның исемен биреү, ул йәшәгән йортта яҙыусының барельефы менән мемориаль таҡта ҡуйыу ҙа ҡаралған. Минең өсөн был бик шәп яңылыҡ булды.

**Сәкинә АСЫЛБАЕВА,**
**ҡунаҡхана администраторы.**
**Дәүләкән районы.**

ИҪКӘРТӘБЕҘ!

# БАЛАЛАР ТИҘ АЛДАНА



**Мутлашыусылар интернетта балаларҙы алдау өсөн даими рәүештә яңы схемалар уйлап таба. РФ Рәсәй Банкының Башҡортостан буйынса бүлексәһе белгестәре енәйәтселәрҙең ниндәй ысулдар ҡулланыуы һәм баланы аферистарҙың йоғонтоһонан нисек һаҡларға кәрәклеге хаҡында иҫкәртә.**

***"Түләүле" баһаламалар.*** Мутлашыусылар балаларға түләү өсөн блогерҙарға комментарий ҡалдырырға йәки тауар тураһында түләүле баһа яҙырға тәҡдим итә. "Эш хаҡы"н сығарыу өсөн мутлашыусылар комиссия өсөн түләүҙе һорай, уларҙың сайтында карта реквизиттарын индерәләр. Һөҙөмтәлә аҡса карта мәғлүмәттәре менән бергә енәйәтсе ҡулына эләгә.

***Аҡса өсөн инструкция.*** Мутлашыусылар социаль селтәрҙә Пушкин картаһынан аҡсаны ҡулаҡсаға әйләндереү буйынса "инструкция" һата. Әммә ысынында был мөмкин түгел. Ғәҙәттә, бындай "инструкция" 100 һум самаһы тора. Мутлашыусылар был аҡсаны үҙҙәренә ала.

***Вирус ебәрәләр.*** Кибер енәйәтселәр социаль селтәрҙәрҙәге аккаунттарҙы боҙоп инә һәм дуҫтар исемлеге буйынса ашығыс рәүештә аҡса һорап мөрәжәғәт итә. "Фотолар тот!" тип яҙыу ебәрәләр, әммә фотоға һылтанма урынына вирус индерәләр, ул гаджеттан логин, пароль һәм түләү кодтарын смс аша урлай.

***Ялған сайттар.*** Мутлашыусылар онлайн уйын өсөн виртуаль инвентарь һатыуҙың ялған сайттарын булдыра: персонаж, кейем, көнкүреш әйберҙәре. Әгәр бындай сайтта реквизиттар индерһәгеҙ, аҡсаны юғалтырға мөмкин. Уйын аккаунтының йәки социаль селтәрҙәрҙең паролен индерһәгеҙ, мутлашыусылар уларҙы ла урлай.

**Дропперлыҡ.** Мутлашыусылар башҡа кешеләрҙән урланған аҡсаны уҡыусылар иҫәбенә күсерә, ә һуңынан бүләк өсөн уларҙы аҡсаға әйләндереүҙе йәки ярҙамсыларына күсереүҙе һорай. Бындай иҫәптәрҙе һәм аралашсыларҙы дропперҙар тип атайҙар. Йыш ҡына үҫмерҙәр енәйәтселәргә ярҙам итеүен үҙҙәре лә белмәй.

### Белгестәр кәңәш итә

**Баланы виртуаль һатып алыуҙа хәүефһеҙлек ҡағиҙәләренә өйрәтеү:**

- Таныш булмаған сайттарға һылтанмалар буйынса күсмәү.
- Таныш булмаған сайттарға паролдәр, уйын логиндары, социаль селтәрҙәр, карта реквизиттары һәм смс-кодтар индерергә ярамағанлығын аңлатыу.
- Виртуаль тауарҙарҙы рәсми ҡушымталарҙа ғына һатып алыу.
- Социаль селтәрҙәрҙә һатып алыуҙар өсөн түләмәҫкә.

**Балаларға еңел аҡса вәғәҙә итеүҙең һәр ваҡыт хәүеф билдәһе булыуын аңлатыу:**

- Әгәр балаға ҡиммәтле әйбер һатып алыу өсөн аҡса кәрәк икән, уға нисек кәрәкле сумманы үҙе туплай алыуын һөйләгеҙ.
- Әгәр оҙаҡ йыйырға тура килһә, аҡсағыҙҙы туплanma иҫәбенә һалырға кәңәш итегеҙ.

**Балаға кибергигиена ҡағиҙәләрен үҙләштереүҙә ярҙам итегеҙ:**

- "Дуҫ"тың үтенестәрен үтәгәнсе, уға шылтыратыу яҡшыраҡ. Уның исеменән социаль селтәрҙә яҙышҡандарҙын белмәҫкә лә мөмкин.
- Зарарлы һылтанмаларҙан һаҡланырға антивирус ҡушымталары ярҙам итә. Уларҙы яңыртырға онотмағыҙ.
- Ата-әсәләр контроле программаларын ҡуйығыҙ.

**Үҫмер менән дропперлыҡ хәүефтәре тураһында һөйләшегеҙ:**

- Картаны йәки уның реквизиттарын бер кемгә лә тапшырырға ярамай.
- Әгәр сит кеше балаға "хата" буйынса аҡса ебәрһә һәм уны күсереүҙе һораһа, быны эшләргә ярамай! Ата-әсәләр аҡса ебәреүсегә сумманы кире ҡайтарыу өсөн банкка мөрәжәғәт итергә тейеш.
- Дропперлыҡ өсөн енәйәт яуаплылығы ҡаралған.

**Дарья СУББОТИНА.**

***✓ Физик көсөңдө сыныҡтырыуҙың оҙон ғүмер йәшәргә булышлыҡ итеүе былай ҙа аңлашыла. Ә бына бының өсөн тағы ла рухыңды һәм күңелеңде сыныҡтырыу ҙа кәрәк булыуын һирәк осраҡта төшөнәләр.***



ИЛ-ЙОРТ ХӘБӘРЕ

# БЕРҘӘМЛЕКТӘ - КӨС

**Махсус хәрби операция башланыуға ике йылдан ашыу ваҡыт үтеп тә китте. Ошо арауыҡ эсендә халыҡ та үҙен төрлөсә күрһәтте: кемдәрҙер үҙ теләге менән яуға ашҡынды, берәүҙәр, мобилизациянан ҡасып, сит илгә сығып китеүҙе хуп күрҙе, бәғзеләре иһә, был миңә ҡағылмай, тип, бер ни булмағандай, донъя көтөүен дауам итте. Ә бик күптәр, бер төптән булып, яу яланында йөрөгән һалдаттарға ярҙам итеүгә, уларҙың ауыр хәлен әҙ булһа ла еңеләйтеүгә көс һалыуҙы дауам итә.**



Беҙҙең Әүешкүл, Ялсығол ауылы халҡы ла был изге эштән ситтә ҡалмай, һәр саҡ хәлдән килгәнсә ярҙам итергә тырыша. Ошо көндәрҙә ағинәйҙәрҙең "Әүешкүл йәшмәләре" фольклор ансамбле ағзаһы Рима апай Байрамғолова улдары Ринат менән Радиктың яугир ҡустылары янына барырға әҙерләнеүен хәбәр итеп, ярҙам ҡулы һуҙыуыбыҙҙы үтенде. Ансамблдең һәм "Ағинәй" ойошмаһының ҡатын-ҡыҙҙары йәһәт кенә йыйылышып, сәк-сәк бешерә һалды, һәр кем үҙенең күстәнәстәрен дә алып килде. Эш араһында Рима апайыбыҙ улдарының үҙҙәре генә түгел, ә Илдар ағай Батыршин менән барырға әҙерләнеүен белдерҙе. Ул арала булмай, Әүешкүл һәм Ялсығол ауылы халҡына яҡташыбыҙ Илдар ағай үҙе лә ярҙам һорап мөрәжәғәт итте. Баҡтиһаң, ул МХО-ла йөрөгән яҡташтарға "УАЗ" машинаһын алып барырға йыйына икән. Был юлы ла ауылдаштар дәррәү күтәрелде. Берәүҙәр аҡсалата ярҙам итһә, икенселәр бал, ҡаҙ, ҡаҙы, ҡорот кеүек танһыҡ ризыҡтар килтерҙе. Медикаменттар, маскировка сеткалары, тәмәке, көндәлек кәрәк-яраҡтары, хатта төҙөлөш материалдары йыйып, юлсыларға хәйерле юл теләп, оҙатып ҡалды йәше-ҡарты.

Бына, ниһайәт, ир-азаматтарыбыҙ тәғәйенләнгән ергә имен-аман барып етеп, гуманитар ярҙамды тапшырыуын белдереп, изге хәбәр еткерҙе. Бер нисә көндән инде улар тыуған яҡҡа ҡайтып еткәс, барыбыҙ ҙа иркен тын алдыҡ.

Илдар ағай Батыршиндың шундай изге юлда йөрөүе күңелдә һоҡланыу ҡатыш ҡыҙыҡһыныу уятты. "Батыршин" фамилияһын тиккә генә йөрөтмәй икән батыр ағайыбыҙ. "Махсус операцияла берәй яҡынығыҙ ҡатнашамы?" тип һорауыма ул былай тип яуап бирҙе:

- Ярҙамды кемгәлер тәғәйен төбәмәнем, үҙем күңелем ҡушыуы буйынса барып ҡайтырға уйланым. Яйлап иптәштәр-таныштар ярҙамы менән аҡса йыйылды. Бер ҡәйнешем август башында яуҙа вафат булды, икенсеһе әлеге мәлдә алғы һыҙыҡта, хат-хәбәре юҡ. Ағайымдың улы ла шунда йөрөй. Дуҫлашып, иптәш булып йөрөгән кешеләрем дә унда, ҡайһыларының улдары яуҙа. Нуғай, Юрмаш, Иглин яҡтарынан, Учалынан таныштар әйбер ебәрергә теләк белдерҙе. Ауылдаш егеттәр ҡустыларына барып ҡайтырға ниәт иткәс, мин дә тәүәккәлләнем, бергә-бергә юл йөрөүе лә күңеллерәк булды.

- Юлда ҡурҡыныс булманымы?- тип һорайым ағайҙан. Ни тиһәң дә, һуғыш барған ерҙәргә яҡын йөрөп ҡайттылар бит.

- Юҡ, ҡурҡһаң, өйҙә генә ултырырға кәрәк бит. Йәш саҡта Себер тарафтарына йөрөп эшләнде, төрлө хәлдәргә осраған булды. Өсәүләп барғас, хәүефһеҙерәк инде. Юлда иҫтә ҡалырлыҡ бер хәл булды, уныһын әйтеп үтмәй булмай. Волгоград өлкәһенән үтеп барғанда бер еңел машина туҡтатты ла, унан 11-12 йәштәр тирәһендәге малай менән бер ҡатын төшөп, беҙҙең янға йүгереп килде. "Гуманитарку солдатам везете?" тип һорай ҡатын. Машинаның артҡы тәҙрәһенән маскировка сеткаларын, тәгәрмәстәрҙе күреп ҡалғандар ҙа, ҡайҙа юл тотоуыбыҙҙы шәйләгәндәр икән. "Беҙҙән дә ярҙам булһын", тип, шешә менән һыу, бер мең аҡса биреп киттеләр. Шул тиклем аптыраным да, ҡыуандым да ошондай изге күңелле кешеләр булыуына, - тине, тулҡынланып, Илдар ағай.

-Яҡшы кешеләр күп бит ул, туғаным. Бына Туймазынан Илшат исемле бер иптәш МХО-ға ныҡ ярҙам итә, - тип дауам итә ағай. - Уның атаһы Әхмәтзыя Залялов Бөйөк Ватан һуғышы ветераны булған, Днепр, Днестр, Прут йылғаларын форсировать иткән. Кривой Рог, Кременчуг, Харьков ҡалаларын фашистарҙан азат итеүҙә ҡатнашҡан. Совет һалдаттарына ҡаршы һуғышҡан украиндар менән дә алышырға тура килгән уға. Ғаиләлә 11-се бала булып донъяға килгән Илшат дуҫ: "Беҙҙең атайҙар шул ваҡытта фашист ҡалдыҡтарын ҡырып бөтөрмәгән икән, бөгөн шуларҙы юҡ итеү - беҙҙең заман егеттәре иңенә төшкән бурыс, ә беҙ ошо яугирҙарға ярҙам итмәһәк, атай-олатайҙарҙың рухын рәнйетеү булыр" - тип, бар көсөн һала, уға ныҡ рәхмәтлемен, ысын дуҫ ул...

Илдар ағай, Ринат менән Радик яуҙа йөрөгән һалдаттарға гуманитар ылау ойоштороуҙа ярҙам иткәндәрҙең бөтәһенә лә гәзит юлдары аша рәхмәт һүҙҙәрен еткереүемде үтенде:

- Әүешкүл мәсетендә, ауыл клубында апайҙар маскирока сеткалары үреп бирҙе. Фәниә Аликаева апай хәйер аҡсаһынан 10 мең аҡса бүлде. Ауылдашыбыҙ Сәүә апай үҙе шәхсән 5 мең аҡса күсерҙе. Орловка ауылынан Әнүәр ағай запас тәгәрмәстәр бирҙе, тиҙҙән үҙе лә "УАЗ"-ын МХО-ға ебәрергә әҙерләй икән. Мәҙәниәт йорто хеҙмәткәрҙәре Фирҙәүес Ғәбитова һәм Рита Әбдрәхимова 5 меңлек дарыуҙар һатып алыуҙы ойошторҙо. Учалынан Шамил Фазылов етәкләгән "Үҙебеҙҙекеләрҙе ташламайбыҙ" тип аталған ойошманан 17 дана маскировка сеткаһы тапшырҙылар. Өфөнән Гөлназ Исхаҡова дрон "Мавик" һатып алып бирешеп, оло ярҙам күрһәтте. Өфө эргәһендәге Самохваловка ауылы старостаһы Оксана ханым, Шмидт, Шамонино, Бурцево ауылдарынан депутаттар ярҙам итте. Волонтер Анна Викторовна ике пакет дарыу, простынялар тотоп, йүгереп килде. Шулай итеп, бөтәһе 40 меңлек медикаменттар алып барҙыҡ. Бөтә ауылдаштарға, дуҫтуғандарға, таныш һәм таныш булмаған ярҙам итеүселәргә ҙур рәхмәт әйтәбеҙ, уларҙың барыһына ла һаулыҡ теләйбеҙ.

Халҡыбыҙҙың "Ил төкөрһә, күл була" , "Берҙәмлектә - көс" тигән әйтем-мәҡәлдәре бар. Был ваҡиға ошо һүҙҙәрҙең ни тиклем дөрөҫ булыуын тағы бер тапҡыр дәлилләне. Һөйләшеү аҙағында Илдар ағай киләсәктә тағы ла гуманитар ылау алып барырға уйлауын еткерҙе һәм әгәр кем дә булһа яуҙа йөрөгән яҡындарына шәхсән күстәнәстәр биреп ебәрергә теләһә, алып барып тапшырырға әҙер булыуын әйтеп үтте.

- Иң мөһиме, был афәт тиҙерәк тамамланһын, егеттәребеҙ иҫәнһау әйләнеп ҡайтһын, ғаилә ҡорһон, балалар үҫтерһен ине, - тип теләк белдерҙе ул. Амин, шулай ғына булһын!

**Гөлшат ШАҺИЕВА.**
**Учалы районы.**

УҢЫШ ҠАҘАН



# ИЗГЕЛЕК ҺӘМ ГҮЗӘЛЛЕК ТУРАҺЫНДА ХАТТАР

## Ун икенсе хат: "Кеше зыялы булырға тейеш"

Зыялылыҡ белемдә генә түгел, ә башҡа кешене аңлау ҡеүәһендә. Ул меңәрләгән ваҡ нәмәлә: бәхәс ҡорғанда ла ихтирамыңды юғалтмау, өҫтәл артында үҙеңде тыйнаҡ тота, башҡаға белдермәй генә (нәҡ белдермәй) ярҙам итә, тәбиғәтте һаҡлай белеүҙә, тирә-яғыңды тәмәке төпсөктәре менәнме, йәки һүгенеү һүҙҙәре, яман идеялар менән ҡыйламауҙа (был да ҡый, ниндәйе әле!) сағыла.

Мин урыҫ Себерендә ысын мәғәнәһендә зыялы крәҫтиәндәрҙе белә инем. Улар өйҙәрен иҫ киткес таҙа итеп тота торғайны, яҡшы йырҙарҙы баһалай, "булған хәлдәр"ҙе ("бывальщина" - үҙе йәки башҡалар менән булған хәлдәр) һөйләй белделәр, көнкүрештәрен яйға һалып йәшәнеләр, ҡунаҡсыл һәм алсаҡ булдылар, сит кешенең ҡайғыһын һәм шатлығын аңлап ҡабул иттеләр.

***Зыялылыҡ - ул аңлау, ҡабул итеү һәләте, донъяға һәм кешеләргә ҡарата сабырлыҡ.***

Зыялылыҡты үҙеңдә үҫтерергә, сыныҡтырырға кәрәк - физик көсөңдө сыныҡтырған кеүек рухыңды ла нығытырға. Ә сынығыу теләһә ниндәй шарттарҙа ла кәрәк һәм мөмкин.

Физик көсөңдө сыныҡтырыуҙың оҙон ғүмер йәшәргә булышлыҡ итеүе былай ҙа аңлашыла. Ә бына бының өсөн тағы ла рухыңды һәм күңелеңде сыныҡтырыу ҙа кәрәк булыуын һирәк осраҡта төшөнәләр.

Эш шунда: тирә-яҡтағыларға ҡарата яман һәм уҫал мөнәсәбәт күрһәтеү, тупаҫлыҡ һәм башҡаларҙы аңламау - күңел һәм рухи көсһөҙлөк, кешенең йәшәргә яраҡһыҙлыҡ билдәһе... Тулы автобуста этешә-төртөшә икән - был көсһөҙ һәм нервылары ҡуҙғыған, арыған, бар нәмәгә яңылыш яуап биргән кеше. Күршеләр менән әрләшә икән - был шулай уҡ йәшәй белмәгән, күңел күҙе ябыҡ кеше. Зауыҡты күрә белмәһә - ул шулай уҡ бәхетһеҙ кеше. Башҡа бер кешене аңлай белмәгән, уның ниәттәрен тик яман тип иҫәпләгән, һәр ваҡыт башҡаларға үсеккән - бындай кеше лә үҙ тормошон мәғәнәһеҙләндереүсе һәм бүтәндәргә йәшәргә ҡамасаулаусы. Рухи көсһөҙлөк физик кәрһеҙлеккә килтерә. Мин табип түгел, әммә быға инанғанмын. Күп йыллыҡ тәжрибәм быға ышандырҙы.

Алсаҡлыҡ һәм яҡшылыҡ кешене физик яҡтан сәләмәт яһап ҡына ҡалмай, ә матурлай ҙа. Эйе, нәҡ матурлай.

Яманлыҡтан йәмерәйгән йөҙ ямаҡайлана, ә яман кешенең хәрәкәттәрендә яһалма түгел, тәбиғәттән бирелгән һәм ҡиммәтерәк баһаланған нәфислек юҡ.

Кешенең социаль бурысы - зыялы булыу. Был һинең алдыңдағы бурыс та. Был шәхси бәхетең нигеҙе һәм бәхет тирәләй урынлашҡан "изгелекле аура".

Был китапта йәш уҡыусылар менән мин һөйләшкән барлыҡ темалар - зыялы (интеллигент) булырға, физик һәм әхлаҡи сәләмәтлеккә, һаулыҡ матурлығына өндәү. Кешеләр һәм халыҡ булараҡ оҙон ғүмерле булайыҡ! Ә атай һәм әсәйҙе хөрмәтләүҙе киңерәк аңларға кәрәк - беҙҙең хәҙерге заманыбыҙҙың атаһы һәм әсәһе булған үткәндәребеҙҙә беҙҙең барлыҡ яҡшы нәмәләребеҙгә ҡарата хөрмәт кеүек, был үткәндәребеҙгә ҡарау - оло бәхет.

**Дмитрий ЛИХАЧЕВ.**



### 30 СЕНТЯБРЯ ПОНЕДЕЛЬНИК ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 3.00 Новости.
9.05 "Модный приговор". [0+]
9.55 "Жить здорово!" [16+]
10.45, 11.20, 0.15, 3.05 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
13.00, 14.15, 16.00, 19.00 Информационный канал. [16+]
15.30, 23.45 "АнтиФейк". [16+]
17.15 "Давай поженимся!" [16+]
18.05 "Мужское / Женское". [16+]
20.00 Т/с "Ищейка". [16+]
21.00 "Время".
21.45 Т/с "Премьера. "Хор". [12+]
22.45 "Большая игра". [16+]

#### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 11.00, 14.00, 17.00, 20.00, 3.00 Вести.
9.30 Доброе утро, республика! [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.30, 18.30 "60 минут". [12+]
13.00 "Наши". [12+]
14.30, 21.10 Местное время. Вести-Башкортостан.
14.55, 2.10, 3.30 Т/с "Тайны следствия". [16+]
17.30 "Малахов". [16+]
21.30 Т/с "Лютик и Анютик". [16+]
23.30 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
4.34 Перерыв в вещании.

#### БСТ

**7.00 Сәләм.**
**10.00, 23.45 Т/с "Сломанные жизни". [16+]**
**11.00 Новости недели (на рус. яз.). [12+]**
**11.45, 13.45, 17.45, 18.15 Интервью. [12+]**
**12.00 Новости СВО (на рус. яз.). [12+]**
**12.15, 4.45 Письма солдатам. [12+]**
**12.30, 5.30 Счастливый час. [12+]**
**13.30, 18.30, 22.30, 1.45 Новости (на баш. яз.). [12+]**
**14.00, 0.45 Бәхетнамә. [12+]**
**15.00 Гора новостей. [6+]**
**15.15 М/с "Нурбостан сәйәхәте". [6+]**
**15.30 М/ф "Мультфильмы". [6+]**
**16.00 Башҡорттар. [6+]**
**16.30, 17.30, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.). [12+]**
**16.45 Х/ф "Советник". [12+]**
**17.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**18.00 Квадратные метры. [12+]**
**19.00 Телецентр. [12+]**
**20.00 Сәңгелдәк. [6+]**
**20.15 Башкирские каникулы. [12+]**
**21.00 Д/с "Родина в сердце". [12+]**
**22.00, 5.00 Тайм-аут. [12+]**
**23.00 Д/ф "Из рода Кубаляк..." [12+]**
**2.15 Спектакль "Таланты и поклонники". [12+]**

### 1 ОКТЯБРЯ ВТОРНИК ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 3.00 Новости.
9.05 "Модный приговор". [0+]
9.55 "Жить здорово!" [16+]
10.45, 11.20 "Давай поженимся!" [16+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
12.00, 14.15, 16.00, 23.45 Информационный канал. [16+]
15.30, 1.10 "АнтиФейк". [16+]
17.15 "Мужское / Женское". [16+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.30 Концерт-митинг "Россия, Донбасс, Новороссия: вместе навсегда!" Трансляция с Красной площади. [0+]
21.00 "Время".
21.45 Т/с "Премьера. "Хор". [12+]
22.45 "Большая игра". [16+]
1.40, 3.05 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]

#### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 11.00, 14.00, 17.00, 20.00, 3.00 Вести.
9.30 Доброе утро, республика! [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.30, 18.30 "60 минут". [12+]
13.00 "Наши". [12+]
14.30, 21.10 Местное время. Вести-Башкортостан.
14.55, 2.10, 3.30 Т/с "Тайны следствия". [16+]
17.30 "Малахов". [16+]
21.30 Т/с "Лютик и Анютик". [16+]
23.30 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
4.34 Перерыв в вещании.

#### БСТ

**7.00 Сәләм.**
**10.00, 23.45 Т/с "Сломанные жизни". [16+]**
**11.00 Простые истории: жить, работать, любить. [12+]**
**11.30, 16.30, 17.30, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.). [12+]**
**11.45, 13.45, 16.45 Интервью. [12+]**
**12.00 Тайм-аут. [12+]**
**12.30, 5.30 Счастливый час. [12+]**
**13.30, 18.30, 22.30, 1.45 Новости (на баш. яз.). [12+]**
**14.00, 0.45 Бәхетнамә. [12+]**
**15.00 Гора новостей. [6+]**
**15.15 Городок АЮЯ. [6+]**
**15.30 М/ф "Мультфильмы". [6+]**
**16.00, 4.30 Уфимские умы. [12+]**
**17.00, 22.00, 5.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**17.45 Криминальный спектр. [16+]**
**18.00 Моя планета - Башкортостан. [12+]**
**18.45 Хоккей. Салават Юлаев (Уфа) - Куньлунь Ред Стар (Пекин). КХЛ.**
**23.00 Воплощаем добрые идеи в жизнь. [12+]**
**2.15 Спектакль "Райса + Файзи". [12+]**
**4.15 Письма солдатам. [12+]**

### 2 ОКТЯБРЯ СРЕДА ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 3.00 Новости.
9.05 "Модный приговор". [0+]
9.55 "Жить здорово!" [16+]
10.45, 11.20, 14.15, 16.00, 19.00, 22.45 Информационный канал. [16+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
15.30, 1.15 "АнтиФейк". [16+]
17.15 "Давай поженимся!" [16+]
18.05 "Мужское / Женское". [16+]
20.00 Т/с "Ищейка". [16+]
21.00 "Время".
21.45 Т/с "Премьера. "Хор". [12+]
0.15 Премьера. "Шоу Вована и Лексуса". [16+]
1.45, 3.05 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]

#### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 11.00, 14.00, 17.00, 20.00, 3.00 Вести.
9.30 Доброе утро, республика! [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.30, 18.30 "60 минут". [12+]
13.00 "Наши". [12+]
14.30, 21.10 Местное время. Вести-Башкортостан.
14.55, 2.10, 3.30 Т/с "Тайны следствия". [16+]
17.30 "Малахов". [16+]
21.30 Т/с "Лютик и Анютик". [16+]
23.30 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
4.34 Перерыв в вещании.

#### БСТ

**7.00 Сәләм.**
**10.00, 0.00 Т/с "Сломанные жизни". [16+]**
**11.00, 5.00 Дорога к храму. [6+]**
**11.30, 16.30, 17.30, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.). [12+]**
**11.45 Криминальный спектр. [12+]**
**12.00 Дознание. [16+]**
**12.15, 13.45, 16.45, 17.45 Интервью. [12+]**
**12.30, 5.30 Счастливый час. [12+]**
**13.30, 18.30, 22.30, 2.00 Новости (на баш. яз.). [12+]**
**14.00, 1.00 Бәхетнамә. [12+]**
**15.00 Гора новостей. [6+]**
**15.15 Физ-ра. [6+]**
**15.30 М/ф "Мультфильмы". [6+]**
**16.00 Автограф. [12+]**
**17.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**18.00 Тормош. [12+]**
**19.00, 4.00 Телецентр. [12+]**
**20.00 Сәңгелдәк. [6+]**
**20.15 Квадратные метры. [12+]**
**20.30 Защитники Отечества. [12+]**
**21.00 Спроси у Дубовского.**
**22.00 Историческая среда. [12+]**
**23.00 "Байыҡ-2024". Республиканский конкурс исполнителей башкирских танцев. [12+]**
**2.30 Спектакль "Судьба выбранная мной". [12+]**

### 3 ОКТЯБРЯ ЧЕТВЕРГ ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 3.00 Новости.
9.05 "Модный приговор". [0+]
9.55 "Жить здорово!" [16+]
10.45, 11.20, 14.15, 16.00, 19.00, 22.45 Информационный канал. [16+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
15.30, 0.15 "АнтиФейк". [16+]
17.15 "Давай поженимся!" [16+]
18.05 "Мужское / Женское". [16+]
20.00 Т/с "Ищейка". [16+]
21.00 "Время".
21.45 Т/с "Премьера. "Хор". [12+]
0.45, 3.05 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]

#### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 11.00, 14.00, 17.00, 20.00, 3.00 Вести.
9.30 Доброе утро, республика! [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.30, 18.30 "60 минут". [12+]
13.00 "Наши". [12+]
14.30, 21.10 Местное время. Вести-Башкортостан.
14.55, 2.10, 3.30 Т/с "Тайны следствия". [16+]
17.30 "Малахов". [16+]
21.30 Т/с "Лютик и Анютик". [16+]
23.30 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
4.34 Перерыв в вещании.

#### БСТ

**7.00 Сәләм.**
**10.00, 0.00 Т/с "Сломанные жизни". [16+]**
**11.00 Моя планета - Башкортостан. [12+]**
**11.30, 16.30, 17.30, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.). [12+]**
**11.45, 13.45 Интервью. [12+]**
**12.00 Новости СВО (на баш. яз.). [12+]**
**12.15 Письма солдатам. [12+]**
**12.30, 5.30 Счастливый час. [12+]**
**13.30, 18.30, 22.30, 2.00 Новости (на баш. яз.). [12+]**
**14.00, 1.00 Бәхетнамә. [12+]**
**15.00 Гора новостей. [6+]**
**15.15 Сулпылар-2024. [6+]**
**15.45 М/ф "Мультфильмы". [6+]**
**16.00 Дознание. [16+]**
**16.15 Патриот РФ. [12+]**
**16.45 Башкирские каникулы. [12+]**
**17.45 Криминальный спектр. [16+]**
**18.00 Башҡорттар. [6+]**
**19.00 Телецентр. [12+]**
**19.45 Мама. [12+]**
**20.00 Сәңгелдәк. [6+]**
**20.15 "Башҡорт йыры-2024". Телевизионный конкурс среди профессиональных исполнителей башкирской песни. [12+]**
**21.00 Простые истории: жить, работать, любить. [12+]**
**22.00, 5.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**23.00 Колесо времени. [12+]**
**2.30 Спектакль "Гильмияза". [12+]**
**4.30 Тормош. [12+]**

### 4 ОКТЯБРЯ ПЯТНИЦА ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00 Новости.
9.05 "Модный приговор". [0+]
9.55 "Жить здорово!" [16+]
10.45, 11.20, 14.15, 16.55 Информационный канал. [16+]
11.00, 14.00 Новости (с субтитрами).
14.40 "АнтиФейк". [16+]
15.10 "Давай поженимся!" [16+]
16.00 "Мужское / Женское". [16+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.40 "Человек и закон" с Алексеем Пимановым. [16+]
19.45 "Поле чудес". [16+]
21.00 "Время".
21.45 "Голос. Дети". Новый сезон. [0+]
23.20 Т/с "Премьера. "Юг". [16+]
0.15 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]

#### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
9.30 Доброе утро, республика! [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.30, 18.30 "60 минут". [12+]
13.00 "Наши". [12+]
14.30, 21.10 Местное время. Вести-Башкортостан.
14.55, 2.45 Т/с "Тайны следствия". [16+]
17.30 Прямой эфир. [16+]
21.30 "Ну-ка, все вместе!" [12+]
23.55 "Истории Большой Страны". [12+]
1.00 Х/ф "Реальный папа". [12+]
4.42 Перерыв в вещании.

#### БСТ

**7.00 Сәләм.**
**10.00, 23.45 Т/с "Сломанные жизни". [16+]**
**11.00, 18.00 Йома. [6+]**
**11.30, 16.30, 17.30, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.). [12+]**
**11.45 Криминальный спектр. [12+]**
**12.00, 13.45, 17.45, 21.15 Интервью. [12+]**
**12.15 Ҡурай даны. [12+]**
**12.30, 5.30 Счастливый час. [12+]**
**13.30, 18.30, 22.30, 1.45 Новости (на баш. яз.). [12+]**
**14.00, 0.45 Бәхетнамә. [12+]**
**15.00 Гора новостей. [6+]**
**15.15 Тирмәкәй. [6+]**
**15.30 М/ф "Мультфильмы". [6+]**
**16.00 Хазина. [6+]**
**16.45, 19.45 История одного села. [12+]**
**17.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**19.00 Честно говоря. [12+]**
**20.00 Сәңгелдәк. [6+]**
**20.15, 22.15, 4.15 Письма солдатам. [12+]**
**20.30 Ете егет. [12+]**
**22.00 СВОих не бросаем. [12+]**
**23.00 "Башҡорт йыры-2024". Телевизионный конкурс среди профессиональных исполнителей башкирской песни. [12+]**
**2.15 Спектакль "Ғәлиәбаныу". [12+]**
**4.30 Защитники Отечества. [12+]**
**5.00 Хазина. [12+]**

### 5 ОКТЯБРЯ СУББОТА ПЕРВЫЙ КАНАЛ

6.00 Телеканал "Доброе утро. Суббота".
9.00 "Умницы и умники". [12+]
9.45 "Слово пастыря". [0+]
10.00, 12.00 Новости.
10.15 Д/с Премьера. MONEYпуляторы. "Развод на любовь".
10.50 "Играем свадьбу!" [12+]
11.50, 12.25 Поехали! [12+]
13.10 "Наше всё". [12+]
14.00 Х/ф "Мужики!.." К 80-летию Александра Михайлова. [0+]
15.50 Д/ф "Александр Михайлов. Кино, любовь и голуби". [12+]
16.55 "Кто хочет стать миллионером?"
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.20 Премьера. "Родня". Музыкальный детектив. [12+]
19.50 "Эксклюзив". [16+]
21.00 "Время".
21.35 "Сегодня вечером". [16+]
23.10 Премьера. "Закрытый показ". "Край надломленной луны". [16+]
2.15 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]

#### РОССИЯ 1

5.00 Утро России. Суббота.
8.00 Местное время. Суббота.
8.35 "По секрету всему свету".
9.00 "Формула еды". [12+]
9.25 "Пятеро на одного".
10.10 Сто к одному.
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.50 "Доктор Мясников". [12+]
12.55 Судьба человека с Борисом Корчевниковым. [12+]
14.30, 20.50 Местное время. Вести-Башкортостан.
14.50 "Юмор! Юмор! Юмор!!!" [16+]
17.50 "Привет, Андрей!" [12+]
21.00 Х/ф "Большая семья". [16+]
0.45 Х/ф "Мальчик мой". [12+]
4.25 Х/ф "Нарочно не придумаешь". [12+]
6.17 Перерыв в вещании.

#### БСТ

**7.00 Доброе утро! [12+]**
**7.30, 18.30 Новости (на баш. яз.).[12+]**
**7.45 Защитники Отечества. [12+]**
**8.15 Ете егет. [12+]**
**9.00 Хазина. [6+]**
**9.30 Новости СВО (на рус. яз.). [12+]**
**9.45 СВОих не бросаем. [12+]**
**10.00 М/ф "Мультфильмы". [6+]**
**10.30 Әкиәтсе. [6+]**
**10.45 Гора новостей. [6+]**
**11.00 Ат уйнатып. [12+]**
**11.45 Елкән. [6+]**
**12.15 Папа может всё! [6+]**
**12.30 Квадратные метры. [12+]**
**12.45, 19.00 Письма солдатам. [12+]**
**13.00 Автограф. [12+]**
**13.30, 4.45 Башҡорттар. [12+]**
**14.00 Дарю песню. [12+]**
**16.00 Колесо времени. [12+]**
**17.00 Д/ф "Документальный фильм". [12+]**
**18.00 Уфимские умы. [12+]**
**19.15, 5.15 Вопрос + Ответ = Портрет.**
**20.00 Сәңгелдәк. [6+]**
**20.30 "Байыҡ-2024". Республиканский конкурс исполнителей башкирских танцев. [12+]**
**21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.). [12+]**
**22.00, 6.00 Республика LIVE #дома.**
**22.30, 2.00 Новости недели (на баш. яз.). [12+]**
**23.15 Ҡурай-шоу. [12+]**
**23.45 Караоке по-башкирски. [12+]**
**0.15 Концерт Риммы Амангильдиной. [12+]**
**2.45 Спектакль "Любовница". [12+]**

### 6 ОКТЯБРЯ ВОСКРЕСЕНЬЕ ПЕРВЫЙ КАНАЛ

6.00, 10.00 Новости.
6.10, 0.35, 1.20 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
6.50 Играй, гармонь любимая! [12+]
7.35 "Часовой". [12+]
8.05 "Здоровье". [16+]
9.10 "Непутевые заметки" с Дмитрием Крыловым. [12+]
9.30 "Мечталлион". Национальная Лотерея. [12+]
10.15 "Жизнь других". [12+]
11.05 "Повара на колесах". [12+]
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 "Видели видео?" [0+]
14.00 Х/ф "Доживем до понедельника". Ко Дню учителя. [12+]
16.05 Премьера. Праздничный концерт ко Дню учителя. [12+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
19.00 Премьера. "Точь-в-Точь". [16+]
21.00 "Время".
23.00 "ArtMasters". Церемония награждения в Большом театре. [12+]

#### РОССИЯ 1

6.40 М/ф "Смотрим мультфильмы".
7.20 "В кругу друзей".
8.00 Местное время. Воскресенье.
8.35 "Когда все дома с Тимуром Кизяковым".
9.25 Утренняя почта с Николаем Басковым.
10.10 Сто к одному.
11.00, 14.00, 17.00 Вести.
11.30 Большие перемены.
12.30 "Истории Большой Страны". [12+]
13.30 Т/с "Фантазёр". [12+]
14.30 Местное время. Вести-Башкортостан.
15.00 "Юморина-2024". [16+]
17.50 "Песни от всей души". [12+]
20.00 Вести недели.
22.30 Москва. Кремль. Путин.
23.00 Воскресный вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
1.35 Х/ф "Паутинка бабьего лета". [16+]
3.16 Перерыв в вещании.

#### БСТ

**7.00 Доброе утро! [12+]**
**7.30 Новости (на баш. яз.). [12+]**
**7.45 Йома. [6+]**
**8.15 Тормош. [12+]**
**8.45 Ҡурай даны. [12+]**
**9.00 Орнамент. [12+]**
**9.15 Мама. [12+]**
**9.30 Новости СВО (на баш. яз.). [12+]**
**9.45, 21.15, 6.45 Специальный репортаж. [12+]**
**10.00 М/ф "Мультфильмы". [6+]**
**10.30 Тирмәкәй. [6+]**
**10.45 Городок АЮЯ. [6+]**
**11.00 Гора новостей. [6+]**
**11.15 Урал батыр. [6+]**
**11.45 М/с "Нурбостан сәйәхәте". [6+]**
**12.00 Сулпылар-2024. [6+]**
**12.30 Новости недели (на баш. яз.). [12+]**
**13.15, 4.45 Башкирские каникулы. [12+]**
**14.00 Дарю песню. [12+]**
**14.30 Дорога к храму. [6+]**
**15.00 Честно говоря. [12+]**
**15.45 "100 имён Башкортостана". [12+]**
**16.15 Спектакль "Ынйыҡай менән Юлдыҡай". [12+]**
**17.45 Елкән. [6+]**
**19.45 Патриот РФ. [12+]**
**20.00 Автограф. [12+]**
**20.30 Атлас Баженова: Башкортостан. [12+]**
**21.00 Дознание. [16+]**
**21.30, 6.00 Новости недели (на рус. яз.). [12+]**
**22.15, 5.30 Республика LIVE #дома. [12+]**
**22.45 "Ашкадар моңдары". Гала-концерт I Республиканского конкурса среди самодеятельных исполнителей башкирских народных песен. [12+]**
**0.30 Спектакль "Мы с тобой одной крови". [12+]**
**2.15 Колесо времени. [12+]**
**3.15 Письма солдатам. [12+]**
**3.30 Моя планета - Башкортостан. [12+]**
**4.00 Вопрос + Ответ = Портрет. [6+]**

## НАМАҪ ВАҠЫТТАРЫ

*1446 һижри йыл.*

| Сентябрь - Октябрь (Рабиғел әүүәл - Рабиғел ахыр) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалҡа | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Аҡшам намаҙы | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 30 (27) дүшәмбе | 5:31 | 7:18 | 13:30 | 16:55 | 18:52 | 20:39 |
| 1 (28) шишәмбе | 5:34 | 7:20 | 13:30 | 16:53 | 18:49 | 20:37 |
| 2 (29) шаршамбы | 5:36 | 7:22 | 13:30 | 16:51 | 18:47 | 20:34 |
| 3 (30) кесе йома | 5:38 | 7:24 | 13:30 | 16:49 | 18:44 | 20:31 |
| 4 (1) йома | 5:40 | 7:26 | 13:30 | 16:47 | 18:42 | 20:28 |
| 5 (2) шәмбе | 5:42 | 7:28 | 13:30 | 16:44 | 18:39 | 20:26 |
| 6 (3) йәкшәмбе | 5:44 | 7:30 | 13:30 | 16:42 | 18:37 | 20:23 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.*

✓ *Саф йөрәктән тәҡдим ителгәндә саф йөрәк менән ҡабул итергә кәрәк.*
*(Александр Дюма).*



БАШ ЭШЛӘТМӘК

# БӨТӨН ДОНЪЯ ЙӨРӘК КӨНӨ

**Был иҫтәлекле көн Бөтә донъя йөрәк федерацияһы ойошмаһы тәҡдиме менән беренсе тапҡыр 1999 йылда билдәләнә. Акцияны Бөтә донъя һаулыҡ һаҡлау ойошмаһы күтәреп ала. Башта сентябрь айының һуңғы йәкшәмбеһенә тура килһә, 2011 йылдан алып 29 сентябрҙә билдәләү ҡарала.**



Бөтә донъя йөрәк көнө йәмғиәттә йөрәк-ҡан тамырҙары сирҙәре тураһында мәғлүмәтлелекте арттырыу, төрлө халыҡ ҡатламдарында ишемик ауырыу һәм мейе инсультын иҫкәртеү сараларын күреү маҡсатында булдырылған. Уның девизы: "Йөрәк йәшәү өсөн".

Статистикаға ярашлы, йөрәк-ҡан тамырҙары ауырыуҙарынан ир-егеттәр ҙә, ҡатын-ҡыҙҙар ҙа берҙәй яфалана. Ир-егеттәр өсөн 50-60 йәштә иң ауыр осор, ҡатын-ҡыҙҙарҙың 65-75 йәшендә был ауырыу ғүмерен өҙөүе ихтимал.

Бөтә донъя йөрәк федерацияһы мәғлүмәттәренә ярашлы, инфаркт һәм инсульттан ваҡытынан алда яҡты донъя менән хушлашыуҙы кисектереп була. Бының өсөн сәләмәт тормош алып барырға, тәмәке тартыу, ашау һәм физик әүҙемлекте контролдә тоторға кәрәк. Шул уҡ ваҡытта, үҙеңде көн һайын да ауыр күнекмәләр менән йонсоторға түгел, ә ни бары күберәк йәйәү йөрөргә, хәрәкәт итергә һәм мотлаҡ йоҡондо туйҙырыу мөһим.

Рәсәйҙә Йөрәк көнөндә һәм унан һуңғы аҙнала Сәләмәт йөрәк Рәсәй милли аҙнаһы башлана.




Йәмилә ШӘРӘФЕТДИНОВА төҙөнө.

**37-се һандағы сканворд яуаптары.**

**Горизонталь буйынса:** Уңышлыҡ. Ыҫпай. Туҙан. Буяу. Ләззәт. Таҙғара. Ҡаяу. Әй. Ҡорҡот. Тут. Һалам. Сәхәбә. Ландшафт. Тамсыгөл. Түбә. Рада. Сейф. Өгөт. Атай. Әхәт.

**Вертикаль буйынса:** Тыныслыҡ. Баҙнатлыҡ. Телем. Тупраҡ. Сысҡан. Һан. Ырыуҙаш. Өрфөйә. Нөсхә. Алла. Ҡыйынлыҡ. Сталактит. Рәхмәт. Зауыҡ. Тәхет. Әлтә.

## СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ



### М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры



**3 октябрь "Бөйрәкәй"** (Т. Ғарипова). 16+
**4 октябрь "Еҙнәкәй"** (Х. Ибраһимов), музыкаль комедия. 12+
**5 октябрь "Йәш йөрәктәр"** (Ф. Бурнаш). 18.00 12+
**6 октябрь "Килен"** (З. Мусина, З. Бураҡаева инсц.). 18.00 16+

### М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры

**3 октябрь "У ковчега в восемь"** (У. Хуб), ғаилә өсөн спектакль. 6+

### Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театры

**4 октябрь "О чем поет осень?"** (В. Щербакова). 18.00 0+
**5 октябрь "Три поросенка"** (Д. Гараева). 12.00, 15.00 0+
**"О чем поет осень?"** (В. Щербакова). 14.00 0+
**6 октябрь "Терем-теремок"** (Д. Гараева, В. Щербакова). 12.00, 15.00 0+
**"О чем поет осень?"** (В. Щербакова). 14.00 0+

### Х. Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһы

**1 октябрь "Живущий в двух мирах"**, Ансар Ғәлиндың күргәҙмәһе. 17.00 6+
**"Венок Пушкину"** концерт. 6+
**3 октябрь "Бах һәм Шопен"**, концерт. 6+
**"Яраткан баш ҡала музыкаһы"**, музыкаль-әҙәби лекторий. 6+
**4 октябрь "Уралтау - батырҙар иле"**, театрлаштырылған тамаша. 6+
**5 октябрь "Музыку слушаем вместе"**. 11.00 0+

### Салауат дәүләт башҡорт драма театры

**3-4 октябрь Премьера! "Һөйөү көсө"** (Т. Дәүләтбирҙина), мелодрама. 12+
**5 октябрь "Золушка"** (Ш. Перро), әкиәт. 13.00 0+

### Стәрлетамаҡ дәүләт театр-концерт берләшмәһе

**1 октябрь "Йәнә йырҙар илһамландыра"** "Сәрби" сыуаш эстрада-фольклор ансамбле концерты. 6+

### А. Мөбәрәков исемендәге Сибай дәүләт башҡорт драма театры

**1 октябрь "Әлдермештән Әлмәндәр"** (Т. Миңнуллин), фантасмагория. 12+

### БР Милли музейы

**1 октябрь "Күңелдәр һәр саҡ йәш!"** Ололар көнөнә акция. 11.00 50+
**4 октябрь "Тейелмәгән тәбиғәт донъяһы"** экскурсия. 15.00 6+
**5 октябрь "Шайморатов генерал"** экскурсия. 14.00 12+
**"Тейелмәгән тәбиғәт донъяһы"** экскурсия. 15.00 6+

МӘҘӘНИ МАЙҘАН

# ҠУРСАҠТАР ТАМАШАҺЫНА...

**"Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театры яңыртылған, заманса һәм уңайлы бинала 93-сө иҗад миҙгелен асырға әҙерләнә", - тип яҙа республика етәксеһе Радий Хәбиров үҙенең телеграм-каналында.**



"2023 йылдың декабренән алып бында 462 спектакль сәхнәләштерелде, уларҙы 81 149 тамашасы ҡараны, - тине ул. - Декабрҙә иҫкә алам, сөнки тап шул ваҡытта артистар "Мәҙәниәт" милли проекты буйынса күләмле реконструкциянан һуң тәүге спектаклен ҡуйҙы".

Билдәле булыуынса, яңы миҙгелдә премьералар, республика буйлап гастролдәр, фестивалдәрҙә ҡатнашыу ҡаралған. 26-29 сентябрҙә Өфөлә Сергей Образцов исемендәге дәүләт академия ҡурсаҡ театрын гастролдәргә көтәләр. Уның артистары Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театрында алтын фондтан бер нисә спектакль күрһәтә.

"Кыҙыҡ, ҡурсаҡ сәхнәһе оҫталары беҙҙең театрҙы нисек баһалар икән?" - тип өҫтәне Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров. Уның билдәләүенсә, Башҡорт ҡурсаҡ театрында тормош - сәхнәлә генә түгел. Бында балалар студияһы ла эшләй. Режиссерҙар, актёрҙар һәм рәссамдар балалар менән бергә һүрәт төшөрә, ҡурсаҡтар яһай, декорациялар уйлап сығара һәм спектаклдәр сәхнәләштерә.

"Октябрь айында театрҙа мультимедиалы уйын залын асырға уйлайбыҙ. Компьютер технологиялары ярҙамында балалар һәм уларҙың ата-әсәләре башҡорт мәҙәниәте һәм гөрөф-ғәҙәттәре, риүәйәттәре менән таныша алыр", - тип йомғаҡ яһаны республика етәксеһе.

# ШИҒЫРЫН ЯТЛА ЛА...

**Республикала Мостай Кәримгә арналған флешмоб башланды. Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, 2024 йылдың 20 октябрендә Башҡортостандың халыҡ шағиырының тыуыуына 105 йыл тула (1919 - 2005).**

- Уның әҫәрҙәре беҙҙе бөйөк эштәргә илһамландыра һәм күңелебеҙҙә республикабыҙ мәҙәниәте өсөн ғорурлыҡ тойғоһо уята, - тип белдерҙе акцияны ойоштороусылар. - Проектҡа ҡушылығыҙ һәм республиканың мәҙәни мираҫына үҙ өлөшөгөҙҙө индерегеҙ.

Флешмоб Башҡортостандың Милли музейында башланды. Әле уға Мәжит Ғафуриҙың мемориаль йорт-музейы, Шаляпин исемендәге Музыка музейы, Киров районы хакимиәте хеҙмәткәрҙәре лә ҡушылды. Флешмотбо ҡатнашыу өсөн Мостай Кәримдең яратҡан шиғырын ятлап һөйләп, видеоға төшөрөп, "Бәйләнештә"ге сәхифәгә һалырға кәрәк.

# БАҺАЛАНЫРҒА ЯҘЫН!

**Салауат дәүләт башҡорт драма театры Грозныйҙа (Чечен Республикаһы) "Федерация" Бөтә Рәсәй милли театрҙар фестивалендә башҡорт әҙәбиәте классигы Мостай Кәримдең повесы буйынса "Ярлыҡау" балладаһын сәхнәгә сығара.**

Театрҙың матбуғат хеҙмәтенән хәбәр итеүҙәренсә, Грозный ҡалаһында "Ярлыҡау" спектаклен "Алтын битлек"тең эксперт советы рәйесе һәм "Федерация" фестиваленең художество советы ағзаһы Дмитрий Родионов баһалай. Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, эксперт советы ҡарары буйынса "Ярлыҡау" спектакле (режиссер Илсур Ҡаҙаҡбаев) видеояҙма буйынса алдан һайлап алыуҙы үтеп, "Дәғүә итеүсе" статусын алды.

"Тимәк, эксперттар Рәсәйҙең төрлө театрҙарынан ебәрелгән спектаклдәрҙең яҙмаһын баһалаған. Хәҙер спектаклдең яҙмышын эксперт советы ағзалары уны үҙҙәре ҡарағандан һуң хәл итергә тейеш. Уларҙың ҡарары 2024 йылдың аҙағына тиклем иғлан ителә", - тип билдәләне театрҙың матбуғат секретары Динә Бәширова.

Әйткәндәй, Дмитрий Родионов - "Алтын битлек" Милли театр премияһының эксперт советы рәйесе, театр белгесе, театр тәнҡитсеһе, "Сцена" журналының баш мөхәррире, Бахрушин исемендәге Театр музейының генераль директоры (2007-2021), К. С. Станиславский премияһы лауреаты.

# РАУИЛ БИКБАЕВҠА АРНАП...




**Ырымбур өлкәһендә Башҡортостандың халыҡ шағиры Рауил Бикбаевтың исеме мәңгеләштерелде. Аҡбулаҡ районының Аҡбулаҡ ҡасабаһында яҙыусыға мемориаль таҡтаташ асылды.**

Билдәле шағир, ғалим һәм йәмәғәт эшмәкәре Рауил Бикбаев 1953-1956 йылдарҙа Аҡбулаҡ педагогия училищеһында уҡыған. Үҙенең күп кенә әҫәрҙәрен, шул иҫәптән "Вокзал" поэмаһын ошо осорҙа ижад иткән. Аҡбулаҡ педагогия училищеһында алған тәрән белем, яҡшы тәьҫораттар бөйөк шәхестең формалашыуына йоғонто яһаған, тип билдәләнеләр республиканың Яҙыусылар союзында. Мемориаль таҡтаташты Ырымбур ҡалаһы башҡорттары ҡоролтайы (етәксеһе Марат Сарбаев) эшләгән. Әйткәндәй, "Башинформ" Башҡортостанда күренекле ғалим һәм яҙыусы, Башҡортостандың халыҡ шағиры, Өфөнөң почетлы гражданы Рәшит Шәкүрҙең исемен мәңгеләштереү тураһында хәбәр иткәйне.

ТЕЛҺӨЙӘР

# МУҘЫЙҘАН ӘШКӘРТЕҮ

**Өфөнөң баҡса-парктарында йыл һайын муҙыйға ҡаршы саралар ойоштороло. Ошо һөйләмдәге "муҙый" тигән һүҙ, моғайын, бәғзеләргә аңлашылмаҫ. Тәүҙә уға туҡталайыҡ.**

**Муҙый.** Йоғошло ауырыу таратҡан бөжәктәр шулай атала. *Муҙыйға ҡаршы ағыу ҡулланыу. Муҙыйҙан һаҡланыу өсөн прививка яһайҙар.*

**Мөсәй.** Мөсәй ул - өмәсәләрҙе һыйлағанда өләшләп таратылған ит, өлөш, мөсә һөйәге. *Мөсәй таратыу. Мөсәй бүлеү. Мул мөсәй.*

**Мунау.** Әрсеп юныу, өҫтән һыҙырып юныу була мунау. *Ағасты мунау. Йүкә ҡайырыһын мунау.*

**Мунда.** Аттың ҡулбашы өҫтөндәге ҡалҡыу урын. *Мундаһы бейек ат. Батыр һуҡҡан бүрене аттың мундаһы аша һалған.*

**Мәрд, мәрдән.** "Кыйыу, батыр ир; ысын ир" мәғәнәһен еткергән һүҙҙәр. *Мәрд егет. Ир баланы мәрдән итеп тәрбиәләү.*

**Шулай итеп, илдә мәрдәндәр артһын, тип теләйек.**

**НУРБИКӘ** әҙерләне.

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡикәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# АУЫР ЭШТЕ...

## ҡүмәк ҡул еңгән

Аяғың ауыр булһа, атлаған һайын эҙ ҡалыр.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Ғәфү итеү - көслөләр сифаты. Көсһеҙҙәр бер ваҡытта ла ғәфү итмәй.

**(Махатма Ганди).**

Саф йөрәктән тәҡдим ителгәнде саф йөрәк менән ҡабул итергә кәрәк.

**(Александр Дюма).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Үҙ иленең бөйөк хирургы булған докторҙы Хирургтарҙың милли йәмғиәтенә президент итеп ҡуйғандар. Был көндө уның хөрмәтенә оло байрам ойошторолған. Ләкин докторҙың йөҙөндә шатлыҡтың әҫәре лә юҡлығын күреп, дуҫы һорай ҡуйған:**

**- Ниңә һин бик бойоҡ күренәһең? Һин бит бөйөк хирург һәм һиңә берәү ҙә тиңләшә алмай, шулай булғас, һин бәхетле булырға тейешһең?**

**- Мин бер ваҡытта ла хирург булырға теләмәнем, - тип яуаплаған доктор. - Мин үҙем теләмәгән өлкәлә уңыш ҡаҙандым. Әгәр ҙә хирург булып уңыш ҡаҙана алмаһам, минең икенсе өлкәгә хеҙмәт итергә тигән өмөтөм булыр ине, хәҙер иһә мин был шөғөлгә ғүмерлеккә бәйләндем...**

**- Һин шаяртаһыңдыр ул? - ти дуҫы аптырап. -Һинең ғаиләң бәхетле, ҡатының, балаларың бәхетле, бындағы һәр кем бәхетле һәм һиңә оло хөрмәтен белдерә...**

**- Ләкин мин үҙемде үҙем хөрмәт итмәйем, был - иң мөһиме, - тип һүҙен дауам итә хирург. - Мин бейеүсе булырға теләгәйнем, атай-әсәйем минең теләгемде хупламаны һәм мин улар ихтыярына буйһондом. Мин бигерәк ихтыярһыҙ инем шул. Һәм мин бөйөк хирург булыуым менән бәхетһеҙмен. Мин бәхетһеҙ, сөнки мин донъялағы иң насар бейеүсемен. Мин бейей белмәйем, бейергә өйрәнә лә алмайым - бына шунда инде минең бәләм...**

**...Эйе, үҙ-үҙең менән ҡәнәғәт булыу йәмғиәттән түгел, ә тәбиғәттән килә шул. Беҙ үҙ яҙмышыбыҙҙы үҙебеҙ менән бергә йөрөтәбеҙ, ләкин был аңһыҙ әйбер. Яҙмышҡа эйәреп ҡаҙанған еңеүҙәрегеҙ тураһында бер кем дә белмәҫкә мөмкин, ләкин һеҙ уны аңығыҙ менән тояһығыҙ. Һеҙ Нобель премияһы алмаҫҡа ла мөмкинһегеҙ, сөнки ул бер ваҡытта ла үҙ-үҙе менән ҡәнәғәт булған кешеләргә бирелмәй. Үҙ-үҙенән ҡәнәғәт булған берәү ҙә, Будда ла, Ғайса бәйғәмбәр ҙә, был премияны алмаған. Һәм бындай хәл киләсәктә лә булмаясаҡ, сөнки Нобель премияһы йәмғиәткә ихлас буйһонған, үҙенең түгел, ә йәмғиәт маҡсаттарына өлгәшкән кешеләргә бирелә. Нобель премияһы лауреаттарына ҡарағыҙ әле: һеҙ уларҙан да бойоғораҡ йөҙлө башҡа кешеләрҙе тапмаҫһығыҙ. Уларҙың күбеһе үҙ-үҙенән ҡәнәғәтһеҙлек кисереп йәшәгән, ҡайһы берҙәре үҙ-үҙенә ҡул һалған кешеләр. Был осраҡлы түгел, бында тәрән мәғәнә бар. Премиялар ҡәнәғәтләндерә алмай. Шуның өсөн, үҙегеҙҙең аңһыҙ тойолған тәбиғәтегеҙгә эйәрегеҙ, уны аңлы рәүештә ниҙер ҡаҙанырға, шатланырға йә ҡайғырырға мәжбүр итмәгеҙ..."**

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы
№ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

1 582218 911006 24038

**Баш мөхәррир:**
**Гөлфиә Гәрәй ҡыҙы ЯНБАЕВА.**
**Мөхәрририәт:**
Сәриә ҒАРИПОВА,
Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **kiskeufa@mail.ru**
ЯСЙ "СПУТНИК-ЮГ" типографияһында баҫылды. Тел.: 8 (967) 744-77-33. (453400, БР, Дәүләкән ҡалаһы, Мәжит Ғафури ур., 4 й., 203 офис).

**Телефондар:**
**Баш мөхәррир** 253-25-44
**Хәбәрселәр** 252-39-99
**Матбуғат таратыу** 252-39-99

**Ҡул ҡуйыу ваҡыты -**
26 сентябрь 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 14 сәғәт 30 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44** телефоны буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.

«Киске Өфө»нөң индексы – **ПР905**
Тиражы - 2750
Заказ - 1669